ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 март (буранай) 2024

№9 (1102)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Еңеүгә ышанысты нығытты



5

Башҡорт телен...

ил кимәлендә яңғыраталар



6

Тыуған мәктәбем...

шәхесемдең ныҡлы нигеҙен төҙөүсе ул



8-9

Һыуыҙ коймағына саҡырҙыҡ



16

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы дуҫтарыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 873 һум 12 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә 1 апрелдән, ғәҙәттәгесә, почта хаҡтарҙы тағы арттырасаҡ икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Гүзәл заттың үҙең баһалаған сифаттары тураһында һөйләсе...

***Искәндәр САЛАУАТОВ, нефтсе:*** Ҡатын-ҡыҙ - донъя тотҡаһы, тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Ысынлап та, бөтә донъя тап гүзәл зат тирәһендә әйләнә. Шуға күрә улар иң яҡшы сифаттарға ғына эйә булырға тейеш, тип уйлайым. Сөнки ҡатын-ҡыҙ ниндәй булһа, донъябыҙ ҙа, өйөбөҙ ҙә, ғаиләбеҙ ҙә, балаларыбыҙ ҙа, беҙ, ир-егеттәр ҙә, шундай була. Тәртипле ҡыҙҙар янында егеттәр ҙә үҙен ипле тота. Әҙәплеләр янында бер кем дә тәмәке тоҡандырмай, һүгенмәй.

Мин зауыҡ менән кейенә белгән гүзәл заттарға иғтибар итәм. Бот-саты ябыҡ, килешле кейем кейгән ҡыҙҙар оҡшай. Кейем кеше тураһында күп нәмә һөйләй. Бынан тыш, тәмле итеп бешерә белергә тейеш минең икенсе яртым. Ир-егеттең йөрәгенә юл ашҡаҙан аша үтә бит. Бешереп-төшөрөнөп көтөп торған ҡатыны булғанда ир кеше эштән һуң һәр ваҡыт өйөнә ашҡынып торасаҡ. Туҡ булһа, алкоголь дә эскеһе килеп тормаясаҡ. Туҙы ашҡаҙанға алкоголь бармай бит ул.

Көнсөл булмаһын. Көнләшеү ул ҡатын-ҡыҙҙы ныҡ йәмһеҙләй, сөнки был хис кешене эстән ашай, сәләмәтлеген ҡаҡшата. Һаулыҡ китһә, тышҡы матурлыҡ та юҡҡа сыға. Ҡатын-ҡыҙ - йәшәйеш ҡото, иң беренсе үҙендәге ҡотто, үҙенең матурлығын, һаулығын һаҡлаһа, эргә-тирәһендәгеләргә ошо ҡот-нур таралаcаҡ. Ғаиләһенә, балаларына, иренә. Был минең өсөн төп һәм мөһим сифат.

Ҡатын-ҡыҙ көнләшһә, тимәк, үҙен яратмай, ир-егет көнләшһә, тимәк, үҙен ныҡ ярата, тигән аҡыл бар бит. Кеше үҙен ярatһа, һәр саҡ камиллыҡ һәм үҫеш юлында була. Миңә шундайҙар оҡшай.




ДИАЛОГ

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ НӘЗӘКӘТЛЕГЕ...

## ир-егетте уңышҡа илтеүсе көс

**Йәмғиәт гелән ҡатын-ҡыҙҙан күберәкте талап итә. Ир-ат ул барыбер ергә нығыраҡ баҫып тора, ә тормоштоң хис-тойғолар, матурлыҡ өсөн яуап биргән яғы гүзәл зат иңендә. 8 Март - Халыҡ-ара байрам көнөндә Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология факультеты деканы, педагогия фәндәре кандидаты, доцент Лилиә Рәшит ҡыҙы ХАЛИҠОВА һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәйрүзә Юныс ҡыҙы ҮТӘБАЕВА менән ошо хаҡта фәлсәфә ҡорабыҙ.**

**Классик, донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр, тигән һәм был ҡанатлы фекерҙе йышыраҡ ҡатын-ҡыҙға төбәп әйткәндәрен күрәбеҙ. Әлбиттә, бында гүзәл заттың тышҡы матурлығынан бигерәк, эске торошо күҙ уңында тотолалыр?**

**Л. Халиҡова:** Бик хаҡ һүҙҙәр. Ысынлап та, кеше тышҡы яҡтан да, эстән дә матур булырға тейеш. Бөгөн ни эшләптер тышҡы ҡиәфәткә нығыраҡ баҫым яһайҙар, йәшлек үҙе гүзәллек булһа ла, йәш ҡыҙҙар ҙа бының менән артыҡ мауыға. Бер көләмәс иҫкә төшә. Имеш, бер ҡатын хәл өҫтөндә ятҡанда Аллаһ менән осраша ла: "Үлерменме икән ни?" - тип һорағас, Аллаһ: "Юҡ, тағы ла 40 йыл йәшәйһең әле", - тип яуап бирә. Быны ишеткәс, ҡатын дәртләнеп китеп, пластик операциялар яһата, әле алда оҙайлы ғүмер бар бит. Тик бер көн урамда машина бәреп, ул теге донъяға юллана. Тағы ла Аллаһ алдына барып баҫҡас, "Ни эшләп алданың мине?" тип һорай һәм Унан: "Аһ, мин һине таныманым бит!" - тигән яуап ишетә. Көләмәс булһа ла, бында тәрән мәғәнә һалынған - бер төрлө ҡалыпланған һылыулыҡҡа, образға инеп китеү кешенең үҙенсәлеген юғалтыуға килтерә.

**Ф. Үтәбаева:** "Һары матур - иң матур, ҡара матур бик матур" тиҙәрме әле? Бер тапҡыр "Йәмһеҙҙәргә лә күҙ тейә ул", - тип көлдөргәйнеләр, тимәк, кем дә матур, кем дә гүзәл. Шул матурлыҡты күрһәтә белеү зирәклеге, нескәлеге генә кәрәктер ул. Ҡасандыр, матурлыҡ - ул йәшлек билгеһе тип уйлай инем, әле иһә йөҙөн һырҙары нурлаған инәйҙәргә, сал сәстәрен ипле йыйып, йәшенә тап килтереп кейенгән оло апайҙарға һоҡланам.

Ҡатын-ҡыҙ булып тыуғас, матур булмайынса хаҡыбыҙ юҡ. Кеше тышҡы ҡиәфәтен матурлап, күңел торошон үҙгәртә, көйләй алалыр, тип уйлайым.

(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).

12+

**✓ Икенсе ҡатыным үҙенең иплелеге, ихтирамлы һәм күндәм булыуы менән йәлеп итте. Күндәм, тигәнем уның йомшаҡ, йыуашлығы тураһында ғына түгел. Ә сабыр аҡылы, риза була белеүе.**

ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ

# ҺЕҘ - ДОНЪЯБЫҘ ЙӘМЕ!

Бөйөк Хаҡ Тәғәләбеҙ Әҙәм ғәләйһиссәләм тәү бабабыҙҙы яралтҡас, уға иптәшкә, күңеллерәк булһын типтер инде, Һауа инәбеҙҙе лә әүәләп биргән. Әҙәм бабабыҙ, ир затынан булғас, ҡырыҫыраҡ, ҡатыраҡ, тупаҫыраҡ, әммә бер ҡатлыраҡ итеп әүәләнгән. Ә Һауа! Үҙе саф, үҙе пак, үҙе нескә, үҙе йомшаҡ, үҙе гүзәл - уның затлы сифаттарын һүҙ менән әйтеп тә, һанап та бөтөрөп булмайҙыр.

Ә беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары Тәү Инәбеҙҙең аҫыл сифаттарын вис бүлешеп алып бөткәндер, тим. Ҡайһыһына күҙ һирпеп ҡарама - хушың китерлек! Шуға ла бит шиғри күңелле, хислерәк ир заты ғүмере буйына ҡатын-ҡыҙға ғашиҡ, хатта һөйгән йәре берәү генә булһа ла, уны ул барыбер йөҙ төрлө күреп ярата белә.

Рәми ағабыҙ ҙа башҡорт егеттәренең һис бер һүнмәҫлек хис-тойғоларын ҡалай шәп итеп шиғырға һалған: "Көтмәгәндә шундай ҡыҙҙар осрай, шундай ҡыҙҙар - ят та үл инде!"

Юҡ, юҡ, үлмәйерәк торайыҡ әле - әтеү әсәләребеҙҙе, инәйҙәребеҙҙе, хәләл ефеттәребеҙҙе, ҡыҙҙарыбыҙҙы - барса гүзәл заттарыбыҙҙы кем мәңгелек Яҙ байрамы менән ҡотлар? Һеҙ булмаһағыҙ, беҙ ҙә булмаҫ инек - ошолор төп тормош ҡануны. Һеҙ бит донъябыҙ йәме, һеҙҙә бит йәшәйеш тәме! Һөйөп үә һөйөлөп, бергә-бергә оҙон-оҙаҡ йәшәргә яҙһын, тибеҙ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## ЕР ЙОНДОҘО

Йыһан киңлегендә иң яҡтыһы -
Ер тыуҙырған йондоҙ -
Ҡатын-ҡыҙ!
Ялҡынына күбәләктәй осоп
Күпме тапҡыр инде янғанбыҙ!

Йәшәй алмайбыҙ тик бер мәлен дә
Был ғүмерҙең ошо йондоҙһоҙ.
Балҡый ир-егеткә юлдаш булып,
Ҡояш булып
Гүзәл ҡатын-ҡыҙ!

Яныбыҙҙа балҡый.
Йөрәгенә
Инәм генә тиһәң, алыҫ ул.
Егет өсөн, ахры, еңелерәк
Күк есемен үрелеп алыуы.

Ғаләмдәрҙең барлыҡ серҙәренә
Асҡыс таба ир-ат йөрәге.
Асылмайса ҡала уның өсөн
Тик ҡатын-ҡыҙ тигән сер мәңге.

Бейектәргә ҡарап таң ҡалһаҡ та,
Ҡалҡҡан саҡта төнгө ай-йондоҙ,
Бейеклеккә беҙҙе әйҙәп тора
Ер йондоҙо -
Гүзәл ҡатын-ҡыҙ!

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Гүзәл заттың үҙен баһалаған сифаттары тураһында һөйләсе...

***Сынтимер АҠСУЛПАНОВ, инженер:*** Ҡатын-ҡыҙ әҙәпле булырға тейеш. Иң матур, иң кәрәкле, иң һиммәтле, иң ҡиммәтле сифат ул гүзәл зат өсөн әҙәплелек. Был ҡылыҡҡа эйә булыуы уның үҙен генә түгел, ирен дә, ғаиләһен, туғандарын да бәхетле итә.

Тәүге ҡатыным алабарман булды. Яманлап иҫкә алғым килмәй, әлбиттә. Һорауға яуап тулы булһын өсөн генә хәтергә алам. Алдын-артын уйламай торғайны. "Беҙҙең нәҫел бирле булды", - тип, бөтә яңылышыуҙарын, хаталарын шулай тип аҡланы. Әйтер һүҙен дә, эшләр эшен дә уйламай торғайны. Дөрөҫөрәге, тәүҙә эшләне, аҙаҡ уйланы. Мин әйтә алмағанды ул алдан әйтер ине. Йәш саҡта мин уның был сифатын ҡыйыулыҡ, тип уйланым. Тап ошо янып, күҙенән осҡон сәсеп тороуына ғашиҡ булдым да шикелле ул. Йәшәй башлағас ҡына уның бер ниндәй тәрбиә күрмәгәнен, әҙәпһеҙ икәнлеген белдем. Күп тапҡырҙар үҙен генә түгел, мине лә, балаларҙы ла уңайһыҙ хәлгә ҡалдырҙы.

Икенсе ҡатыным үҙенең иплелеге, ихтирамлы һәм күндәм булыуы менән йәлеп итте. Күндәм, тигәнем уның йомшаҡ, йыуашлығы тураһында ғына түгел. Ә сабыр аҡылы, риза була белеүе, аңлауы һәм кешене, ваҡиғаны нисек бар, шулай ҡабул итеүе хаҡында булыр. Әҙәплелек - ул кешенең күңел көҙгөһө. Әҙәплелек ул хеҙмәттәштәр, туғандар менән күркәм аралашыу, кеше араһында үҙ-үҙеңде тота белеү генә түгел бит ул. Уның мәғәнәһе тәрәнерәк. Әҙәплелек - ул кешенең күңел хазинаһы. Тап ошо сифат ҡатын-ҡыҙҙы матур итә.

Яңыраҡ автобусҡа бик матур ханым килеп инде. Ҡара ҡашлы, ҡара күҙле был ханымдың гүзәллегенә минән башҡалар ҙа иғтибар итте. Тик оҙаҡ һоҡланып барып булманы был матурлыҡҡа. Кемдер аяғына яңылыш баҫып, ҡатлы-ҡатлы һүгенеп ебәргәйне, бар хозурлығы күҙ алдында юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы.

Әҙәпле ҡатын бер ҡасан да кешене, шулай уҡ ирен, балаларын башҡалар эргәһендә рәнйетмәй, кәмһетмәй, үҙе лә үпкәләмәй, маҡтанмай. Төрлө шарттарҙа ла үҙен дөрөҫ, тыныс, итәғәтле итеп тота белә.

Бына минең ҡатыным тап шундай. Ике балалы ирҙән ҡурҡып торманы. Ҡыҙҙарыма яҡшы әсәй, миңә хәстәрлекле ҡатын була белде. Тормошомда осрағаны өсөн уға һәм күркәм тәрбиә биргән ата-әсәһенә, ҡайным менән ҡәйнәмә ҙур рәхмәтлемен. Бергә йәшәүебеҙгә сирек быуат булды инде хәҙер. Биш йыл да һымаҡ тойолманы ошо егерме биш йыл. Бар ир-егеткә үҙемдең икенсе яртым һымаҡ ҡатын теләйем!

***Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ, журналист:*** Бала саҡта ҡыҙҙар малайҙарға ҡарағанда таҙараҡ йөрөү сифаттары менән хайран итәлер, тим. Һәр хәлдә, шулай иҫтә ҡалған. Маңҡа малай түгел бит инде ул, ҡыҙ остоғо! Үҫмер саҡта, бар донъяны онотоп, ғашиҡ булып, тәүге мөхәббәт хистәрен татығанда сибәрлек беренсе урынға сыҡҡандыр. Ҡыҙҙарҙың ана шул тышҡы, күҙгә күренгән сифаттары, ыҫпайлығы һуҡырайта, башты юғалтып, йөрәгебеҙҙе тәҡдим итәбеҙ. Бушҡамы ни, матурлыҡ туйҙа кәрәк, тиҙәр.

Ғаилә ҡороп бергә йәшәй башлағас иһә, тормош юлдашыңдың бығаса күрмәгән, һиҙмәгән сифаттарын аса башлайһың. Оҡшағаны - ҡыуандыра, һағайтҡанына сабыр булаһың инде.

Олоғая килә генә аңланым: ҡатын-ҡыҙҙы иргә тоғро иткән бөтәһе өсөн дә уртаҡ сифат - ирҙәрҙе йәлләй, ҡурсалай белеүҙәре. Һин, ир кеше, бәлки, мохтаж да түгелһеңдер ундай иғтибарға, ә ул һине барыбер ҡурсалай - бергә уйнап үҫкән күрше ҡыҙы булып, ғашиҡ иттергән сибәр булып, тормош иптәшең, балаларыңдың әсәһе булып...

***Ринат ЗӘКИЕВ, отставкалағы полиция подполковнигы:*** Дөйөм алғанда гүзәл заттарҙа тыныс холоҡ, кешене тыңлай белеү, көр күңеллелек, эскерһеҙлек кеүек сифаттар оҡшай. Илгәҙәк, асыҡ күңелле, шул уҡ ваҡытта тотанаҡлы, ипле ҡатын-ҡыҙҙар менән һоҡланам. Һәм бөтә был сифаттар минең ҡатынымда сағыла, тип ауыҙ тултырып әйтә алам.

Кәләшем Алһыу менән бик иртә өйләнештек. Миңә 20, уға 18 йәш ине. Әрме сафынан ҡайтып, ауыл һайын туғандар менән күрешеп йөрөгәндә тап иттем мин уны. Урам баҡсаһында йырлай-йырлай сәскәләргә һыу ҡойған ҡыҙ күңелемде әсир итте. Хатта урам уртаһында ҡып туҡтап, уға ҡарап торғанымды ла һиҙмәгәнмен. Бер аҙ аң кергәс, тимерҙе ҡыҙыуында һуҡтым - шунда уҡ барып таныштым. Ул ваҡытта Алһыу 11 синыфта уҡый ине, тыуған ауылына ялға ҡайтҡайны. Уның матурлығы, яғымлы ғына итеп һөйләшеүе башымдағы уйҙарҙы бөтөнләй сырмалтты. "Был ҡыҙ минең кәләшем булырға тейеш", тинем дә ял һайын уның ауылына килә башланым. Йәйләп ата-әсәһе, ҡустылары менән дә танышып, уртаҡ тел таптым, бесәнгә лә йөрөштөм, бәрәңге лә алыштым. Ғөмүмән, үҙемде бар яҡлап тик яҡшы яҡтан ғына күрһәттем инде.

Буласаҡ ҡәйнәмдең дә ихлас, эскерһеҙ кеше икәнен күрә йөрөнөм. Ҡулынан килмәгән эш юҡ. Үҙе генә эшләмәй, ҡыҙына ла эштең бөтә нескәлектәрен төшөндөрә йөрөй. Нисек итһәм иттем, ләкин Алһыу мәктәпте тамамлап, университетҡа уҡырға ингәс тә өйләнештек. Хәҙер 26 йыл бергә йәшәйбеҙ, ике улыбыҙ, ҡыҙыбыҙ үҫеп килә. Ғаилә ҡороп бергә йәшәй башлағас, ҡатынымдың тағы ла бик матур сифаттары асылды. Ул ҡунаҡсыл, йомарт, ышаныслы, ихлас. Фатирыбыҙ бәләкәй генә булғанда ла өйҙән кеше өҙөлмәне, Алһыу бер ҡасан да йөҙ боҙоп ултырманы, туғандарҙы һинекенә-минекенә бүлмәне, һәр саҡ алсаҡ йөҙ менән ҡаршы алып оҙатып ҡалды. Хәҙер ҙур йортобоҙ ҡапҡаһы ла ябылмай, туған һәм дуҫтарға балаларҙың класташтары өҫтәлде, уларҙың ата-әсәләре менән дә яҡшы аралашып, бергә-бергә йәшәйбеҙ.

Өйләнешеп, 10 йыл йәшәгәндән һуң да балабыҙ булманы. Был ауыр һынауҙы ла Алһыу лайыҡлы күтәрҙе, миңә лә йыуатыу һүҙҙәре таба белде. Әгәр ҙә шул йылдар эсендә уның оло йөрәклеге, тыныслығы, түҙемлеге булмаһа, бәлки, ғаиләбеҙ тарҡалыр ҙа ине. Әлеге көндәге тулы бәхетебеҙ тик кәләшемдең рухи көсө, характерындағы ныҡлы үҙәктең булыуына бәйле. Шул йылдар эсендәге үҙемдең мыжыҡлығым, бөтә ғәйепте уға япһарырға тырышыуым, үҙемде йәлләтеп йәшәүем өсөн әле булһа оят.

Оҙаҡ йылдарҙан һуң берبер артлы тыуған балаларҙы тәрбиәләүҙә лә ҡатынымдың тәрән аҡыллылығы өҫкә сыҡты. Көтөп алынған балалар булһа ла, үҙендә уларҙы башҡа менеп ултыртмаҫлыҡ ихтыяр көсө таба, артыҡ иркәләтеүҙән тыйыла, мине лә тыя. Хеҙмәткә өйрәтеүҙе өҫтөнлөклө урынға ҡуя. Балалар тәрбиәләгәндә сабыр, ниндәй хәлдәр килеп тыуһа ла һалҡын ҡанлы, зирәк уйлы булып ҡала белеүе мине һоҡландыра. Шул уҡ ваҡытта ул балаларҙы өҙөлөп ярата, кәрәк була ҡалһа, улар өсөн ҡалҡан булып тора.

Атаһы менән әсәһенә, ҡайны менән ҡәйнәһенә ҡарата ихтирамлы һәм иғтибарлы ҡыҙ һәм килен, уңған ҡатын, хәстәрлекле әсәй - был барыһы ла ҡатыным Алһыу тураһында.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәйҙә күп балалы ғаиләләр күбәйә. Шуға бәйле Хөкүмәт герой-әсәләргә, шулай уҡ "Ата-әсәлек даны" ордены йәки ошо ордендың миҙалы менән бүләкләнгән ата-әсәләргә бер тапҡыр бирелә торған түләүгә өҫтәмә рәүештә 30 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтергә ҡарар итте. Ошо хаҡтағы бойороҡҡа Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Министрҙар кабинетының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ошо сумманан: 20 миллион һумы - герой-әсәләргә, 5,5 миллион һумы - "Ата-әсәлек даны" ордены менән бүләкләнгәндәргә, 5,2 миллион һумы ошо ордендың миҙалы менән бүләкләнгәндәргә бүленә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров татар йәмғәтселеге вәкилдәре менән осрашыуҙа уларҙың Өфөлә СССР-ҙың атҡаҙанған спорт мастеры, боҙҙа мотоциклда уҙышыу буйынса алты тапҡыр донъя чемпионы, Европа чемпионы Ғабдрахман Ҡадировҡа һәйкәл ҡуйыу тәҡдимен хупланы. "Быйыл Өфөлә егерме йыл республика менән етәкселек иткән Миҙхәт Шакировҡа һәйкәл асырға теләйбеҙ. Әлбиттә, беҙҙең бурыс - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар мемориалын булдырыу. Ваҡыты етер, Өфөлә бөйөк мотоуҙышсы һәм республикабыҙҙың башҡа күренекле шәхестәренә лә һәйкәл ҡуйырбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓Өфөлә Игорь Комаров Волга буйы федераль округы төбәктәре башлыҡтары ҡатнашлығында власть һәм урындағы үҙидара органдарына ышанысты арттырыу темаһы буйынса округ Советы ултырышын үткәрҙе. "Торатау" конгресс-холында Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың эшлекле осрашыуы уҙҙы. Игорь Комаров республиканың иҡтисад һәм социаль өлкә тармаҡтары эшенең төп күрһәткестәренең юғары үҫеш темптарын билдәләне.

✓Президент Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһен уҡығанда бюджет өлкәһендә эш хаҡын камиллаштырыу кәрәклеген билдәләне. Ил буйынса уртаса эш хаҡы кимәле шаҡтай айырыла, тип иҫкә төшөрҙө ул. Быға юл ҡуйырға ярамай, сөнки уҡытыусының хеҙмәте һәр төбәктә берҙәй мөһим. 2025 йылда Хөкүмәт пилот вариантында бюджет хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләүҙең яңы моделен һынап ҡарай. 2026 йылда ул тотош илдә ғәмәлгә индерелергә тейеш.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Гүзәл заттың үҙен баһалаған сифаттары тураһында һөйләсе...

***Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, яҙыусы:*** Был һорауға оҙон-оҙаҡ итеп яуап та эҙләп тормайынса, Абдулхаҡ Игебаевтың "Катындар" тигән киң билдәле шиғырын килтереп тә ҡотолорға булыр ине:

*Эй ҡатындар,*
*сибәр ҡатындар,*
*Күңелдәргә бик тә яҡындар.*
*Әйтерһең дә инде уларҙа*
*Әллә ниндәй*
*сихри ялҡын бар!*
*Эй ҡатындар,*
*эшсән ҡатындар,*
*Шундай матур,*
*бары ла алтындар,*
*Әммә оҙағыраҡ йәшәһен*
*Ир ҡәҙерен белгән*
*ҡатындар!*

Миненсә, иң матур ҡатын-ҡыҙ һин яратҡанылыр. Әгәр ҙә ул һинә оҡшай икән, тышҡы матурлығына, сифат-мифатына ҡарап тормайһың инде ул. Киреһенсә, был осраҡта хатта донъялағы иң йәмһеҙ, иң холоҡһоҙ ҡатын-ҡыҙ ҙа һинә иң матуры, ин-ине булып күренәләр, тием. "Матур матур түгел, яратҡан матур", тиҙәр бындай осраҡта. Терпе лә балаһына "Йомшағым!" тип өндәшә, ти.

"Матурлыҡ туйҙа, матур холоҡ көн дә кәрәк", тип тә әйтәләр. Икенсенән, ир-ат тәбиғәте буйынса һунарсы һәм уға ҡатын-ҡыҙҙың ҡырыҫ һәм серле булғаны күберәк оҡшайҙыр, тип уйланыла. Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ тәүге осрашыуҙа уҡ ир-ат алдында барлыҡ серҙәре, башҡа яҡтары, холоҡ үҙенсәлектәре менән асылһа, ундай нескә зат янында ир-ат оҙаҡ тотҡарланмайҙыр ул. Был йәһәттән ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙ серле булған ғаиләләр тотороҡло, оҙон ғүмерле булалыр. Әммә бында ябайлыҡ, эскерһеҙлек сифаттарын берҡатлылыҡ менән бутарға тейеш түгелбеҙҙер. Киреһенсә булған осраҡта, һунарсы зауыҡын сарыф итер объект эҙләп ир ситкә китәлер. Ир кеше, үҙе лә аңламайынса, ҡатынының серҙәрен асыр өсөн ғүмер буйына уның барлыҡ көйһеҙлектәренә түҙеп йәшәй бирә: быны-быны ул сер беленер ҙә, күк ҡабағы асылып китер кеүек! Ә ҡатынының ундай серҙәре бөтөнләй ҡалмай, булмай тиерлек, бары тик ул серле булып ҡылана, ғаилә сәхнәһендә серле ҡатын ролен башҡара ғына.

Тағы ла бер ҡыҙыҡлы күҙәтеүем: ҡыҙға егет кеше нисек кенә оҡшамаһын, ул үҙе баштап тойғоларын белдерергә ҡыймай. Белдерә икән, егет кеше уның был аҙымын дөрөҫ итеп баһаламаясаҡ. Пушкиндың Татьянаһы ла үҙе башлап Онегинға хат яҙа һәм тойғоларын яуапһыҙ ҡала. Әлбиттә, Онегинда тойғолар бик һүнлап уяна, был саҡта инде ҡыҙ унан баш тарта.

Миненсә, әгәр ҙә ҡыҙға егет оҡшай һәм ул һөйгәненә тойғоларын белдерергә теләй икән, әлеге лә баяғы серлелеге, илаһилығы ярҙамында барыбер ҙә егеткә ишаралар, кинәйәләр ярҙамында битараф булмауын белдерергә тейештер. Был йәһәттән мәрхүм Әмир Ишемғоловтың бер фекерен иҫкә төшөрөү бик урынлы булыр: "Сәскәләр бөжәктәр, бал ҡорттары ярҙамында һеркәләнә. Бал ҡорттары фәҡәт үҙенә килеп ҡунһын өсөн дә сәскәләр матурлығы, нәфислеге менән уларҙы үҙҙәренә арбай. Сәскәләр шуның өсөн дә матур, күҙ яуын алырлыҡ була..."

Бәс, ҡыҙҙарыбыҙ ҙа шуның өсөн матур, күҙ яуын алырлыҡ бит!

***Марат ӘХМӘТШИН, алып барыусы, блогер:*** Мин "тәү күреүҙән ғашиҡ булыуҙың" барлығына ышанам, сөнки үҙем менән ошо уҡ хәл булды. Буласаҡ кәләшемде беренсе күргәндә уҡ уға ғашиҡ булдым, һылыу ҡыҙ бөтә күңелемде, йөрәгемде ялмап алды. Иң беренсе уның тәбиғи матурлығы күҙемә ташланды, косметиканы бик самалы ғына итеп ҡулланған ҡыҙ һоҡландырмай ҡалманы. Минең өсөн тәбиғилек - мөһим фактор, сөнки иртән - бер, көндөҙ бөтөнләй икенсе йөҙлө ҡатынды күреп йәшәү минең холҡома тап килмәй. Ҡыҙғаныска күрә, ҡайһы бер гүзәл заттар иҫ китмәле итеп битен буяй, унан ҡалһа, оҙооон итеп керпек үҫтертә, ирендәрҙе бүлтәйтә, тәненең ҡайһы урыныңдыр ҡырҡтыра, икенсе урынына ҡуйҙыра - иҫең китер. Ундай ҡатын-ҡыҙҙар көндөҙ бер сүрәттә йөрөһә, битен йыуғас, бөтөнләй икенсе ҡиәфәткә инә. Йәмһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар булмай, тик ни өсөн был алама трендты күтәрмәләйҙәрҙер - аңламайым.

Кәләшемдең ярҙамсыллығы һәм нәзәкәтлеге лә күңелемә яҡын сифаттар. Ғаилә ҡорған ирҙең тәүге ярҙамсыһы, кәңәшсеһе, уны күтәрмәләп тороусы ҡатыны булырға тейеш. Ниндәй хәлдә лә өйҙә аңлаусы, зирәк, аҡыллы ҡатын көтөүен тойоп йәшәү мине көслөрәк итә, илһамландыра, ниәттәремде тормошҡа ашырыуға дәрт-дарман өҫтәй. Әгәр ҙә уға ҡайны бер фекерем, эшем оҡшап етмәһә, ул күңелде китеп тура бәреп әйтмәй, ә ипле генә итеп үҙенең фекерен еткерә: "Һин дөрөҫ уйламайһың, был эш бер ҡасан да барып сыҡмаясаҡ, бушҡа ваҡыт әрәм итмә", тимәй ул, ә "Бәлки, был осраҡта ошолай эшләп ҡарау дөрөҫөрәк булыр", йәки "Әйҙә, ҡабаланмайыҡ һәм тағы ла бер тапҡыр уйлайыҡ", тип күп осраҡта мине яңылышыуҙан һаҡлап ҡала. Ир заты бит ул үҙһүҙлерәк, үҙен һәр саҡ хаҡлы, тип уйлай, ҡыҙыу ҡанлы була. Быны ошондай ваҡыттарҙа аҡыллы ҡатын иренең йайын табып, хәлде көйләп ебәрә.

"Ир-аттың йөрәгенә юл уның ашҡаҙаны аша ята", тиеүҙәре бер ҙә шаштырыу түгел. Минең кәләшем тәмле итеп аш-һыу әҙерләй, ә уның борщы иһә бөтөнләй телде йоторлоҡ. Эштән ҡайтып ингәндә кухнянан тәмле еҫтәр сығып торһа, һине һағынып көтөп алған ҡатыныңһәм балаң булыуы бәхеттең үҙелер.

Тирә-яҡтағыларға ҡарата хәстәрлек һәм изгелек күрһәтә белеүе, һис шикһеҙ, ҡатын-ҡыҙҙың иң күркәм сифаттарының береһе. Ир-егеттәр үҙе тирәләй йылылыҡ, хәстәрлеклә мөхит булдырған ҡатын-ҡыҙға тартыла һәм баһалай. Оптимистик рухлы, үҙ-үҙен ихтирам иткән, юмор яратҡан һәм шаяртыуҙарҙы урынлы ғына итеп ҡуллана белгән гүзәл заттар ҙа һис ҡасан бер үҙҙәре булмаясаҡ. Беҙ, ир-ат, һәр ваҡыт беҙгә шикләнеп ҡараған ҡатын-ҡыҙҙан ҡасабыҙ, сөнки ышаныслы мөнәсәбәт төҙөй алыу һәләте - уңышлы ғаилә ҡороуҙың бер бағанаһы ул.

УЙЛЫҒА - УЙ

# БАЛА ҠАЙҒЫҺЫ ЙӨРӘКТӘ...

**"Бала ҡайғыһы йөрәктә, ир ҡайғыһы итәктә" әйтеменә һалынған фекер "ике икең дүрт була", тигәндәй, еңел генә аңлашылған һымаҡ булып тойолһа ла, уның тәрәндәрәк ятҡан мәғәнәһе лә бар. Миҫалға ошо риүәйәтте генә алайыҡ.**

Ил ҡыҙырып йөрөүсе дәрүишкә өс юл сатында һылыуҙарҙан-һылыу бер ҡатын осраған. Ҡатындың күҙ-сырайындағы сәйер һыҙатҡа ла иғтибар иткән дәрүиш. Уның һын-һыпатындағы, йөҙ төҙөлөшөндәге камиллыҡ, илаһилыҡ йөрәгенә уйылған хәсрәтен һис тә йәшерә алмай икән. Юлдан саҡ ҡына ситтәрәк таш өҫтөндә ултырған ҡатындың балаларына ла иғтибар иткән дәрүиш. Уларҙың береһе - сәстәре бешкән арыш һаламылай һап-һары малай, икенсеһе - ыҫмалалай сөм-ҡара сәсле ҡыҙыҡай икән. Дәрүиш уларҙың янына килгән дә, ауыҙын асып өндәшергә генә иткәндә, ҡатын уны бүлдереп, ҡайҙалыр билдәһеҙ яҡҡа, алыҫҡа эйәге менән ымлап: "Нимә хаҡында белергә теләгәнегеҙҙе аңланым, зинһар өсөн, анау таш артына йәшеренеп ҡарап торһағыҙ, үҙегеҙ белергә теләгәнде һүҙһеҙ ҙә аңларһығыҙ", - тигән.

Дәрүиш таш артына йәшеренеүе булған, алыҫта саң туҙаны ҡалҡҡаны күренгән. Бер мәл аҡ дөлдөл егелгән матур биҙәкле ап-аҡ көймәгә ултырып, һары сәсле ҡупшы ғына кейенгән урта йәштәрҙәге ир килеп туҡтаған. Аты туҡтап та өлгөрмәҫтән, ир ҡатындың аяҡ аҫтына йығылған һәм аяғына баҫып, ҡатынды үбергә тотонған. Шунан арыш сәсле малайҙы ла ҡулына алып, уны иркәләп, ҡатынға әле генә үҙе елдереп килгән юлға ымлап күрһәтеп, өсәүләп бергә шунан китергә өндәгән. Ҡатын үҙҙәренә ҡарап аптырашта ҡалған ҡыҙына ҡараш ташлаған да, ир күрһәткән юл буйлап бер ҡасан да китмәйәсәген, ҡыҙын янғыҙ ҡалдырмаясағын аңлатып, баш һелккән. Ир кеше, нимәнелер аңлатырға, иҫбатларға теләгән. Әммә ҡатын ҡымшанмай ҙа баҫып тора биргән. Ахырҙа, ир кеше ҡулын һелтәп, атына ҡамсы төшөрөп, әле генә килгән юлынан саптырып китеп тә барған.

Аҡ көймә күҙҙән юғалған юлдың саңы ла ултырып өлгөрмәй, икенсе юл буйлап ҡара юрға егелгән ҡара көймәнең елдереп килгәне күренгән. Көймәнән уның хужаһы - ҡара сәсле, тәүге ирҙән дә мыҡтыраҡ, баһадирыраҡ көйҙәле ир төшкән. Был ир ҙә, тәүге ир кеүек, аты туҡтар-туҡтамаҫтан уҡ ҡатындың аяҡ аҫтына ташлана, шунан һуң аяғына баҫып, ҡара сәсле ҡыҙын ҡулына ала. Был ир ҙә әле генә үҙе елдереп килгән юлға ымлап күрһәтеп, хәҙер уҡ уларҙы үҙе менән алып китәсәген белдерә. Ҡатын, "Юҡ, бармайым", тигәнде аңлатып, баш һелкә...

Дәрүиштең күңелен ҡатынды һәм уның балаларын йәлләү тойғоһо сорнап ала шул саҡ. Ҡатын янына барып, уны йыуатырға ниәт итеп, инде ҡуҙғалдым ғына тигәндә, киренән тағы ла таш артына боҫорға мәжбүр була. Ни өсөн тигәндә, ул бөтөнләй көтөлмәгән юлһыҙ яҡтан өсөнсө йәйәүле ирҙең яҡынлап килеүен күреп ҡала. Ир теге өсәүгә яҡынлаған һайын, аҙымдары ла шәбәйә бара икән. Быны ул атлауҙан йүгереүгә күсеп, ҡатынды күтәреп алып үбә лә, уның ике балаһын ике яурынына ҡундырып, өсөнсө юл буйлап үҙенең бәхетле һәм яҡты киләсәгенә табан атлай. Уларҙың дүртеһенең дә шат йылмайған йөҙөндә ҡояш нуры сағыла...

"Бала ҡайғыһы йөрәктә, ир ҡайғыһы итәктә" әйтемен бар тулылығында аңлатыуҙың классик формаһына торош итәрлек был риүәйәт. Ысынлап та, ниңә ҡатын үҙенә мохтажлыҙ ғына киләсәк тәьмин итерлек, яҡшы йәшәү шарттары тыуҙырырлыҡ ике ирҙең береһе менән дә китергә теләмәгән һуң? Сөнки ул ирҙәрҙең ҡайһыһы менән генә киткән осраҡта ла, яҡшы йәшәү шарттарына бер балаһын алмаштырырға тура киләсәген яҡшы аңлаған. "Итәк ҡайғыһы" бер ваҡытта ла йөрәк һыҙлауынан өҫтөн була алмай. Сөнки донъяла тик әсәй кеше генә бөтә балаларына тигеҙ итеп ҡарай.

Икенсе риүәйәт. Бер мәл бер әсәнең балалары үҙ-ара бәхәсләшеп киткән. Йәнәһе, уларҙың ҡайһыһын әсәләре нығыраҡ ярата икән. Һәр ҡайһыһы иң ныҡ яратылған баланың үҙе икәнлеген иҫбатларға тырышҡан. Улар ахырҙа әсәләре янына килеп, уның үҙенән был хаҡта һорашҡан. Әсәләре майшәмдә яндырған да:

- Быны был шәм - ул мин, ә уның уты - минең мөхәббәтем, - тигән.

Шунан ул йәнә бер майшәм алып, уны тоҡандарған да:

- Быны был минең тәүге балам, мин уға үҙемдең һөйөү утымды бирҙем, әммә миндәге уттың ялҡыны шул килеш ҡалды...

Әсә кеше нисә балаһы бар, шунсама шәмде тоҡандырып сыҡҡан да, үҙендәге шәмдең һис тә кәмемәүен, ҙур һәм йылы булыуын аңлатҡан. Быныңменән, әлбиттә, ул бөтә балаларына бер үк миҡдарҙа һөйөү, наҙ биреүен әйтергә теләгән.

Бала ҡайғыһының тап йөрәгендә булғаны өсөн дә һаҡланалыр донъяла әсәлек тойғоһо. Ошо тойғо кешелекте лә һаҡлап килә. Дөрөҫөрәге, бала ҡайғыһының йөрәктә булыуы кешелекте һаҡлай ҙа инде. Был - хәҡиҡәт.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Үҙ миҙалдарын белорустарға биргән Башҡортостан командаһы биатлонсылары Илья Бурлаков, Антон Бабиков, Александр Бабчин һәм Эдуард Латипов йәкшәмбе көндө Көсләләр спартакиадаһының бронза миҙалдары менән бүләкләнде. Улар өсөн өҫтәмә наградалар комплекты әҙерләнде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, биатлонсыларҙың һуңғы ярышында белорус саңғысылары - өсөнсө, ә Башҡортостан саңғысылары дүртенсе урынды алды. Белоруссия спортсылары иҫәптән тыш сығыш яһаны, шуға "бронза"ны Башҡортостан йыйылма командаһы алды. Әммә беҙҙең спортсылар бүләкләнгәндән һуң үҙ наградаларын белорус спортсыларына бирергә ҡарар итте.

✓Федераль Йыйылышҡа сығышында Рәсәй Президенты Владимир Путин 2024 йылдың 1 сентябренән мәктәптәрҙә һәм колледждарҙа директорҙың тәрбиә эштәре буйынса кәңәшселәре өсөн 5 мең һумлыҡ яңы федераль түләү индерелеүе хаҡында белдерҙе. Президент һүҙҙәренсә, 100 меңдән аҙыраҡ кеше йәшәгән тораҡ пункттарҙағы мәктәптәрҙә класс етәкселәре, техникумдарҙың һәм колледждарҙың төркөм кураторҙары өсөн түләү 2024 йылдың 1 мартынан 10 мең һумға тиклем арттырыла.

✓2030 йылға хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме (МРОТ) тағы ла ике тапҡырға тиерлек артып, 35 мең һумға етергә тейеш, тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһағанда. "2020 йылдан башлап хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме 1,5 тапҡырға - айына 12 меңдән 19 мең һумға тиклем артты, - тип иҫкә төшөрҙө дәүләт башлығы. - 2030 йылға ул йәнә яҡынса ике тапҡырға - 35 мең һумғаса еткерелергә тейеш. Һис шикһеҙ, был социаль пособиелар, бюджет өлкәһендә һәм иҡтисад тармаҡтарындағы эш хаҡы күләмендә сағылыш табыр".

✓Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе ваҡытында Берҙәм дәүләт имтиханы системаһын камиллаштырыу тураһында иғлан итте. Сығарылыш уҡыусыларына уҙҙәре һайлаған фәндәрҙең береһе буйынса БДИны ҡабаттан тапшырырға рөхсәт ителә. Уҡыусылар шул уҡ йылда, вуҙдарҙа ҡабул итеү кампанияһы тамамланғансы, ошондай мөмкинлектән файҙаланырға хоҡуҡлы (ҡабаттан һынау тотоп, документтарҙы тапшырып өлгөрһән өсөн). "Уҡыусыға үҙе һайлаған предметтарҙың береһенән Берҙәм дәүләт имтиханын ҡабаттан тапшырырға мөмкинлек бирергә тәҡдим итәм", - тип белдерҙе В. Путин.

ҠЫҪҠАСА

# ИНТЕРНЕТ КИЛДЕ...

**Башҡортостандың 116 ауылына 4G сифатлы мобиль интернет килде, тип хәбәр итә республика Хөкүмәте.** Билдәле булыуынса, әлеге баҡытта республиканың 39 районы, шул иҫәптән Янаул һәм Тәтешле районы районларының төньяғы, Ейәнсура һәм Хәйбулла районларының көньяғында йәшәүселәр заманса һанлы сервистар менән файҙалана. "Бөгөн Башҡортостандың 35 мең ауыл кешеһе тиҙлекле мобиль интернет һәм сифатлы тауыш элемтәһе менән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә булды. Быйыл интернет ситтән тороп эшләргә, белем биреү платформаларында курстар үтергә, яҡындарың менән видеоэлемтә аша аралашырға, дәүләт хеҙмәттәрен алырға мөмкинлек бирә", - тине республика дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин.

✓ **Башҡортостанда эттәрҙе морондоҡһоҙ һәм бәйһеҙ йөрөткән өсөн штрафты арттырыу тураһында закон ҡабул итергә әҙерләнәләр.** Дәүләт Йыйылышында билдәләүҙәренсә, хәҙер сумма 2-4 мең һум тәшкил итергә тейеш (элек 500 һумдан 2 мең һумға тиклем ине). "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында ғәмәлдәге кодекста 500 һумдан 2 мең һумға тиклем штраф ҡаралған. Был норманы индергәндән һуң 10 йыл ваҡыт үтте", - тип билдәләне республика парламенты рәйесе Константин Толкачев. Закон декоратив тоҡомло эттәргә ҡағылмай. Башланғыс икенсе уҡыуҙа ҡаралырға тейеш, өҫтәүенә яңы төҙәтмәләр эттәр кешегә һөжүм иткән өсөн хужаларына ҡарата енәйәт яуаплылығын индереүҙе күҙ уңында тота. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, май айынан Башҡортостанда хайуандар өсөн "Сәләмәтлек поездары" йөрөй башлай.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы тарафынан "Башҡортостан Республикаһында Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил тураһында"ғы законға үҙгәреш индерелгән.** Ул балалар мөхитендә буллинг менән көрәшеүгә йүнәлтелгән. Быныһ өсөн БР Балалар хоҡуҡы буйынса вәкил роле көсәйтелгән, уның вәкәләттәре киңәйтелгән. Ул, мәҫәлән, ата-әсәләрҙең теләге буйынса низағлашыусы яҡтарҙың һөйләшеүендә ҡатнашырға һәм Дәүләт Йыйылышына бала хоҡуҡтарының боҙолоу факттары буйынса парламент тикшереүе һәм тыңлауы ойоштороу тәҡдиме менән мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлы.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин экстремизмға саҡырған һәм Рәсәйҙең Ҡоралы Көстәре тураһында ялған мәғлүмәт тараткан өсөн мөлкәтте, аҡсаны һәм башҡа матди ҡиммәттәрҙе тартып алыуҙы күҙ уңында тотҡан законға ҡул ҡуйҙы.** Бында һүҙ илдең именлегенә ҡаршы енәйәти эшмәкәрлекте финанслау өсөн файҙаланылған йәки тәғәйенләнгән аҡса тураһында бара. Бынан тыш, хәҙер суд ҡарары менән бындай эштәр өсөн почетлы исемдәрҙән мәхрүм итеүҙәре ихтимал. Рәсәйгә ҡарата санкциялар индерергә саҡырыу, нацизмды реабилитациялау һәм Рәсәй Федерацияһы ҡатнашмаған ойошмалар, йәки сит ил дәүләт органдары ҡарарҙарының үтәлешенә булышлыҡ итеү ҙә бына шуға ҡарай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕР НИГӘ ҠАРАМАЙ...



**"Рәсәй Президентының Мөрәжәғәтнамәһе - үҫеш мөрәжәғәтнамәһе", тип иҫәпләй Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.**

"Бер нигә ҡарамай, илебеҙ үҫешә, алға бара. Был социаль мөрәжәғәтнамә. Ул халыҡтың тормошон яҡшыртыуға йүнәлтелгән. "Ғаилә", "Рәсәй йәштәре", "Кадрҙар" яңы милли проекттарының һәм перспектив технологик башланғыстарҙың да маҡсаты ошо. Был иң мөһиме. Мөрәжәғәтнамәнең төплө уйланылған булыуы мөһим. Президенттың һәр тәҡдиме уларҙы тормошҡа ашырыу мөмкинлеген бирәсәк финанс саралары менән нығытылған. Атап әйткәндә, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын, мәктәптәрҙе яңыртыуға йүнәлтелгән федераль программалар барлығын беләһегеҙ. Балалар баҡсаларының эске биналарында, студенттар ятаҡтарында, юғары уҡыу йорттарының һәм колледждарҙың уҡыу корпустарында тәртип булдырырға кәрәклеге хаҡында беҙ күптән һөйләйбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Шуныһы айырыуса мөһим: сәнәғәткә ярҙам саралары артасаҡ, төбәктәрҙең инвестициялар йәлеп итеүгә ынтылышы көсәйәсәк, тип иҫәпләй республика етәксеһе. "Хәҙер төбәк командаларының бурысы - был программаларҙың барыһы менән дә файҙаланыу. Үҙебеҙҙә инвестициялар күләмен арттырыу мөмкин булһын өсөн, беҙгә ҡәтғи күрһәткестәр һәм юғары процентлар ҡуйылған. Эшләйәсәкбеҙ", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

# ҺАЙЛАУҘАРҒА!



**Быйыл мартта халыҡтың 90 проценты тиерлек һайлау участкаларына барырға йыйына, уларҙың 13 проценты өйҙә тауыш бирергә теләй, тип хәбәр итә Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы "ИнформУИК"тың статистика мәғлүмәттәренә һылтанма менән.**

Хәбәр иткәнебеҙсә, участка һайлау комиссиялары хеҙмәткәрҙәре 7 мартҡа тиклем йорттар һәм фатирҙар буйлап йөрөп, халыҡҡа ил Президентын һайлау тураһында мәғлүмәт тарата. Рәсәй Президентын һайлау 15 марттан 17-һенә тиклем бара, һайлау участкалары иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем эшләй. Әгәр һайлау көндәрендә командировкала йәки отпускыла булһағыҙ, алдан ғариза биреп, илдең теләһә ҡайһы участкаһында тауыш бирергә хоҡуғығыҙ бар. Быныһ өсөн 11 мартҡа тиклем паспорт менән территориаль йәки участка һайлау комиссияһына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғаризаны күп функциялы үҙәктә йәки Дәүләт хеҙмәттәре аша ла бирергә мөмкин.

# ҠАРТТАРҘЫҢ ИХТЫЯЖЫ БАР



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Өфөлә "Именлек" геронтология үҙәгенең яңы корпусы 45 процентҡа әҙер булыуын хәбәр итте.**

Республика етәксеһе "Демография" милли проекты сиктәрендә Рәсәй Президенты ҡарары буйынса төҙөлөп ятҡан объектты төбәктә иң мөһимдәренең береһе тип билдәләне. "Әле бинаның алғы яғында эштәр башланды. Был ҡарттар йорто ғына түгел, ә өлкән йәштәгеләр өсөн уңайлы пансионат. Бында медицина блогы, дауалау-хеҙмәт реабилитацияһы бүлексәләре өсөн дә урын табылыр. Проектта ҡышҡы баҡса, йәйге веранда, мөмкинлектәре сикле кешеләр өсөн лифт һәм бассейн күҙ уңында тотола", - тип яҙҙы ул.

Хәбиров һүҙҙәренсә, Башҡортостанда күптәр яңы корпусты бик көтә, сөнки барыһының да үҙ ҡартлығын яҡындары менән ҡаршы алырға мөмкинлеге юҡ. "Ололарҙың ниндәй сәбәптәр менән ошондай социаль учреждениеларҙа йәшәргә мәжбүр булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙең бурыс - улар өсөн һәйбәт, лайыҡлы шарттар булдырыу", - тип билдәләне республика Башлығы.

# БАР ҒАИЛӘ МЕНӘН!

**Башҡортостандан 12 мең ғаилә "Бар ғаилә менән" федераль проектында ҡатнашты.**

Республика - әлеге проектта ҡатнашыусылар һәм призерҙар һаны буйынса алдынғылар араһында. Был хаҡта социаль селтәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Президент иғлан иткән Ғаилә йылында ошо турала һөйләү айырыуса күңелле, тип билдәләп, ул проектта ҡатнашыусыларҙың бер нисә фотоһын һалған.

Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, проектта ҡатнашыусыларға артыҡ ҡатмарлы булмаған эштәр тәҡдим ителә. Мәҫәлән, бергәләп киноға йәки башҡа сараға барырға, байрам табынына ризыҡ әҙерләргә, ғаилә менән саңғыла йөрөргә. Фотоларҙы йәки видеояҙманы #всейсемьей һәм #всейсемьей02 хештегтары менән социаль селтәргә һалырға кәрәк. Иң сағыуҙарына һәм әүҙемдәренә приздар тапшырыла (бүләк сертификаттары, аҡыллы колонкалар һәм хатта сәйәхәткә сығыу мөмкинлеге бар). Проектта ҡатнашыу өсөн уның сайтында теркәлеү зарур. "Бында бүләктәр мөһим түгел, әлбиттә. Иң ҡәҙерлеһе - яҡындарыбыҙ менән үткәргән ваҡыт", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# АУЫЛДЫ ХӘСТӘРЛӘП...



**Башҡортостан Хөкүмәте "Башҡортостан Республикаһында ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" дәүләт программаһын раҫланы.**

Документтан күренеүенсә, 2031 йылға проекттың төп маҡсаттары: ауыл ерендә төҙөкләндерелгән торлаҡ 47,9 процентҡа етергә; ауыл халҡы 37 процент кимәлендә һаҡланырға; ауылда һәм ҡалала йорт хужалыҡтарының уртаса айлыҡ ресурстары нисбәте яҡынса 68 процент тәшкил итергә тейеш. Быныһ өсөн программа сиктәрендә 102 ғаиләнең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу, йәшәү мөхитен тағы ла уңайлы итеү, 10 ауылда юлдарҙы ремонтлау, 1,3 меңгә яҡын белгесте ауылда эшләүгә һәм аграр продукцияны эшкәртеүгә йәлеп итеү өсөн шарттар булдырыу күҙаллана. Документта программа сиктәрендә субсидиялар алыу ҡағиҙәләре, ауыл халҡына торлаҡ төҙәү йәки һатып алыу өсөн социаль түләүҙәр, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына сираттан тыш социаль түләүҙәр биреү тәртибе һәм ярҙам саралары тураһында әйтелә.

2023 йылдың башында Башҡортостанда ауыл халҡы 1,535 миллион кеше (республикала йәшәүселәрҙен 37,7 проценты) тәшкил иткән. 2020 йылда 38,2 процент булған, 26 мең кешегә кәмегән. Ауыл халҡының күпселеге - 10 меңдән аҙыраҡ кеше йәшәгән һәм социаль, транспорт, инженерлыҡ инфраструктураларын үҫтереү талап ителгән ҡасабаларҙа. Башинформ хәбәр иткәнсә, һуңғы дүрт йылда республикала "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" дәүләт программаһының күләме 7,6 миллиард һум тәшкил иткән. Торлаҡ йорттар, фельдшер-акушерлыҡ пункттары төҙәлгән, юлдар, газ һәм һыу үткәргестәр һалынған.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфөнөң "Артерия" үҙәгендә Рәсәй гроссмейстеры Сергей Карякин менән осрашыу булды. Гиннестың рекордтар китабына индерелгән билдәле шахматсы сараға килгән ҡунаҡтарҙың һорауҙарына яуап бирҙе һәм автограф таратты. Бынан тыш, осрашыу барышында Азия чемпионы, баш ҡаланың "Толпар" клубы резиденты Ләйлә Табермакова менән шахматта бер үк ваҡытта уйнау сеансы үткәрелде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Ләйлә Табермакова Рәсәйҙең иң яҡшы спортсылары иҫәбенә индерелде.

✓ 1 һәм 4 мартта Башҡортостан прокуратураһында инвалид, шул иҫәптән шәкәр сиренән яфаланған балаларҙы тейешле дарыуҙар менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса ҡыҙыу бәйләнеш ойошторолдо. Бынан тыш, балаларҙы дарыуҙар менән тәьмин итеү, уларға медицина ярҙамы күрһәтеү мәсьәләләре буйынса Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының ҡыҙыу бәйләнешенә мөрәжәғәт итергә мөмкин: 7 (800) 347-47-47, 7 (347) 218-00-48.

✓ Өфө лимонарийында хәҙер лимондың "Салауат" тигән яңы сорты үҫә. Ул ҡалаға 450 йыл тулыу уңайынан сығарылды. "Салауат" сорты иң ҙуры булып һанала. Уның ауырлығы - 1,8 килограмдан ашыу. Хәҙерге көндә 1 гектар майҙанды биләгән теплицала 1,3 мең лимон ағасы үҫтерелә, улар йылына 25 тонна уңыш бирә. Йыл һайын баҡсаға 30 меңдән ашыу кеше килә. Уҡытыу-тәжрибә хужалығының "Урман", "Салауат", "Ләйсән" сортлы лимондары һәм "Уралтау", "Зилә" цитрондары дәүләт селекция ҡаҙаныштары реестрына индерелгән.

✓ Өфөнән Белорет районына ҡала яны поездарының теҙмәһе үҙгәрҙе, тип хәбәр итә Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы. Мәҫәлән, 26 февралдән Өфө - Белорет электричкаһы (ул иртәнге сәғәт 7-се 7 минутта ҡуҙғала һәм көндәҙгә 12-гә барып етә; кире йүнәлештә - 6-сы 46 минутта) көн һайын йөрөй. Туристарҙы тау саңғыһы курортына алып барған Өфө - Яңы Абҙаҡ - Өфө поезд-дублеры 2 мартҡа уҡ (шәмбе) теҙмәнән сығарыла - ҡышҡы миҙгел тамамлана. Был ял һәм байрам көндәрендә йөрөгән "Урал легендаһы" поезы.

✓ Башгидрометүҙәк яҙҙың тәүге айына һауа торошо менән таныштырҙы. Мартта уртаса айлыҡ температураның нормаға ярашлы булыуы көтөлә. Төүлегенә уртаса -5°С. Яуым-төшөм дә норма сиктәрендә (20-40 миллиметр) көтөлә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!



# ЕҢЕҮГӘ ЫШАНЫСТЫ НЫҒЫТТЫ

**РФ Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа быйылғы Мөрәжәғәтнамәһен һәр кем көтөп алғандыр, моғайын, сөнки илдәге, шулай уҡ бөгөнгө халыҡ-ара хәлдәр менән бәйле йәмғиәттә юғары кимәлдә баһа биреүҙе көткән мәсьәләләр һәм һорауҙар тупланып киткәйне. Президент был йәһәттән Махсус хәрби операция, геополитик хәлдәр, социаль сәйәсәт, илде технологик йүнәлештә үҫтереү, эшҡыуарлыҡты күтәрмәләү һәм башҡа мөһим мәсьәләләр буйынса яҡындағы алты йыллыҡҡа ғына түгел, ә илдең ышаныслы һәм оҙайлы үҫешенә булышлыҡ итәсәк стратегик бурыстарҙы ла көн тәртибенә ҡуйҙы. Уның әйтеүенсә, Мөрәжәғәтнамә программаһындағы башланғыстар граждандарҙың тәҡдимдәренә нигеҙләнде.**

***МХО-ла ҡатнашыусылар хаҡында.*** "Бөгөн Ватаныбыҙ мәнфәғәтендә көрәшеүселәрҙең барыһына ла рәхмәтемде белдерәм. Бөтөн халыҡ һеҙҙең ҡаһарманлыҡтар алдында баш эйә", - тине Путин һәм махсус операцияла ҡатнашыусыларға төбәп һәм конфликт барышында һәләк булғандар иҫтәлегенә бер минутлыҡ тынлыҡ иғлан итте. Рәсәй халҡының күпселеге МХО-ны хуплауын белдереп, һынауҙарға, юғалтыуҙар ҡайғыһына ҡарамаҫтан, һайлаған юлдан тайпылмаясаҡ, тине ул. Рәсәй яугирҙарының хәрби мөмкинлектәре күп тапҡыр-ҙарға артыуы билдәләп кителде. "МХО-ны тамамлау, уның бөтөн бурыстарын да үтәү, нацизмды тамырынан ҡоротоу, суверенитетты һәм граждандарҙың хәүефһеҙлеген яҡлау өсөн бөтәһен дә эшләйәсәкбеҙ", - тип белдерҙе Президент. Ул махсус операцияла ҡатнашыусылар менән даими осрашып, аралашып тороуы хаҡында һөйләне һәм был ҡаһарман егеттәр менән сикһеҙ ғорурланыуын, уларға таянырға мөмкин булыуына ныҡлы ышаныс белдерҙе. МХО ветерандары йәмғиәттә, мәғарифта, дәүләт компанияларында, бизнес һәм дәүләт идараһында алдынғы урындарҙа булырға, Хәрби көстәр хеҙмәтендә өҫтөнлөклө үрләтелергә тейештәр. Улар шулай уҡ илдең төп вуздарында юғары белем һәм һөнәр алыуҙа өҫтөнлөк менән файҙаланасаҡтар.

***Көнбайыш менән мөнәсәбәттәр.*** Украинаға НАТО ғәскәрен ебәреү хаҡында һүҙ ҡуҙғаталар. Ҡасандыр беҙҙең илгә яу менән килгәндәрҙең яҙмышын яҡшы хәтерләйбеҙ. Әле иһә ихтимал булған интервенттарҙы күпкә фажиғәлерәк эҙемтәләр көтә, сөнки, улар тарафынан һөжүм була ҡалһа, Рәсәйҙең Көнбайыш биләмәһендәге сәптәрҙе лә юҡ итергә һәләтле ҡоралы бар. Ҡорал, тигәндән, В.Путин тиҙҙән күрһәтеләсәк "Сармат" баллистик ракеталары, МХО барышында ҡулланылған тауыш тиҙлегенән дә шәберәк "Циркон", "Кинжал", "Авангард" ракета комплекстары, "Пересвет" лазер комплексы, "Посейдон" һыу аҫты аппараты, "Буревестник" ҡанатлы ракеталар тураһында телгә алды һәм илебеҙҙең теләһә ниндәй һөжүмдә кире ҡаға алырлыҡ стратегик ядро көстәренең тулы хәрби әҙерлек хәлендә тороуына ишара яһаны. Шул уҡ ваҡытта Президент нисәнсе тапҡыр инде стратегик тотороҡлолоҡ буйынса Рәсәйҙең АҠШ менән килешеүгә әҙер булыуын, әммә Вашингтондың идара даирәләре фәҡәт үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртыуҙары арҡаһында уларҙың шарттарын бер яҡлы ғына ҡабул итеү мөмкин булмауын белдерҙе.

***Фәҡирлеккә ҡаршы көрәш.*** Бөгөн Рәсәйҙә халыҡтың 9 проценты һәм күп балалы ғаиләләрҙең 30 проценты фәҡирлектә йәшәй. 2030 йылға был һан кимәле 7 проценттан кәмерәк булырға тейеш. Мөрәжәғәтнамәлә аҙ тәьмин ителеүселәргә ярҙам саралары ҡаралыуы хәбәр ителде: 2030 йылға эш хаҡының минималь күләме әлеге 19,2 меңдән 35 меңгә тиклем арттырылырға тейеш. Шулай уҡ Путин бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙең эш хаҡтарында илдең төрлө төбәктәрендә төрлөсә айырма булыуын ғәҙелһеҙлек тип атаны һәм Министрҙар кабинетына киләһе йылға бюджет хеҙмәткәрҙәренә түләүҙең яңы моделен эшләргә ҡушты.

***Ғаилә ҡиммәттәре, тыуымды арттырыу.*** Ғаиләләр хаҡында хәстәрлек - төп иғтибар үҙәгендә. Әсәлек капиталы 2026 йылғаса тип ҡаралыуға ҡарамаҫтан, ул 2030 йылға тиклем дауам ителәсәк. Ғаиләлә өсөнсө бала донъяға килгәндә Президент ипотекаға дәүләт иҫәбенә түләү программаһын 450 мең һум күләмендә билдәләргә тәҡдим итте. Ғаилә ипотекаһы программаһы 2030 йылға тиклем дауам итәсәк. Яҡындағы алты йылда тыуымды тотороҡло арттырыуға йүнәлеш бирелә. Былтыр иһә 1,265 млн сабый тыуҙы - был һуңғы 23 йыл эсендәге иң түбән күрһәткес. Ғаиләләрҙең тормош кимәлен яҡшыртыу, тыуымды арттырыу йәһәтенән "Ғаилә" милли проекты эшкә ҡушыласаҡ. "Рәсәй төбәктәре балалы ғаиләләргә үҙҙәренең ярҙам сараларын тормошҡа ашыра. Тыуым кимәле уртасанан түбән булған төбәктәргә булышлыҡ итергә тәҡдим итәм. 2030 йылға тиклем ошондай төбәктәргә 75 миллиард һумдан ашыуыраҡ аҡса йүнәлтербеҙ", - тине Президент. Рәсәйҙә ярлылыҡ проблемаһы кисҡен тора, ул "халыҡтың 9 процентҡан ашыуына ҡағыла", тип белдерҙе Владимир Путин. "Ә ишле ғаиләләр араһында ярлылыҡ кимәле яҡынса 30 процент тәшкил итә. 2030 йылға күп балалы ғаиләләр араһында ярлылыҡ кимәлен 12 процентҡа тиклем кәметергә өлгәшергә кәрәк", - тине ул. "Һуңғы ике йылда ҡуйылған бурыстар ... " 

"Һуңғы йылдарҙа" — 

"Һәр күп балалы ғаилә нормаға әйләнергә тейеш", - тине Владимир Путин. Бынан тыш, Рәсәйҙә тағы ла "Оҙайлы һәм әүҙем тормош", "Кадрҙар", "Рәсәй йәштәре", "Мәғлүмәттәр иҡтисады" милли проекттары ғәмәлгә индерелә.

***Бизнесты үҫтереү.*** Рәсәй бизнесы ватан юрисдикцияһында эшләргә һәм аҡсаны сит илгә сығармаҫҡа тейеш, юғиһә, уларҙың юҡҡа сығыуы ихтимал. Бәләкәй һәм урта бизнес ил иҡтисадына зур өлөш индерә. Шуға күрә Владимир Путин уларға ҡарата баҫым яһауҙарға ҡаршы булыуын белдерҙе. Шуныһы ҡыуаныслы: һуңғы йылдарҙа йәш эшҡыуарҙар һаны арта бара (20 процентҡа), уларға ярҙам итергә кәрәк. "Улар өсөн бер ниндәй штрафтар ҙа, һалымды ҡайтанан иҫәпләүҙәр ҙә булырға тейеш түгел", тип билдәләне Президент.

***Шулай итеп, донъя шаңдауы.*** Рәсәй Президенты Мөрәжәғәтнамәһенән көнбайышҡа ишара, тип атаны Reuters агентлығы: "Путин, әгәр ҙә Көнбайыш илдәре Украинаға хәрби көстәр ебәрә ҡалһа, быны ядро һуғышына сәбәпсе булыуы ихтимал". Financial Time хәбәр итеүенсә, Путин сығышындағы маҡсаттарҙың береһе әлеге хәл иткес мәлдә Көнбайыш илдәренең Украинаға ярҙамын сикләргә ынтылыу. Sky News белдереүенсә, Бөйөк Британия премьеры Риши Сунактың вәкиле Путиндың, Украина конфликтына Көнбайыштың ҡыҫылыуы ядро һуғышы ихтималлығы тыуҙыра, тигән һүҙҙәре ныҡ тәьҫир иткән. The Wall Street Gournal гәзите, Рәсәй лидерының Президент һайлауҙары алдынан был сығышы Путиндың еңеүгә ышанысын нығытты, тип яҙҙы.

ҠЫҪҠАСА

## БАЙРАМҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**Өфө мэры Ратмир Мәүлиев "Сәләм" тапшырыуының тура эфирында баш ҡаланың 450 йыллығын билдәләү өсөн төп майҙансыҡтарҙы әйтте.** Улар - ҡала советы, "Ватан" этнопаркы һәм Өфө-Арена, ҡунаҡтар ҡатнашлығында рәсми саралар шунда ойоштороласаҡ. Ратмир Мәүлиев һүҙҙәренсә, Өфөнөң юбилейын 31 августа билдәләргә йыйыналар. "Байрам унайынан ҡала халҡы "бүләктәр" ала башланы ла инде. Беҙ яңыртылған Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын, Өлфәт Мостафин исемендәге яңы Спорт әҙерлеге үҙәген, ябыҡ футбол майҙанын файҙаланыуға тапшырҙыҡ. Күптән көтөлгән Зинин юл үткәргесе асылды. 45 мең тиерлек иҫке яҡтыртҡыс замансаһына алмаштырылды. "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" төбәк проекты буйынса Аксаков исемендәге баҡса һәм Альбанов скверы төҙөкләндерелде. Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркы, Йылы күле янындағы биләмә яңыртылды. Үҙенсәлекле "Өфө муйынсағы" проекты һәм "Йәшел Башҡортостан" экологик акцияны үҫешенеүен дауам итә", - тип билдәләне ул.

✔ **Башҡортостанда "Управдом" форумы 2024 йылдың апрелендә ойоштороласаҡ. "Йыл да үткәрелгән форумда торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге көнүҙәк мәсьәләләр ҡарала.** Улар араһында - күп фатирлы йорттар менән идара итеү һәм торлаҡ фондын капиталь ремонтлау. Шулай уҡ консультация майҙансыҡтары ойоштороласаҡ, унда министрлыҡ эксперттарынан тыш, торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе, тарифтар буйынса дәүләт комитеты хеҙмәткәрҙәре, төбәк операторҙары, ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмалар һәм башҡалар ҡатнаша. Улар халыҡты борсоған проблемалар тураһында һөйләр", - тине Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Вилорий Угаров.

✔ **Башҡортостанда 11-13 апрелдә яҙғы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм төҙөлөш форумы, шулай уҡ "Төҙөкләндереү. Инженер системалары" һәм "УралСтройИндустрия" күргәҙмәләре ойоштороласаҡ.** Был хаҡта республика Хөкүмәте хәбәр итә. Төп майҙансыҡ - баш ҡаланың "ВДНХ-Экспо" күргәҙмә комплексы. Ҡатнашыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы 15 тармаҡ түңәрәк өҫтәле һәм осрашыу көтә, унда 100-ҙән ашыу спикер һәм 1,4 мең делегат ҡатнаша. Форумда проектлау һәм төҙөлөш өсөн TIM-технологиялар һәм ҡарарҙар, ҡала һәм йорт яны территорияларын төҙөкләндереүҙең иң яҡшы тәжрибәләре тураһында фекер алышыу була. Бынан тыш, бында студенттарҙың "Замансаа шарттарҙа төҙөлөш һәм биләмәне төҙөкләндереүҙең көнүҙәк мәсьәләләре" Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы, төҙөлөш һәм архитектура өлкәһендә студенттар эштәре конкурсы үткәрелә.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Ҡыҙыл көртмәле

Ҡыҙыл көртмәле емешендә бик күп төрлө файҙалы матдәләр, витаминдар бар. Дауаға емешен һәм япрағын файҙаланалар. Япрағын яҙғыһын ҡыуаҡ сәскә атҡан осорҙа йыйылар, әммә бөрмәләнгән һәм ҡыҙыл төҫтәгеләре шифаһыҙ. Яңы йыйылған ҡыҙыл көртмәле һәм һуты ашҡаҙан һәм бөйән сей ярағы булғанда ярамай, ә бөйәр ауырыуҙары осрағында табип рөхсәтен алып ҡына ҡулланырға кәрәк.

❖ Артриттан 2 балғалаҡ ҡыҙыл көртмәле япрағына 1 стакан һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға, һыуытып һөҙөргә, көн дауамында аҙ ғына уртлап эсеп бөтөргә. Шулай уҡ 20 грамм киптерелгән япраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут тотоп әҙерләнгән төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсеп тә дауаланырға мөмкин.

❖ Тән температураһы юғары күтәрелгәндә ҡыҙыл көртмәленең һутын һығып, ҡайнатылған йылы һыу ҡушып эсергә була.

❖ Түбән әселекле гастрит, эс киткәндә емештәрҙең яңы йыйылғаны, йәки һыуҙа ебетелгән киптерелгәне, шәкәр ҡушып бешерелгәне файҙалы.

❖ Гипертония, авитаминоз, йүтәл, эс киткәндә тос ҡына емештәрҙе сүпләп алып, яртыһын йомшарғансы духовкала быҡтырырға, ә ҡалғанының һутын һығып алырға. Быҡтырылғандың да һутын һығып алырға һәм һуттарҙы ҡушып, шәкәр йәки бал менән тәмләтергә, 1 литр һутҡа 1 ҡалаҡ нисбәтендә араҡы өҫтәргә. Ауырығанда көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ Аҙҡанлылыҡ, радиоактив нурланыш, шәкәр диабеты булғанда 1 ҡалаҡ емешкә 1 стакан һыу ҡойоп, талғын утта 10 минут ҡайнатырға, ауыҙын ябып 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 2 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр стакан эсергә. Тағы ла яңы йыйылған емеште вәклап, 1:10 нисбәтендә ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Аҡсабан, аҡ өйрәк**
**(Луток)**



Аҡсабандар менән балыҡсы өйрәктәр төркөмөн башлайбыҙ. Атамаһынан уҡ күренеүенсә, улар тик балыҡ менән туҡлана. Суҡышы ла бының өсөн махсуслашҡан. Аҡсабан уларҙың иң вағы. Ата ҡош үҙе аҡ, арҡаһы ҡара, күҙҙәре эргәһендә һәм соңҡаһында ҡара табы бар. Ҡабырғалары аҡһыл-буҙ, арҡыры биҙәктәр менән сыбарланған. Инә ҡош буҙ, башы һоро, түше һәм сикәләре аҡ. Тауышы көслә, "керр" тип ишетелә.

Төбәктә һирәк осраған, юғалып барған төркөмгә индерелгән.

Скандинавиянан алып Охот диңгеҙенә тиклем оя ҡора.

Өфө губернаһында ла осраған. XX быуатҡа аҡсабандарҙың һаны ныҡ кәмеп, ул Урал алдында төйәкләнеүҙән туҡтаған. Көньяҡ Уралда Һаҡмар, Оло Ыҡ буйында осраған. Хәҙерге ваҡытта осоп китеп барышлай ғына Кама буйында күреүселәр бар. Шулай уҡ Учалы районында, Көньяҡ Урал ҡурсаулығында, "Шүлгәнташ"та осраған. Павловка һыуһаҡлағысында 1978 йылда өс аҡсабан йөҙөүен ғалимдарға күрергә тура килгән. Был сама менән яҙын апрель урталарында, йылға буйҙарында йәшел үлән сыҡҡас була. Ҡоштар парлашып оса, ағас ҡыуышлығын, ағастарға эленеп торған йәшниктәрҙе лә оя ҡороу өсөн һайлай. Ояның аҫтына күп итеп ап-аҡ йөнөн ҡоя.

6-8, һирәгерәк 9-11 йомортҡа һала. Инә ҡош майҙың урталарына тиклем баҫа. Инә ҡош йомортҡа һала башлағандан алып, бәпкәләр сыҡҡансы ата ҡош оянан йыраҡ китмәй. Һуңыраҡ йән ҡойоу урындарына йүнәлә. Бәпкәләр июндә сыға. Кибенгәс тә улар оянан һикереп төшөп, инәләре артынан һыуға йүнәлә. 9 аҙналыҡ булғас, оса башлайҙар.

Аҡсабан, башҡа балыҡсы өйрәктәрҙән айырмалы рәүештә, ҡуныҙҙар менән туҡлана, балыҡ унын рационында бик һирәк. Балыҡсы өйрәктәрҙең бөтөн төрҙәрен дә Ырымбур өлкәһендә күрергә була.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

## ил кимәлендә яңғырааталар

**Ошо көндәрҙә Өфө фән һәм технологиялар университетында Рәсәй халыҡтарының туған телдәре һәм әҙәбиәте буйынса федераль олимпиаданың башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса йомғаҡлау этабы үтте. Өсөнсө тапҡыр ойошторолған был ярыш ысын мәғәнәһендә тел һәм рух байрамына әйләнде. Мәктәп уҡыусылары араһында үткән был олимпиаданың һайлап алыу өлөшөндә 803 уҡыусы үҙ көсөн һынаған, шуларҙың 363-өнә баш ҡаланың мәртәбәле юғары уҡыу йорттарының береһендә уҙғарылған этабында ҡатнашыу мөмкинлеге бирелгән.**



Бында уҡыусылар республиканың төрлө район-ҡалаларынан йыйылғайны. Араларында беренсегә килеүселәре лә, икенсе тапҡыр ҡатнашыусылары ла булды. Балалар менән әңгәмәләшә, таныша йөрөй торғас, уларҙың олимпиаданың һайлап алыу этабын ауырлыҡһыҙ үтеүен, ярышҡа башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслектәрен, Башҡорт әҙәбиәте теорияһы, Ғайса Хөсәйеновтың китаптарын уҡып әҙерләнеүҙәре тураһында белдек. Ә шулай ҙа олимпиаданың текстарға анализдар яһауға арналған өлөшө ҡатмарлыраҡ булыуын да әйтеүселәр булды. Мәҫәлән, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатынан Нурзилә Хәсәнова башҡорт теленән БДИ тапшырыусыларға 2008 йылда нәшер ителгән ҡулланма буйынса әҙерләнгән һәм унда бик күп файҙалы мәғлүмәт биреләүе утраһында һөйләне.

Олимпиадаға уҡыусыларҙың кемеһеләр беренсе тапҡыр килһә, икенсе йыл рәттән ҡатнашҡан һәм еңеү яуларға маҡсат ҡуйғандары ла байтаҡ булды. "Беренсе тапҡыр ҡатнашам һәм бик тулҡынланып һынауҙар башланыуын көтәм. Асҡын 2-се урта мәктәбенән өс кеше килдек, арабыҙҙа былтыр ҙа бында үҙ көсөн һынап ҡарағандар бар. Башҡорт телен бик яратып өйрәнәм һәм төрлө конкурстарҙа, төбәк-ара олимпиадала ла ҡатнашып торам. Киләсәктә логопед һөнәрен һайларға теләйем һәм туған телемде белеүем эшемдә лә кәрәгәсәк, тип уйлайым", - ти Асҡын ауылының 2-се мәктәбенән 10 класс уҡыусыһы Азалия Шәһиева. Әйткәндәй, ошо уҡ мәктәптән башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән Нургизә Рамаҙанова ла килгәйне. Ҡыҙ башҡорт телен 9-сы класҡа тиклем өйрәнеүе, хәҙер бер йыл дәрестәр булмауға ҡарамаҫтан, уҡытыусыһы уға өҫтәлмә ваҡыт бүлеүен, олимпиадала ҡатнашыу өсөн ял һәм байрам көндәрендә, каникулда ла шөғөлләнеүҙәрен һөйләне.

Алыҫ Ейәнсуранан килеп еткән уҡыусылар араһында Рәсим Ишмурзин һәм Азалия Дауытова ла тәъсораттары менән бүлеште. Улар олимпиадала беренсе тапҡыр ҡатнаша, киләсәктә береһе техник һөнәр үҙләштерергә, икенсеһе психолог булырға хыяллана. Баймаҡ районынан килгән бер төркөм балалар араһында Илсиә Сырлыбаева менән Гүзәлиә Садиҡова тап булып, олимпиадаға ныҡлы әҙерләнеп килеүҙәре тураһында һөйләне. Мәсетле районынан - 6, Бөрйәндән 10 уҡыусы килгән. "Оҙаҡ йылдар хыялланып көткәйнек башҡорт теленән федераль кимәлдәге олимпиада ойоштороулоуын, әле унын бик юғары кимәлдә үткәрелеүен күреп, күңел һөйөнә. Былтыр мәктәбебеҙҙән ике уҡыусы ҡатнашһа, быйыл унау булып килдек. Уҡыусыларҙы олимпиаданың юғары уҡыу йорттарына ингәндә өҫтөнлөктәр биреүе ҡыҙыҡһындыра былай. Әммә улар ҙа, уҡытыусылар ҙа әле был олимпиаданың әһәмиәтен тулыһынса аңлап бөтмәйҙәрҙер", - ти Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылы мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Айгөл Үтәбаева. Уның һыҙҙарен коллегаһы, Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылы Башҡорт гимназияһы филиалы Яңы Яуыш төп дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Гөлнара Абдрахманова ла йөпләне: "Былтыр гимназияның ике уҡыусыһы ҡатнашып ҡайтҡас, быйыл беҙ ҙә ҡыҙыҡһынып киттек һәм Яңы Яуыш мәктәбенән ике уҡыусымды алып килдем. Ғөмүмән әйткәндә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, мәҙәниәт, тарихҡа ҡағылышлы төрлө конкурстар күп үткәрелә һәм уҡыусылар менән Өфөгә йыш килеп торабыҙ. Шулай ҙа был федераль олимпиаданың баһаһы юғары", - ти педагог.

Шундай мәртәбәле ярышҡа тулҡынланып килгән уҡыусыларҙы Өфө фән һәм технологиялар университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетының йылы ҡаршы алыуы ла арбаны. "Университет беҙҙе шул тиклем йылы итеп ҡаршы алды. Быйыл мин олимпиадала мотлаҡ еңеү яуларға кәрәк, тигән көйләнештә килдем. Сөнки артабан ошо юғары уҡыу йортонда белем алырға теләйем, ә еңеүселәргә 50 мең һумдан ашыу стипендия, ҡунаҡхана тибындағы ятаҡта йәшәү кеүек өҫтөнлөктәр бирелә. Үҙем башҡорт телен генә түгел, инглиз телен дә яҡшы өйрәндем һәм тиҫтерҙәремә лә күберәк телдәр белергә, ҡайҙа барһалар ҙа кешеләр менән аралашып йөрөргә кәңәш итәм", - тине тәъсораттары менән бүлешеп Р. Ғарипов исемендәге 1-се БРГИның 11-се класс уҡыусыһы Сара Истәкова. Ошо уҡ белем усағынан 11-се класс уҡыусыһы Ирхан Хисаметдинов иһә, үткән йылда призер булып, быйыл еңеү артынан килгән. "Олимпиаданың өҫтөнлөктәре менән тулыһынса файҙалана алыу өсөн беренсе урын алырға кәрәк. Киләсәктә нәҡ телгә бәйле һөнәр һайламаçмын, бәлки. Сөнки әлеге мәлдә мәғлүмәти-технологик йүнәлештәге класта уҡыйым һәм бөгөн илебеҙгә кәрәкле IT-белгес булырға ниәтләйем. Әммә ниндәй генә өлкәлә эшләһән дә, ҡайҙа ғына булһаң да, башҡорт теле - туған телем, һәм уны нисек булһа ла үҫтерергә, унын менән шөғөлләнергә тейешмен, тип уйлайым. Ғөмүмән, үҙ халҡын яратҡан һәр кешенең изге бурысы булып тора был", - ти Ирхан.

Олимпиадала ҡатнашыусыларҙы Федерация Советының Мәғариф, фән һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова видеобәйләнеш аша сәләмләне. Ул Төньяҡ-Көнсығыш университет тәҡдиме менән ойошторола башлаған Федераль олимпиадала быйыл 44 тел буйынса 9678 уҡыусы ҡатнашыуы, был эште тәүгеләрҙән булып Башҡортостанда Өфө фән һәм технологиялар университеты күтәрмәләп алыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Университетҡа, телһөйәр уҡыусылар тәрбиәләгән педагогтарға, ата-әсәләргә рәхмәтен белдерҙе. Сарага мәртәбә өҫтәп, БР мәғариф министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, ӨФТУ проректоры Илгиз Ҡыҙырғолов, БР Башлығы Хакимиәтенән Рөстәм Баянов, БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Әлфис Ғаязов уҡыусылар алдында сығыш яһаны һәм кәңәштәрен, изге теләктәрен еткерҙе.

- Башҡорт теленән федераль кимәлдәге олимпиаданы өсөнсө тапҡыр ойоштораб‌ыҙ. Был эште яҡуттарҙың идеяһына таянып, тәүгеләрҙән булып башлаған алты вуз араһында булдыҡ. Олимпиада балаларҙың үҫешенә ҙур йоғонто яһай, сөнки улар республика сигенән сығып, бөтә ил кимәлендә үҙен, белемен күрһәтә ала һәм иң мөһиме, туған телебеҙҙең әһәмиәтен аңлата алабыҙ. Факультетыбыҙ йылдан-йыл ҡатнашыусылар һаны арта барған олимпиаданы лайыҡлы ойоштора алыуына хеҙмәттәштәремә, рухлы уҡытыусыларға рәхмәтлемен. Сөнки күптәр юл сығымдарын үҙ кеҫәһенән ҡаплап килтерә икәнен дә беләм. Шуға олимпиаданың икенсе турында ҡатнашҡан бер бала ла буш ҡул менән ҡайтмай, еңеүселәр, призерҙар ғына түгел, төрлө номинациялар ҙа билдәләнә һәм һәр кемгә сертификаттар тапшырыла. Был уҡыусыға ла, уҡытыусыға ла аҡсалата премия алыу мөмкинлеген бирә. Әйтергә кәрәк, ярыштың географияһы бик киң, республиканан ситтә йәшәгәндәр ҙә һайлап алыу өлөшөндә ихлас ҡатнаша, тик икенсе турға килә алмаусылар бар. Әммә тамаша залына, аудиторияларға һыймай бөгөн килеүселәр. Шуға киләһе йыл "Торатау" конгресс-холы кеүек ҙур бинала уҙғарыу мөмкинлеге булдырылыр, бәлки, тигән өмөт бар. Олимпиада һөҙөмтәләре буйынса еңеүсе булған балалар рус теленән БДИ-ла 75 балл йыйһа, факультетыбыҙҙағы филология һәм педагогик белем биреү йүнәлештәрендәге бүлектәргә имтиханһыҙ ҡабул ителәсәк. Шулай уҡ уларға университет 1 курс дауамында ай һайын 58 мең һум стипендия түләйәсәк. Бындай өҫтөнлөк тик беҙҙең юғары уҡыу йортонда ғына булдырылған, ә инде башҡа факультеттарға, йәки Рәсәйҙең башҡа вуздарына уҡырға инһәләр - олимпиадалағы еңеүҙәре өҫтәлмә балл рәүешендә иҫәпләнәсәк.

Әйткәндәй, бюджет урындарыбыҙ йылдан-йыл арта, киләһе уҡыу йылына, мәҫәлән, башҡор-ҡытай бүлегендә - 15, башҡорт-инглиз бүлегендә - 10, ғәрәп-инглиз бүлегендә - 15 бюджет урыны һ.б. ҡаралған. Бынан тыш, шәрҡиәт һәм африканистика, журналистика йүнәлештәрендә лә урындар бар. Ситтән тороп уҡыу бүлегендә экскурсоводтар әҙерләү буйынса 15 бюджет урыны булдырҙыҡ", - тип һөйләне башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә Абдуллина.

**Шулай итеп, әлегә уҡыусылар белемдәрен ҡағыҙҙарға төшөрөп, һорауҙар буйынса фекер алышып, Өфө фән һәм технологиялар университеты, баш ҡаланан алған тәъсораттары менән бүлешеп ҡайтты, ә инде Федераль олимпиада һөҙөмтәләре тик бер айҙан һуң ғына билдәле буласаҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



**Көнбайыш Төрки ҡағанаты**

Төркиҙәрҙең замандаштары уларҙың йолаларының, кейемдәренең этнографик үҙенсәлектәре хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған. Мәҫәлән, ир-аттар оҙон халат кейеп, уның һул итәген бөкләп, билдәренә ҡыҫтырып йөрөгән (бында һүҙ киң таралыу тапҡан елән хаҡында бара. - **Тәрж. иҫк.**). Төрки ҡатын-ҡыҙҙары кеүек үк, ирҙәрҙең дә, оҙон сәстәрен үреп, ваҡ-ваҡ ҡына толомдар яһап йөрөүе мөһим этник күрһәткес булған.

Ошо дәүерҙә йәшәгән Ҡытай тарихсылары теркәп ҡалдырған мәғлүмәттәргә ярашлы, төркиҙәр үлгән кешеләрен яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә, ағас япраҡтары һарғая һәм ҡойола башлаған саҡта ерләгән; көҙ һәм ҡыш айҙарында үлгәндәр яҙ еткәс, үҫемлектәр сәскә ата башлағас ҡына ерләнгән. Билдәләнгән бер көндә үлгән кешенең үҙе менеп йөрөгән атын, ул ҡулланған әйберҙәрен алып килеп, үлгән кешенең мәйете менән бергә яндырғандар, шунан һуң ҡалған көлдө йыйып алып, билдәле бер урындағы ҡәбергә күмгәндәр. Төркиҙәрҙең икенсе бер төркөмө, мәйеттәрҙе яндырыу менән бер рәттән, уларҙы ҡәбергә һалып та ерләгән. Ҡәбергә ерләнгән кеше янына йә иһә айырым соҡорға уның аты ла күмелгән. Ҡәберҙәр өҫтөнә ҡурған өйөлгән, унда йыш ҡына таштар ҙа һалынған. Төркиҙәр мәҙәниәтен ҡылыҡһырлаған элементтарҙың береһе - кеше бейеклегендәге таш һындар яһап ҡуйыу. Улар үҙҙәренең ысынбарлыҡты ныҡ сағылдырыуы менән айырылып тора. Уларҙа сәстәре үрелеп толомланған, башлыҡ кейгән, буйынан-буйына металл пластинкалар менән ҡапланған оҙон аҫылмалы бил ҡайыштары булған ир-аттар һынландырылған. Бындай һындарға, ҡуҡрәк йә иһә ҡорһаҡ тәңгәлендә ҡулдарын бөгөп тороп, ҡош йәки һауыт тотҡан поза характерлы. Ошондай таш скульптураларҙа ысынбарлыҡта йәшәгән күренекле заттар һынландырылған, тип иҫәпләнә, күрәһең, бындай таш фигуралар махсус заказ буйынса эшләнгәндер.

Шул уҡ ваҡытта кеше һындары ағастан да яһалған. Был турала Ҡытай сығанаҡтарында иҫкә алына. Мәҫәлән, уларҙың береһендә үлгән кешене ерләгәндән һуң уның ҡәбере өҫтөндә бина һалыныуы һәм уның эсенә "күмелгән кешенең һыны төшөрөлөүе һәм ғүмере буйына ул ҡатнашҡан яуҙар һүрәтләнеүе" хаҡында бәйән ителә. Беҙгә айырым төбәктәрҙең Көнбайыш Төрки ҡағанаты составына ниндәй шарттарҙа инеүе билдәле түгел. Айырым төбәктәр үҙҙәренең үҙаллылығын һаҡлап ҡала алған, тип фекер йөрөтөргә ерлек бар, һәм, моғайын, уларҙың бәйлелеге, башлыса, ҡағандың үҙәк власын танырға, яһаҡ түләүгә һәм башҡа бер шартлы нәмәләргә ҡайтып ҡалған була. Ошо йәһәттән ҡытайлыларҙың VI-VII быуаттарҙағы Кангюй хаҡындағы мәғлүмәттәре ҡыҙыҡлы. Улар фекеренсә, Кангюй ҡағаны "үҙенең киң күңеллелеге һәм игелекле булыуы менән халҡын үҙенә ныҡ ылыҡтыра алған. Уның ҡатыны - тукюс ханы ҡыҙы. Ул Сабао йылғаһы буйындағы Алуди ҡалаһында йәшәй. Ҡала күп кешеле. Өҫ түрә-вельможа дәүләт эштәре менән идара итә. Хужа сәстәрен үреп йөрөй, ете ҡиммәтле ташы булған алтын таж кейә. Кейеме ебәк туҡымаларҙан тегелгән. Ҡатыны сәстәрен башына урап һалып ҡуя һәм уларҙы ҡара әйбер менән ҡаплай. Ирҙәр сәстәрен алдырып йөрөй, ҡамсат елән кейә. Кангюй көслө дәүләт тип һанала. ...Төрки уложениеһы бар, ул ҡорамда һаҡлана. Яҙа төрөн билдәләү өсөн ошо уложениены ҡарайҙар һәм эште хәл итәләр. Әһәмиәтле тип һаналған енәйәттәр өсөн тотош нәҫеле менән язалайҙар; әһәмиәте аҙыраҡ булғандары өсөн үлем язаһы бирелә, урлашҡан өсөн аяҡтарын киҫеп алалар... Уларҙың дәүләтенә сауҙа итеү өсөн сит ил кешеләре күп килә. Ҙур һәм бәләкәй бубендары, гитара, биш ҡыллы гусли, флейталары бар. Никахлашыу һәм ерләү йолалары тюкюстарҙыҡы кеүек. Резиденцияла ата-бабалары хөрмәтенә ҡорам ҡуйылған, унда алтынсы ай тыуғанда ҡорбан салалар. Башҡа хужалар ҡорбан салыу өсөн ярҙам итергә киләләр... Төрки яҙмаһын ҡулланалар".

Был мәғлүмәттәр Кангюй дәүләтенә ҡағылышлы, ә ул территориаль яҡтан Көньяҡ Уралға иң яҡыны булып, бынан алдағы быуаттарҙа был тарафтарҙа йәшәгән халыҡтар өсөн патрон (ҡурсалаусы) ролен үтәгән. Сағыштырмаса үҙаллы дәүләт булған хәлдә лә Кангюйҙың бер ни тиклем кимәлдә төркиҙәр менән бәйлелеге беленеп тора: уларҙың хандары (ҡағандары) төрки хандары ҡыҙҙарын ҡатынлыҡҡа ала, төрки ҡанундарын ҡуллана. Никахлашыу һәм ерләү йолаларының төркиҙәрҙекенә тап килеүе Кангюй халҡының боронғо дәүерҙәрҙән үк төрки телле булыуына дәлил. Әле иҫкә алынған документта ҡағандың сәстәрен толомлап үреп йөрөтөүе хаҡындағы мәғлүмәтте, шул дәүергә ҡараған характерлы йола булараҡ, ижтимағи билдә итеп ҡарау фарыз. Әлбиттә, бары ҡағандың ғына сәсен үреп йөрөтөү хоҡуғы булған, а башҡа ирҙәр сәстәрен ҡырҙыртып торған. Төркиҙәрҙең тарихын һәм мәҙәниәтен бына ошондай нескәлектәрен дә күрһәтеп өйрәнеүҙең билдәле сәбәптәре бар: уларҙың Көнбайыш һәм Көнсығыш Төрки ҡағанаттарында хасил булған байтаҡ ҡына мөһим билдәләре, ҙур дала киңлектәренә тарала барып, урындағы халыҡтарҙың тарихы һәм мәҙәниәтенең айырып алғыһыҙ бер өлөшөн тәшкил иткән. VI-VII быуаттарҙа Көнбайыш Төрки ҡағанаты власына буйһоноп йәшәгән Көньяҡ Урал ҡәбиләләре лә ошондай тарихи-мәҙәни йоғонтонан ситтә ҡалмаған.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"Әбә" - әсә. Уғыҙса. Төркмән-карлуктарҙа ҡаты (һаңрау) "ба" менән әйтелә: "әпә".**

Беҙҙең өсөн бик ҡыҙыҡлы лингвистик феномен. Боронғо уғыҙҙарҙың "әбә"һе башҡортса "әбей", татарса - "әби", ҡаҙаҡса "әже" тигән һүҙҙәргә фонетик яҡтан оҡшаш булһа ла, был һүҙҙәр кемдәндер ата-әсәһенән олораҡ булған ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата ҡулланыла. Ә төркмәндәрҙең "әпә" һүҙенә оҡшаш булған "апа" һүҙе башҡорттарҙа, татарҙарҙа, "апа", "әпкә" варианттары ҡаҙаҡтарҙа үҙендән олораҡ ҡатын-ҡыҙҙы аңлата.

**"Аba" - айыу. Был һүҙ ҡыпсаҡтар һөйләшенә хас".**

Был боронғо төрки һүҙе башҡорт телендә һаҡланып ҡалмаған. Әммә телебеҙҙә үтә ныҡ ғәжәпләнеүҙе белдергән "абба-а-а" ымлығы менән бер рәттән, ниҙәндер ныҡ ҡурҡыу тойғоһон кисереү менән бәйле "абау" һүҙе бар. Айыу, боронғоса "аба" - ҡурҡыныс хайуан, шуға күрә әлеге "абба" һәм "абау" һүҙҙәренең килеп сығышы боронғо төркиҙәрҙең "аба - айыуы" менән бәйле булыуы бар.

**"Аba" - атай. Тибет һөйләшенән. Был һүҙ уларҙың һөйләшендә һаҡланып ҡалған ғәрәп һүҙе. Улар (тибетлылар) төрки илдәренә ҡасып килеп, вариҫтарын ҡалдырған Сабит исемле Йемен кешеһенән таралған".**

Ысынлап та, боронғо төркиҙәрҙә атай төшөнсәһе барса төрки ҡәүемдәре өсөн уртаҡ булған "ата" һүҙе аша бирелә. Ғәрәп халҡы үҙҙәрен "араба" тип атай, ә был һүҙ килеп сығышы буйынса "ар атаһы" тигән мәғәнәгә эйә. Әйткәндәй, телебеҙҙә киң ҡулланылған "ата-баба" ҡушма һүҙе бар; беҙ, ата-бабаларҙың хәҙергә заманда йәшәгән вариҫ-тоҡомдары булараҡ, ошо һүҙ аша уларҙың боронғо ир туғандарыбыҙ икәнлеген аңлатабыҙ. Шуныһы ҡыҙыҡ, этмологик мәғәнәһе буйынса ошо ҡушма һүҙ "ата-ата" тигәнгә тиң.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Висла йылғаһында оборонала

7-се гв. атлы корпусы командованиеһының 1944 йылдың 28 майындағы, 8 июнендәге, 30 июлендәге һәм 12 августағы бойороҡтарына ярашлы бүләкләнеүселәр: I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән - 60-сы гв. атлы полкының эскадрон командирҙары, гв. өлкән лейтенанттары Игорь Гаевский һәм Петр Колесников; II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән - 60-сы гв. атлы полкының элемтә взводы командиры, гв. лейтенанты Степан Коноплев, 76 миллиметрлы батареяның ут взводы командиры, гв. кесе лейтенанты Иван Дзюба, медицина хеҙмәте фельдшеры, гв. лейтенанты Насибулла Абдуллин.

16-сы гв. атлы дивизияһы командирының 1944 йылдың 2 августағы бойорого менән Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнеүселәр: 60-сы гв. атлы полкының ҡылыссылар эскадронының взвод командиры, гв. лейтенанты Самвел Оганесян һәм ПТР тоҫҡауысыһы ярҙамсыһы, гв. рядовойы Аҡмамед Атаев.

1944 йылдың сентябрендә 7-се гв. атлы корпусы буйынса бойороҡтарға ярашлы, сапер взводының гв. рядовойы Муллағәли Ғәлимйәнов II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә. Ул Учалы районының Ишкенә ауылында тыуып үҫкән; 62-се гв. атлы полкының разведка взводының отделение командиры, гв. старшинаһы Мөбәрәк Шакиров (үлгәндән һуң) I дәрәжә Ватан һуғышы орденына лайыҡ була. Ул Висла йылғаһының һул ярында разведка барышында батырҙарса алышып, һәлә булa, Тәтешле районының Ҡашҡаҡ ауылында тыуып үҫкән; 62-се гв. атлы полкының 76 миллиметрлы батареяһының ут взводы командиры ярҙамсыһы, гв. өлкән лейтенанты Хәким Мортазиндың ҡаһарманлығы (элегерәк Ҡыҙыл Байраҡ һәм III дәрәжә Дан ордендары менән бүләкләнгән), корпус буйынса бойороҡҡа ярашлы, I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән билдәләнә (үлгәндән һуң). Ул Ейәнсура районының Яңы Себенле ауылы кешеһе була.

58-се гвардия атлы полкы командирының 1944 йылдың 10 августағы бойороғона ярашлы, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнеүселәр: 2-се эскадрон автоматсыһы, гв. рядовойы Әбделмәнов Ҡорбан (Баймаҡ районының Семеновский руднигынан); 1-се эскадрондың гв. рядовойы Әхмәтшин Моратша (Бүздәк районының Түреш ауыл советынан); 2-се эскадрондың гв. рядовойы, станоклы пулеметтың икенсе номеры Ғәбизуллин Иблеәмин (Белорет ҡалаһынан); комендант отделениеһының гв. сержанты Ситдиков Хәмизулла (Бүздәк районы, Ҡаҙаҡлар-Ҡыбау ауылынан). Шулай уҡ 60-сы гв. атлы полкы командирының 1944 йылдың 10 октябрендәге бойорого менән 4-се эскадрондың химинструкторы, гв. старшинаһы Ханнанов Ғилемхан да (Өфө ҡалаһынан) "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә.

58-се гв. атлы полкынан шул уҡ "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булыусылар: 76-миллиметрлы батареяның орудие номеры Шакиров Шәриф - 1944 йылдың 12 апрелендәге алышта дошмандың 2 станоклы, 2 ҡул пулеметын сафтан сығарғаны өсөн. Ул Дүртөйлө районының Иҫке Йәнтүҙ ауылынан; 4-се эскадрондың ПТР тоҫҡауысыһы, гв. рядовойы Аҙнағолов Мөхәмәт (Асҡын районы Ҡашҡа ауылынан); элемтәсе, телефонистар отделениеһы командиры Ғайсин Мирсәләй, Өфө ҡалаһынан; 2-се ҡылыссылар эскадронының отделение командиры, гв. кесе сержанты Сәлимов Йәнмырҙа, Ғафури районының Сәйетбаба ауылынан.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Әгәр аҡылың ныҡ үҫешһә, һин күп нәмәгә өлгәшә алаһың, бик күптәргә өлгө итеп ҡуйырлыҡ шәхес буласаҡһың, шул ваҡытта етеш тормош ҡора алырлыҡ аҡсаң да буласаҡ.***

# ТУҒАН
## шәхесемдең

**Муса Ғайса улы МӘЗИТОВ - эшҡыуарлыҡ өлкәһендә уңыш ҡаҙанған йәш быуын башҡорттарының береһе. Ул - "МС групп" исемле төҙөлөш компанияһының генераль директоры. Бала сағынан уҡ эшкә егелеп, тырышып-тырмашып, тәбиғәттән бирелгән һәләттәрен, үҙен-үҙе үҫтерә алған шәхес. Миһырбанлы һәм рәхмәтле заттарҙан: үҙе белем алған М.Ғ. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейының матди базаһын үҫтереү маҡсатында 1 миллион һумлыҡ хәйриә ярҙамын күрһәткән йәш кеше. Бөгөн һүҙҙе уға бирәбеҙ.**

### Ҡалала тыуып үҫкәнмен

Мин Өфөлә тыуып үҫтем, хәҙер мине икенсе быуын ҡала башҡорто, тип атап була. Иң тәүҙә ҡартатайым (атайымдың атаһы) ауылдағы йорт-ҡаралтыһын, мал-тыуарын һатып, Өфөгә килеп урынлаша, әлеге "Нур" театрынан йыраҡ булмаған урында өс ҡатлы бик ҙур шәхси йорт һатып ала. Ҡартатайымдың өс балаһы була - атайым Ғайса, апайымдар Сәүиә һәм Рәмзиә. Барса туғандарыбыҙ ошо өйҙә йәшәне. Мин үҙем дә ҡартатайымдың өйөндә донъяға килгәнмен. Атайымды, авиация университетын тамамлағас, 40-сы заводҡа инженер вазифаһына эшкә ебәрәләр. Ә тыуымышы менән Дәүләкән районының Япар-Йәнбәк ауылынан булған әсәйем Гөлбикә Өфө ҡалаһының ишетеү-һөйләүҙән мәхрүм булған балалар өсөн асылған 6-сы балалар йортонда 30 йыл тәрбиәсе булып эшләне.

Балалар баҡсаһына йөрөмәнем тиерлек, ҡустым Йәлил менән өйҙә үҫтек. Ҡалала үҫкән балалар, башлыса, башҡортса белмәйҙәр, тик русса һөйләшәләр. Ғаиләбеҙҙә башҡорт рухы көслө булды, мин бала сағымдан уҡ үҙебеҙҙең ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуынан, ағасыбыҙҙың - ҡарағас, оранбыҙҙың "Туксоба!" икәнлеген белә инем, ололар беҙҙең менән тик башҡортса ғына һөйләште. Шуға ла мин мәктәпкә уҡырға ингәндә бөтөнләй русса һөйләшә алмай инем. Мәктәпкә 6 йәшемдән үк йөрөй башланым. Ҡартатайымдың өйө урынлашҡан ерҙә төҙөлөш башланғас, беҙгә Һупайлы биҫтәһенән фатир бирҙеләр. 1994 йылда ошо биҫтәлә өр-яңы башҡорт мәктәбе асылыуы тураһында белеп ҡалған атайым менән әсәйем мине шул мәктәпкә бирергә булды. Әсәйем мине мәктәп психологы бүлмәһенә алып инде, ул төрлө һорауҙар бирә лә, ҡалын ғына дәфтәренә ниҙер яҙып ҡуя. "Уҡый беләһеңме?" - тип һораны шул ағай. "Юҡ", - тимен. Шунан ул "Әлифба" китабын асты, хәрефтәрҙе атап әйтеп, уларҙы нисек ҡушып уҡып була икәнен аңлатты. Ары-бире иткәнсе, мин ижекләп уҡый алыу рәтенә төшөнөп тә алдым. Психолог ағай әсәйемә әйтә: "Малайығыҙ һәләтле, әммә йышыраҡ шөғөлләнеү кәрәк, уҡырға алабыҙ". Шулай итеп, беренсе кластан башлап унынсыны бөткәнсе М.Ғ. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейында белем алырға насип булды.

### Мәктәбебеҙҙән уңғанмындыр, тимен...

Бала саҡта һәр кем ата-әсәләр, уҡытыусылар нимә талап итә, ни ҡуша, шулай эшләргә тырыша, әммә уҡыу барышында өлгәшкән һөҙөмтәләрең хаҡында әллә ни уйланып тормайһың. Мәктәп йылдары хаҡында, уҡытыусыларыбыҙҙың беҙҙең шәхестәребеҙҙе нисек итеп тәрбиәләгәндәре тураһында күпкә һуңыраҡ уйлана башлайһың. Бына шәхсән үҙем университет тамамланым, хәҙерге көндә ҙур төҙөлөш компанияһы менән идара итәм, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә тренингтар ойоштороп, коуч булып китергә лә ниәтем бар. Ошолар хаҡында уйлана башлаһаң, үҙебеҙ уҡыған мәктәптең беҙҙең киләсәгебеҙ өсөн шундайын да ныҡлы нигеҙ булғанын тәрәнерәк аңлай башлайһың.



Беҙ уҡыған 90-сы йылдарҙың икенсе яртыһында - XXI быуат башында 136-сы Башҡорт лицейында уҡыусылар бер нисә йүнәлешкә ярашлы программалар буйынса уҡытылды: математика, гуманитар фәндәр, художество, музыка кластары булды. Аҙаҡтан инглиз телен тәрәнәйтеп уҡытыу буйынса ла махсус кластар булдырылды. Башланғыс кластарҙа барыһы ла бер төрлө уҡый, ә 3-сө кластан һуң уҡыусыларҙы, һәләттәренә ҡарап, тикшереп, үҙенә күрә имтихандар ойоштороп, төрлө йүнәлешле кластарға бүлә торғайнылар. Минең математика класына һайлап алыу буйынса яҙма контроль эшем "5"-кә баһаланды. Бер үк ваҡытта художество класына ла имтиханға яҙылғайным. Шундай ҡыҙыҡлы хәл килеп сыҡты: математика уҡытыусыһы үҙ яғына тарта, рәсем уҡытыусыһы художество йүнәлешен һайларға өндәй. Йәнә рәсем уҡытыусыһынын шулай тип әйткәне иҫемдә ҡалған: "Муса, математика һәйбәт предмет та ул, әммә һүрәт төшөрөү сәнғәте оҫталығына эйә булһаң, бер ваҡытта ла икмәкһеҙ ҡалмаҫһың". Беҙ, малайҙар, төрлө спорт секцияларына йөрөргә ярата инек. Шунда Арыҫлан Сурин, Данияр Юлдашев менән танышып, дуҫлашып киткәйнек. Улар ҙа әлеге "В" класын, художество йүнәлешен һайлағайны. Шулай итеп, мин дә әлеге дуҫтарым менән бер класта уҡырға булдым. Математика дәрестәрен барыбер программаға ярашлы уҡыталар бит инде, мин был фән буйынса ла алда барам, олимпиадаларға йөрөтәләр, призлы урындар ҙа алам, грамоталар ҙа күп булды. Ғөмүмән, урта һәм юғары кластарҙа иң әүҙем уҡыусылар иҫәбендә йөрөнөм.

### Атайһыҙ ҡалғас...

Мин өсөнсө класта уҡыған йылда ғаиләбеҙ көтөлмәгән бәләгә тарыны - атайымды үлтерҙеләр. Йәшәр өсөн аҡсабыҙ бик аҙ, әсәйем балалар йортонда бер юлы ике сменала эшләй башланы. Ашау яғы ла наҡыҫ булып китте. Йәлил энемде баҡсаға йөрөтөрлөк мөмкинлек юҡ. Аптырағас, уҡытыусыбыҙ менән һөйләшеп, энемде үҙем менән мәктәпкә йөрөтә башланым. Ул иң арттағы партала шым ғына ултыра. Тәнәфестә ашханаға төшәбеҙ, минең өләшемдә икеүләп бүлешеп ашайбыҙ. Шулай уҡыу йылы тамамланды. Көҙгә Йәлил энем дә мәктәпкә 1-се класҡа килде. Минең менән бергә уҡырға килә, минең менән бергә өйгә ҡайта был. Ә әсәйем иртәнән кискә тиклем эшендә була.

Атайһыҙ ҡалғас, әле үҙемдең дә йәш үҫмер генә булыуыма ҡарамаҫтан, ныҡ уйлана башланым. "Был донъяла беҙгә башҡа бер кем дә ярҙам итмәҫ, тик үҙеңә генә ышанып йәшәргә тура киләсәк" - бына ошо фекер миңә маяҡ булды. Әсәйемә ике баланы ҡарауы бик тә ауырға төшкәнен аңланым. Шул саҡта әсәйем миңә "Донъяның 100 бөйөк аҡыл эйәһе" тип аталған бер китап алып ҡайтҡайны. Мин ошо китапта тормош юлдары һүрәтләнгән бөйөк кешеләрҙең биографияларын ҡыҙыҡһынып уҡыным. Һәм бына ниндәй һығымтаға килдем: әгәр аҡылың ныҡ үҫешһә, һин күп нәмәгә өлгәшә алаһың, бик күптәргә өлгө итеп ҡуйырлыҡ шәхес буласаҡһың, шул ваҡытта етеш тормош ҡора алырлыҡ аҡсаң да буласаҡ. 5-се кластан ныҡ тырышып уҡый башланым. Төштән һуң рәсем, һынлы сәнғәттән башҡа, математика, геометрия буйынса өҫтәмә белем алыу өсөн махсус дәрестәргә йөрөнөм. Мине төрлө математик мәсьәләләрҙе ҡыҫҡараҡ юл менән сисә алыу ҡыҙыҡһындырҙы. Китапханабыҙҙан алған "Телдән тиҙ ҡабатлау" тигән өҫтәмә уҡыу әсбабы менән таныштым. Аҡылды логик фекерләү аша формалаштырырға өйрәндем. Шул уҡ ваҡытта тик китаптарға ғына төбәлеп ултырманым, спорт залын ситләтеп үтмәнем: "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигәндә лә онотмаҫҡа кәрәк булды. Иң мөһим маҡсатым - бар предметтарҙан да тик "5"-кә генә өлгәшеү. 5-се кластың тәүге ярты йыллығында "ударник" кимәленә күтәрелдем, ике генә предметтан "4"-ле билдәһе сыҡты.

### Ҡул араһына индем...

Мин инде үҙемде ҙурҙар һымаҡ тоя инем: ғаиләбеҙ аҡсаға мохтаж, ҡайҙа булһа ла эшләп, аҡса таба башларға ваҡыт. Әсәйемә ауырға тура килгәс, уны йәлләй инем, 5-се кластан бирле аҡса һорап йөҙәткәнем булманы. Киреһенсә, эштән ҡайтыуына ашарға бешереп ҡаршы алам. Йәй көнө 119-сы магазинға сүп-сар сығарырға, тирә-яғын һеперергә, көсөм етерлек тауар ташышырға ялландым. Әсәйем отпускыға сыҡһа, Дәүләкән яҡтарына, Өршәк йылғаһы буйындағы ауылыбыҙға ҡайтабыҙ. Әйткәндәй, ошо ауылда мине 5 йәшемдән үк атта һыбай йөрөргә өйрәттеләр: һин башҡорт малайы бит, аттан ҡурҡма, тинеләр. Атайым булмағас, күп нәмәгә әсәйемдең бер туғаны Хаит ағай өйрәтте. Үҙе ҙур кәүҙәле, буйы 2 метр, ауырлығы 100 килограмдан артығыраҡ. Армияла хеҙмәт иткәндә уға бер юлы ике порция аш биргәндәр. Төрлө инструменттар менән нисек эшләргә икәнен ул аңлатты, машинала йөрөргә өйрәтте, күп эштәрҙе бергәләп башҡарҙыҡ. Ауылда йылҡы һәм һыйыр көтөүҙәрен һыбай менеп көттөк. Шулай бер йылда ауылға ҡайтып йөрөмәҫкә булдым, аҡса кәрәк, кейемем дә иҫкергән. Урам һепереүсе булып урынлаштым, эш хаҡым - айына 1 мең һум, әсәйемдеке - 1200 һум. Унан урамдарҙан шешә йыйып алып йыуаһың да магазинға тапшыраһың - аҙ булһа ла килемемә өҫтәмә. Дуҫтарым Арыҫлан менән Данияр ҙа миңә ҡушылып китте - торғаны бер эшҡыуар малайҙарбыҙ инде. Кеҫә аҡсаһы малайҙарҙың да кеҫәһен тишмәгәнен шулай төшөндөк.

***Мин бөгөн командам менән матди объекттар төҙөйөм. Уйлап ҡараһаң, мәктәптән дә бөйөгөрәк башҡа бер төҙөүсе юҡтыр ул. Туған мәктәбем минең шәхесемдең иҫ киткес ныҡлы нигеҙен төҙөп бирҙе. Тимәк, ошо иҫтәлекле, һөйкөмлө уҡыу йортона рәхмәтле булыу - сауаплы ғәмәл. Ни эшләп, мөмкинлектәрең була тороп, уның етәкселегенә, педагогик коллективына ошондай ҡатмарлы шарттарҙа ярҙам ҡулын һуҙмаҫҡа ти? Компаниябыҙҙың М.Ғ. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейына матди ярҙамын бына ошо мәңгелек ҡиммәттәрҙең бер матур сағылышы тип ҡабул итергә кәрәктер.***

### Спорт менән дә шөғөлләндек

Бала саҡта, мәктәп йылдарында төрлө хәлдәр була: беҙҙе, Башҡорт лицейы малайҙарын, башҡа мәктәп балалары "татар-монголдар", тип үсекләйҙәр. Ә беҙ бирешмәй инек, рух уяна башлаған мәл. "Тау батшаһы" уйынын уйнағанда, "Беҙ - башҡорттар", тип тороп, күрше мәктәп малайҙары менән көрмәкләшеп, һуғышып киткән мәлдәр ҙә булды. Шул мәлдә тыуғандыр инде беҙҙә, малайҙарҙа, барыһынан да көслөрәк, таһыллыраҡ булыу теләге. Тхэквондо секцияһына, унан башҡа бокска, еңел атлетикаға ла йөрөйбөҙ. Ҡыштарын саңғы ярыштарында ҡатнашабыҙ. Беҙҙең класта Радик Хәкимов уҡыны. Ул спорт мәктәбенә йөрөй торғайны, аҙаҡ үҙенең йәштәштәре араһында биатлон буйынса Рәсәй чемпионы булды. Уның

*✓ Конкуренттар ҙа етерлек, әммә беҙ сифатлы итеп һәм мөмкин булғанса аҙыраҡ ваҡыт эсендә заказдарҙы үтәй алыу менән отабыҙ. Өфөләге иң ҙур күләмле яңы келәттәрҙе беҙ сафҡа индерҙек.*

# МӘКТӘБЕМ...

## ныҡлы нигеҙен төҙөүсе ул

менән дуҫлашып киттек, ул мине лә спорт мәктәбенә саҡырҙы. "Аҡбуҙат" ипподромына пятиборье буйынса тренировкаларға йөрөй башланыҡ.

Спорт менән күп шөғөлләнеүемдең тағы бер сәбәбе булды - минең йөштәштәрем яҡшы, модалы кейемдәр кейеп йөрөй, ә ҡайһы бер уҫалыраҡ малайҙар минең кейемемдән көләләр. Уларға яуап ҡайтара алыр өсөн көс кәрәк. Йүнле ботинкаларым юҡ, сандалиҙарҙа йөрөйөм. Етмәһә, байрам концерттары булһа, мәктәп сәхнәһендә алып барыусы ролен үтәйем. Көс һәм аҡыл менән алдырырға тура килде.

### Уҡытыусыларыбыҙ

Уҡытыусыларыбыҙҙан уңдыҡ, тип әйтә алам. Үҙҙәренең балалары кеүек итеп күреп, гел йылмайып, яратып ҡаранылар. Нимә менән ҡыҙыҡһынаһың, һәр бер осраҡта ла дөрөҫ йүнәлеш бирҙеләр. "Тормош һабаҡтары" дәресендә Минзәлә Ишбулды ҡыҙы Юлмөхәмәтова беҙгә рухи һабаҡтар бирһә, башҡорт теле уҡытыусыһы Нәғимә Хәсән ҡыҙы Вәлиева төрлө ижади сараларға йәлеп итте. Ул беҙҙе, өс айырылмаҫ дуҫты - мине, Арыҫлан Суринды һәм Данияр Юлдашевты "Өс таған" тип атай торғайны. Бергәләп ырыуҙар байрамына, сәсәндәр бәйгеһенә әҙерләнәбеҙ. Мәктәп тураһында ҡобайыр яҙып, беренсе урын алғанымды хәтерләйем. Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрен яраттыҡ. Яңыбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романын уҡып, ата-бабаларыбыҙҙың яугирлығына, ҡаһарманлығына һоҡландыҡ. Ундағы ошо юлдар әле лә хәтерҙә: "...урман араһынан аттарында сабышып килеп сыҡҡан башҡорттарҙың еләндәре елдә ҡабарып, бөркөт ҡанатылай талпынып торған, дошмандарҙың ҡоттары алынған".

Черчение дәресенән директорыбыҙ Шәмсулла Хәбибулла улы уҡытты. Ул дәрес алып барғанда класта себен осҡаны ла ишетелерлек булғандыр. Иң ғәжәпләндергәне шул булды: уҡытыусыбыҙ таҡтала чертежды аҡбур менән линейкаһыҙ-ниһеҙ туп-тура һыҙып күрһәтә. Шулай, ул бер деталдең киҫелешен эшләргә ҡушты. Беҙ чертеж эшләйбеҙ, ул ҡарап йөрөй. "Иң яҡшы эш - Мусаныҡы. Бына шул ерен штрихлап ҡуй әле", - тип, үҙенең ҡәләмен минә бирҙе. Һуңынан мине черчение буйынса олимпиадаларға ла йөрөттө.

Живопись буйынса Мазунин Владимир Николаевичҡа йөрөй башланыҡ, ул әлегерәк педагогия институтында, художестволы графика факультетында ла уҡытҡан. Мин һынап йөрөйөм: бик һәйбәт өйрәтә, ҡайһы саҡта ҡыҙыҡ итеп әйтеп тә ҡуя: "Ну, касатики, пошевелите мозгами!" Бик арып киткәһ, ниндәйҙер ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында һөйләп, көлдөрөп тә ала. Ул юғары уҡыу йорттарының архитектура, художестволы графика факультеттарына инергә теләүселәргә рәсем, һынлы сәнғәт буйынса нисек әҙерләнергә кәрәклеген бик яҡшы аңлата белде. Төрлө картиналарҙы ҡарайбыҙ һәм уларҙы анализларға өйрәнәбеҙ. Ғөмүмән, уҡытыусыларыбыҙҙы, үҙебеҙҙең ятаҡлы мәктәбебеҙҙе киләсәк тормошобоҙҙоң, һөнәребеҙҙең төп базаһы булды, тип һис бер икеләнмәйенсә әйтә алам.

### Ҡайҙа уҡырға барырға?

Сығарылыш класында ҡайһы вузға барыу, ниндәй факультетты һайлау тураһында уйлана башланыҡ. Мәктәптә минең барса предметтарҙан да белемем һәйбәт баһаланды, БДИ буйынса һөҙөмтәләрем яҡшы булырына ышандым. Уҡытыусыбыҙ Владимир Николаевич минә рәсем һәм һынлы сәнғәт буйынса республика конкурсында беҙҙең мәктәп исеменән ҡатнашырға тәҡдим итте. Кем беренсе урынды ала, шул педуниверситеттың художестволы графика факультетына имтиханһыҙ ғына уҡырға инә ала. Ул шул факультетҡа инергә өндәй, һәр яҡтан уңған директорыбыҙҙың да ошонда уҡып сыҡҡаны хаҡында иҫемә төшөрә. "Рәссам булһаң, армияла минең һымаҡ штабта ғына ултыраҫаҡһың", - тип өҫтәп тә ҡуя. Конкурста ҡатнаштым, икенсе урын алдым. Бында уҡырға инеү мөмкинлеге булһа ла, минең икенсе пландарым да бар ине, әлбиттә. Кешеләрҙең йөҙ һыҙаттарын ентекләп өйрәнгәс, баш һүрәттәрен матур итеп төшөрә башлағас, пластик хирургия өлкәһен һайлармын, тип тә уйлап йөрөнөм. Йәнә архитектура өлкәһен дә оҡшаттым. Өфө дәүләт нефть техник университетының архитектура факультетына барса махсус имтихандарҙы "5"-легә бирһәм дә, мине коммерция нигеҙендә генә уҡырға алыуҙары билдәле булды. Тап шул ваҡытта Санкт-Петербургтың архитектура университетына уҡырға саҡырған хат килеп төштө. Әсәйем ризалашмағас, үҙебеҙҙең Өфөлә ҡалдым, М.Аҡмулла исемендәге педуниверситеттың художестволы графика факультетында уҡыуымды дауам итергә булдым.

### Университетта...

Факультет бик һәйбәт белем бирә, ныҡлы дисциплина урынлаштырылған, һөнәри белем алыр өсөн барса шарттар ҙа бар. Бында тәүләп дизайн бүлеге асылды, компьютер графикаһына өйрәтәләр, мин шул бүлекте һайланым. Был бүлектә, рәсем һәм һынлы сәнғәттән башҡа, төрлө махсус предметтар күп уҡытылды: скульптура, мәғлүмәт-иҫәпләү техникаһы, компьютер графикаһы, ландшафт дизайны, архитектура, композиция, металды, быяланы художестволы эшкәртеү һ.б. Деканыбыҙ Тәлғәт Хәсән улы Мәсәлимов беҙҙе тирмә яһарға ла өйрәтте, уның өсөн кейеҙҙе үҙебеҙ баҫтыҡ. Ғөмүмән, бында сәнғәт өлкәһе өсөн ғәмәли яҡтан бик мөһим нәмәләргә өйрәндек.

Үгәй атайым "Баштрансгаз" предприятиеһына эшкә урынлашырға ярҙам итте. Тимашево ауылынан Миловкаға газ торбалары үткәрәләр. Мастер чертеждарҙы уҡый белмәгәс, аңлылыш ҡаҙытып, электр кабеле линияһын өҙҙөргәндәр. Һөҙөмтәлә бер завод электрһыҙ ҡалып, предприятиеға миллион һумлап штраф түләргә тура килгән. Кистәрен барып, чертеждарҙы ентекләп ҡарап сығам да, ҡайҙа ниндәй кабелдәр, һыу торбалары үтә, ҡайҙа ҡаҙырға ярамай икәнен мастерҙарға аңлатып китәм. Башҡаса авария-фәлән булманы. Йәйен көн буйына эшләйем, арыу ғына эш хаҡы түләнеләр, премия ла бирәләр. Шунан көҙ алды яҡтырып киткәндәй булды: яңы кейем алдым, Ленинградта сығарылған бик ҡиммәтле акварель буяуҙары, ҡыл ҡәләмдәр һатып алдым. Аҡсамды йыйып барҙым да, бик ҡеүәтле компьютер һатып алдым. Компьютер графикаһын ғәмәли рәүештә өйрәнә башланым. Уҡып йөрөгән көйө транспорттағы реклама агентлығына урынлаштым, унда банерҙар эшләйбеҙ, компьютер графикаһын белгән кеше булғас, бик һәйбәт эш хаҡы түләнеләр - көнөнә 8 мең сыға. Эш өсөн шәхси транспорт кәрәк булғас, "Лада-Калина" автомобиле һатып алдым.

### Сәйәси хыялдарым да булды

Университетты тамамлау менән аспирантураға индем. Әлфис Суфиян улы Ғаязов ғилми етәксем булды. Ул йәш кенә көйө ғилми дәрәжәгә ынтылыуымды бик үк аңлап та етмәне, ахыры. Ғалим кешегә сәйәсәткә килеү еңелерәк булыр ине. Мортаза Рәхимов отставкаға сыҡҡас, барыһы ла тамырынан үҙгәрҙе, минең сәйәсәт юҫығындағы хыялдарым да үҙенән-үҙе юҡҡа сыҡты.

Төрлө ойошмаларға проекттар эшләп, тейешле объекттар ҡороп биреүсе "МДМ" төҙөлөш компанияһына проектлаусы белгес булып эшкә урынлаштым. Бер аҙ эшләгәс, компания директоры минә клиенттар менән дә эшләргә тәҡдим итте, 2 тапҡыр эш хаҡын күтәрҙе. Заказ биреүселәр менән объект буйынса ентекле һөйләшеүҙәр алып барам, урында шундуҡ кәрәкле үлсәүҙәрҙе алабыҙ, тиҙ арала проект эшләп, уны хужаларға тәҡдим итәбеҙ. Быға саҡлы ғәмәли эштәрҙә ҙур тәжрибә туплап өлгөргәйнем, заманса белемем, күнекмәләрем етерлек булғас, минә был эштәрҙе ойоштороу ауыр булманы. Иң мөһиме - ваҡыт, ә компьютер технологияларын ҡуллана белһәң икән, ныҡ отаһың. Барса чертеж эштәрен компьютер графикаһын ҡулланып эшләп була, калькуляция, материалдар күләме, смета һәм башҡалар махсус программалар ярҙамында тиҙ эшләнә. Компанияның килеме бермә-бер артты, ике йылдан мине башҡарыусы директор вазифаһына тәғәйенләп ҡуйҙылар. Клиенттар күбәйгәндән-күбәйә барҙы, ҙур заказдар алабыҙ. Тәүге мәлдәрҙә компания хужаһы, килемде бер нисә тапҡырға күтәрә алһаң, уның яртыһы һинеке, тип вәғәҙә иткәйне. Миллионлаған һум килем алабыҙ, ә хужаның вәғәҙәһе онотолдо. Ни эшләйһең, уларса - йөҙ икегә бүленә, миллион - юҡ.

Компаниянан китергә булдым, арыуым да саманан ашҡайны.

Бер йыл бер ҡайҙа ла эшләмәй генә ял итергә булдым. Башҡортостан буйлап машинам менән сәйәхәткә сыҡтым - бер ҡасан да бармаған, күрмәгән урындар күп бит инде. Ике айҙан әлеге директор янынан эшкә саҡыра, инәлә - эше бармай икән. Аҡса әйләнеше кимәле 20 миллиондан 5 миллионға тиклем төшкән (аҙаҡтан был компания банкрот булды). Ризалашманым...

### Хәҙерге шөғөлөм...

Бер саҡ минә элек үҙем барып, килешеүҙәр төҙөп йөрөгән Екатеринбург заводының генераль директоры шылтыратты, мин эшләп киткән компаниянан ни өсөн яңы заказдар килмәүенең сәбәптәрен һораша. Беҙҙең компания Екатеринбург һәм Мәскәү заводтарынан кәрәкле металл конструкциялар ала ине. Ә мин уларға хат аша ошо конструкцияларҙың етешһеҙ яҡтарын, бигүк уңайлы булмаған варианттарын күрһәтеп, үҙемдең тәҡдимдәремде ебәреп торҙом. Хәтеремдә, ике йыл эсендә барлығы 33 рационализация тәҡдиме ебәргәйнем.

Компаниянан китеүемде белгәс, директор мине осрашырға саҡырҙы. Осраштыҡ. Завод директоры цехтар буйлап йөрөттө, минең шәхси тәҡдимдәрем буйынса ниндәй үҙгәрештәр индерелгәнен күрһәтте. Хатта тап мин яҙғандарҙы ғәмәлләштерер өсөн Төркиәнән станоктар ҙа һатып алғандар икәнен күрҙем. Шунан директор минә яңы компания асырға тәҡдим итте, ярҙам итергә, төрлө ташламалар эшләргә вәғәҙәләне. Тәүге аҙым: мин ошо заводтың дистрибьютеры булырға ризалыҡ бирәм, унан Өфөлә заводтың филиалын асабыҙ. Шулай итеп, мин тәүҙә әлеге заводтың сауҙа вәкиле вазифаһын башҡарҙым. Завод етештергән металл конструкцияларҙы рекламалап, бөтөн Башҡортостанды йөрөп сыҡтым.

Һуңынан үҙемдең компаниямды ла асыу мөмкинлеге тыуҙы, уны "МС групп" тип атаным, беҙҙең төп бренд - "Келәттәр оҫтаһы", русса - "Мастер складов" була. Хужалыҡ келәтһеҙ булмай, ә сауҙа предприятиелары өсөн ул иң кәрәкле һәм мөһим объект. Һәр заказ биреүсегә майҙан үлсәмдәрен алыуҙан башлап, иң уңайлы проект нигеҙендә тиҙ арала ҙур күләмле келәттәр төҙөп бирәбеҙ. Уларҙы заманса стеллаждар, төрлө йыһаздар, махсус ҡулайламалар менән тәьмин итәбеҙ. Эш тәрҙәребеҙ күп төрлө - теләһә ниндәй ҡатмарлыҡтағы тиҙ төҙөлә торған биналарҙы һәм келәттәрҙе проектлау һәм монтажлау, комплекслы рәүештә йыһаздар, техника һәм ярҙамсы элементтар менән тәьмин итеү, ошондай объекттарҙы бер урындан икенсе урынға күсереү, электр менән иретеп йәбештереү, электр яҡтыртыу системаһын монтажлау, келәт техникаһын ремонтлау, офис йыһаздары, металдан эшләнгән мебель һәм сейфтар, медицина мебеле һ.б. кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү.

Заказдар күп икән - эш тә күп. Йәлил энем ярҙамға килде, эшсән һәм уңған белгестәрҙән, һөнәрмәндәрҙән торған командабыҙ тупланды. Конкуренттар ҙа етерлек, әммә беҙ сифатлы итеп һәм мөмкин булғанса аҙыраҡ ваҡыт эсендә заказдарҙы үтәй алыу менән отабыҙ. Өфөләге иң ҙур күләмле яңы келәттәрҙе беҙ сафҡа индерҙек. Тиҙ ҡорола торған заманса объекттар киләсәктә тағы ла күберәк талап ителәсәк. Артабан инвестиция эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә башлау хаҡында ла уйҙар бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәҙерге заманда тик эш, компания, килем, яңы пландар тип кенә йәшәп булмай. Күрәһең, үҙ ғүмереңдә, тормошоңда шундай кимәлгә күтәрелһәң - башҡа бер ҡиммәттәр тураһында йышыраҡ уйлана башлайһың. Бына мин үҙемдең бала сағым, мәктәп йылдары, вузда уҡыуым хаҡында бәйән иттем. Шул саҡта зиһенемә, аңыма, күңелемә һеңдерелгән бар ҡиммәттәр мине шәхес итте, барыһы ла тик файҙаға ғына булды. Мин бөгөн командам менән матди объекттар төҙөйөм. Уйлап ҡараһаң, мәктәптән дә бөйөгөрәк башҡа бер төҙөүсе юҡтыр ул. Туған мәктәбем минең шәхесемдең иң киткес ныҡлы нигеҙен төҙөп биргән. Тимәк, ошо иҫтәлекле, һөйкөмлө уҡыу йортона рәхмәтле булыу - сауаплы ғәмәл. Ни эшләп, мөмкинлектәрең була тороп, уның етәкселегенә, педагогик коллективына ошондай ҡатмарлы шарттарҙа ярҙам ҡулын һуҙмаҫҡа ти? Компаниябыҙҙың М.Ғ. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейына матди ярҙамын бына ошо мәңгелек ҡиммәттәрҙең бер матур сағылышы тип ҡабул итергә кәрәктер. Халҡыбыҙҙың боронғо бер мәҡәлендә әйтелгәнсә, изгелек ҡылайыҡ та, һыуға һалайыҡ - балыҡ белмәһә лә халыҡ белер.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

✓ ***Төньяҡ-көнсығыш башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының костюм комплексында ҡушъяулыҡ, ябай яулыҡ кеүек үк, бәләкәй генә ҡалфаҡ менән ҡушарланған; көнсығыш Урал аръяғында иһә - ҙур булмаған ҡыҙыл яулыҡ ябынылған.***



*БЕЛМӘҺЕҢ - БЕЛ*



# ҠАТЫН-ҠЫҘ КЕЙЕМЕНДӘ - ЯУЛЫҠ

**XIX быуат һуңында - XX быуат башында ҙур булмаған дүрткел яулыҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының киң таралған баш кейеме булып торған. Ғәҙәттә, уны ҙур килеш, ике осон эйәк аҫтында тоташтырып бәйләгәндәр. Матур яулыҡтарҙы байрамдарҙа ғына ябыныр булғандар.**

Яулыҡтар элек йыш ҡына сәстәрҙе ҡаплап, ҡашмау йәки ҡама бүрек өҫтөнән ябынылған. Бары тик бәләкәй ҡалфаҡтарҙы яулыҡ аҫтынан, мәрйен йәки ынйы менән биҙәлгән ерен күрһәтеп кейгәндәр.

Яулыҡтар шәл менән бергә лә ябынылған. Диагональ буйынса ҡапланған ебәк йәки кешмир шәлде яулыҡ йәки бүрек өҫтөнә һалып ҡына ҡуйғандар, шуға ла уларҙың ике осо иркен булып һәленеп торған. XIX быуаттың икенсе яртыһынан шәлъяулыҡтар ҡулланылышҡа ингән. Ә Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында һәм Ырымбур далаларында һалҡынса көндәрҙә дебет шәл ябынғандар.

Башҡорт килендәренең көнсығыш Урал аръяғы һәм төньяҡ-көнсығыш кейем комплекстарына характерлы француз (флүр яулыҡ) яулығы инеүе Көнсығыш менән бәйләнеште асыҡ сағылдыра. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында, Силәбе һәм Ҡурған, Урал аръяғында билдәле "ҡушъяулыҡ" хатта XX быуаттың беренсе яртыһында ла йәш ҡатын кейеменең колорит өҫтәмәһе булған. Уны туйҙың өсөнсө көнөнә, егет йортона күсер алдынан ябынғандар һәм һуңынан ул көндәлек яулыҡҡа әүерелгән. Силәбе, Ҡурған башҡорттарының ҡушъяулығы декоратив биҙәлеше менән айырыуса айырылып торған. Ул ҡолаҡ тирәһендә мәрйендән һәм ҡәнәфер орлоҡтарынан эшләнгән ҡолаҡсуҡҡа һәм мәрйен йәки мәрйен селтәр йә тәңкәләр менән биҙәлгән һаҡалдырыҡҡа эйә булған. Ҡурған өлкәһендә һаҡалдырыҡтың уртаһынан күкрәккә үрелгән ептәр йәки сигелгән бәләкәй генә таҫма - эйәксен төшөп торған. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ҡушъяулыҡты бары тик ике рәт итеп тегелгән тәңкәләр менән биҙәлгән әүеркә таҫма - һағалдырыҡ ҡына биҙәгән.

Төньяҡ-көнсығыш башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының костюм комплексында ҡушъяулыҡ, ябай яулыҡ кеүек үк, бәләкәй генә ҡалфаҡ менән ҡушарланған; көнсығыш Урал аръяғында иһә - ҙур булмаған ҡыҙыл яулыҡ - һыңар яулыҡ, баш бәйҙәмесе менән ҡушарлап ябынылған.

Туйҙа кәләштең ҡушъяулығы өҫтөнә тура мөйөшлө туҡыма ташлағандар - ул ҡыҙҙың йөҙөн ҡаплап торған. Шул килеш ул әхирәттәре оҙатыуында туғандары менән хушлашҡан, уларға бүләктәр таратҡан. Танып һәм Кама буйындағы төньяҡ башҡорттарында был йола ул тиклем ҡәтғи булмаған һәм бер төҫлө ҡыҙыл яулыҡ - бөркәнсек кенә ҡапланылған. Башҡортостандың ҡайһы бер территорияһында ҡушъяулыҡҡа оҡшаш әйберҙәр күҙәтелмәй. Киленде кейендергәндә уға ғәҙәти шәл ябындыралар һәм биләндә ҡушаҡ менән бәйләп ҡуялар. Башына ҡаплар өсөн туҡыманан тегелгән елән йәки матур сәкмән ҡулланғандар.

Көнсығыш Урал аръяғында үткән быуатта бер ни тиклем икенсе төрләрәк костюм комплексы - таҫтар-һарауыс - һаҡланған. Ул бейек, ҡиммәтле башкейем һәм күкрәк-арҡа биҙәүесе - яға-иңһәлек менән бергә кейелгән. Ҡушъяулыҡтың киң таралыуы атап үтелгән барлыҡ башҡа баш кейемдәренең юғалыуына, юҡҡа сығыуына килтергән. Бары тик яға ғына оҙағыраҡ йәшәгән.

**Светлана ШИТОВА.**




Ошолай уйлап, ҡәтғи ҡарарға килгән Мәҙинә Нәҙирҙәргә йышланы. Башта теге, ҡаҡ һөйәккә ҡалып барған әҙәмде, атай, тип атау түгел, хатта күрә алмаған һымаҡ булһа ла, тора-бара нисектер ылығып, уға ҡарата ҡатҡан күңеле йомшара төштө. Нәҙир менән әсәһе өйҙә юҡ сағында оҙон-оҙаҡ итеп һөйләшеп ултыралар, унан ҡалһа, гәп һата-һата сәй эсәләр. Ҡайсаҡ ҡапыл уйсанланып киткән Мәҙинәнең башына: "Ошоноң ише лә һәйбәт кеше, шундай яуызлыҡ ҡыла аламы? Әллә уның һәйбәтлеге элеккесә бары тик ялтырауыҡ алдаҡсыс ҡынамы?" - тигән икеле-микеле уйҙар килеп ҡуйғылай.

Нәҙирҙең әсәһе Сәбилә апай ҙа яҡшы кеше булып сыҡты. Өҫтәүенә, һәләк һылыу ҙа, буй-һынға ла буйтым ғына. Ҡыҙыҡ, үҙенең алдаҡсы, яһил ире, ҡаршыһында ултырған сит-ят ҡыҙ, көндәшенең ҡыҙы, ошо йәшәп ятҡан торлағының ниндәй юл менән, ниндәй хаҡҡа ҡулға төшөрөлөүе тураһында ул беләме икән? Белгән хәлдә нисек итеп түҙеп йөрөй? Юҡ, белмәйҙер. Тегеһе "тиңһеҙ ҡаһарманлыҡтары" хаҡында, моғайын, һөйләп тормағандыр. Ә белә ҡалғанда Мәҙинәне ни эшләтер ине икән? Ни эшләтһен, ҡыуып сығарыр ҙа, башҡаса фатирҙарының тупһаһына ла баҫтырмаç ине шәт. Ҡыҙыҡ түгелме һуң, бына Мәҙинә үҙен яралтҡан атайы, икенсе әсәйҙән булһа ла, бер туған һаналған Нәҙир ағаһы тураһында бөтәһен дә тиерлек белә, ә тегеләре уның кем икәнлеген уйлап та бирмәй. Хатта белергә тырышмай ҙа. Әллә артабан ни эшләр икән был, тип, юрый ҡыланған булалармы?

Хәҙерге ҡануниәт нигеҙҙәренә таянып, төптәнерәк фекер йөрөткәндә бит ошо фатир Мәҙинә менән уның өләсәһенеке булырға тейеш. Урлаған бер гонаһлы, урлатҡан мең гонаһлы: улар шулай уҡ мең гонаһ йөкмәп йөрөп ятамы икән ни? Хәйер, ул мәлдә әле Мәҙинә әсә ҡорһағындағы сабый ғына булған. Шунлыҡтан, әлеге гонаһтарҙы уның өҫтөнән алып ташларға була. Ә өләсәһе? Өләсәһе Сәғиҙә әбейҙе гонаһлы һанап, үҙ өҫтөнә гонаһ алмаҡҡа кемдең намыҫы етер икән?

"Теге"гә ҡарата көндән-көн йомшара барғанын тойған Мәҙинәнең үҙенә-үҙе йәне көйҙө: ошо эшкинмәгәнлеге арҡаһында шулай уҡ уйлағанын тормошҡа ашыра алмаçмы икән ни? Нисәмә йылдар буйына үҙ ирке менән күпме мәхрүмлектәргә барып әҙерлән дә... Хәҙер бит инде ул - спорт мастерлығына кандидат, быны-бына мастерлыҡ нормаһын яҡларға тора. Кәгез кешенең йәнен алыу өсөн бер ябай ғына алымы ла етә. Барыһы ла уны, ихтыяр көсө ныҡ, тип маҡтайҙар, ә ҡайҙа һуң ул көс? Ихтыяры ныҡ булған кеше шулай йомшап төшәме? Шулай ҙа нисек итергә? Яман булһа ла атай кешегә яҫҡынырға уның ҡулы күтәрелерме? Был осраҡта бит бер яҫҡыныу ғына аҙ буласаҡ... Ә ниңә яҫҡынмаҫҡа? Ул үҙ балаһының, шул бала әсәһенең бәхетенә, хатта яҙмышына яҫҡынғанды... Юҡ, ниндәйҙер эште ниәтләп башлағанһың икән, ярты юлда туҡталып ҡалыу ярамаç.

Ниһайәт, ошондай ҡәтғи ҡарарға килгән Мәҙинә ентекләп әҙерләнергә тотонdo. Өҫтөнә тәнен һылап-ҡыçып торған ҡара төҫтәге трико, аяҡтарына еңел, әммә ныҡлы аяҡ кейеме, башына бейсболка кейҙе. Ул тулыһынса әҙер. Ҡуҙғалырға ваҡыт. Мәҙинәнең һәр аҙымы, һәр минуты иҫәпләп сығарылған: тап ошо мәлдә "теге " өйҙә яңғыҙы ҡала, ҡыштыр-ҡыштыр килеп, ниндәйҙер ҡағыҙҙар менән булыша. Әлеге ҡағыҙҙарҙы ул бер кемгә лә, хатта ки өйҙәгеләренә лә күрһәтмәй, һәр ваҡыт сейфта бикле тота. Ҡатыны эшкә, Нәҙир университетҡа киткән була. Уның "кабинетынан" өс аҙымда ғына урынлашҡан аш-һыу бүлмәһенең тәҙрә төбөндә торған өҫтәл тартмаһында һәр төрлө бысаҡтар һаҡлана. Мәҙинә уларҙың ҡайһыныһын ҡулына аласағын апасыҡ күҙ алдында тота. Бындай эштә һәр секунд ҡәҙерле, яңылышыу һис ярамай. "Эште" урын еренә еткереп атҡарғандан аҙаҡ уға бит практик занятиеларға барып өлгөрөргә кәрәк. Был уның алибиһы буласаҡ. Шулай итеп ҡон ҡайтарыу сәғәте һуҡты...

Мәҙинә, шаҡып тормаçтан ғына, таныш ишекте тартып ҡарамаҡсы итте. Сәйер, асҡыстар тупһа алдындағы түшәк аçтында ятыуға ҡарамаçтан, ошоғаса һәр саҡ биктә торған ишек был юлы асылды ла китте. Аптырай төшкән Мәҙинә уны-быны уйлап өлгөргәнсе, фатирҙан, башын һоро төҫтәге оҙон плащының бейек яғаһы эсенә йәшергән берәү килеп сыҡты. Һаҡал-мыйыҡ баçҡанлыҡтан ҡиәфәте ҡурҡыныс, өҫтәүенә ҡара күҙлек кейеп алған әҙәмдең йөҙөн ул яҙа-йоҙа ғына күреп ҡалды. Бындайын һис көтмәгән ҡыҙҙың йөрәге жыу итте: барлыҡ пландарын юҡҡа сығара яҙҙы лабаһаң, шөкәтһеҙ...

Бесәй аҙымдары менән ишектән ингән ҡыҙ тар коридор буйлап һаҡ ҡына эскә үтте. Бүлмәләрҙә шылт иткән дә тауыш ишетелмәй. Бәлки, "теге" өйҙә түгелдер? Бая сығып шылған әллә фатир ҡарағы булдымы? Ишек тотҡаһына ҡағылды, иҙәндә табан эҙҙәрен ҡалдырҙы, уғрылыҡты тота килеп Мәҙинәгә япһарып ҡуйыуҙары ла бар бит әле. Кире сығырға ла китергәме? Юҡ, ярамай, ҡәбәхәт яҙаһын алырға тейеш! Ҡон көçәүсе тәүәккәл аҙымдар менән ары атланы.

Бына Нәҙирҙең бүлмәһе, артабан зал һәм... о, Аллаһ! Был нимә? Ҡот осҡос төш түгелдер бит? Паркетлы иҙәнде тултырып йәйелә барған ҡан күле эсендә салҡан төшөп "теге", әй, юҡ, теге түгел, ә Мәҙинәнең атайы ята. Күкрәгенә нәҡ Мәҙинә алдан инселәп ҡуйған оло бысаҡ ҡаҙалған. Инде йәнһеҙҙер, тип һанаған кәүҙә ҡуҙғала бирҙе.

- Ата-ай! - Йән өҙгөс ауаз һәр төрлө йыһаз менән тулы дүрт бүлмәле фатирҙы яңғыратты. Үҙен-үҙе тотоп тора алмаған ҡыҙ яралы янына йүгереп килде. - Ни эшләттеләр һине, атаҡайым!

Ирҙең көслөк менән асылған күҙҙәре Мәҙинәгә төбәлде.

- Ә-ә, ҡыҙым... һинме ни?.. Ыһ...

- Кем һине былай?

- Ғәфү үтенергә өлгөрмәй ҡалдым... - Мөсһөҙәйә барған ир, ҡыҙҙың һорауын ишетмәгән һымаҡ, үҙенекен һөйләне. - Ғәйебем ҙур, кисер... Шулай ҙа фатирҙы һинең исемгә...

- Һиңә һөйләшергә ярамай, атай. Тик кенә ятып тор. - Мәҙинә ҡанлы бысаҡҡа тотондо.

- Ҡағылаһы булма берүк!.. - Күкрәгенән һалҡын тимер һурып алынған ирҙең тәне һелкенеп ҡуйҙы. - Тотма бысаҡты!..

Ләкин ул һуңланы. Әле генә әҙәм ғүмерен ҡыйған бысаҡ Мәҙинәнең ҡулында ине инде.

- Аһ, харап иттең, ҡыҙым, үҙенде... - Был ирҙең үҙ ғүмерендәге һуңғы һүҙҙәре булды.

- Юҡ, яңылышаһың, мине һин харап иттең. Һин уғры! Һин беҙҙең бәхетебеҙҙе, киләсәгебеҙҙе урлап ҡастың! Ниңә улай иттең инде, атай?

Йән әрнеүе менән әйтелгән һүҙҙәрҙе ир инде ишетмәне...

Әле генә булып уҙған ҡот осҡос фажиғәнән аңҡы-тиңке хәлдә ҡалған Мәҙинә, уны-быны уйлап тормаçтан, әүәл "тиҙ ярҙам"ға шылтырата һалды, һуңынан милицияны саҡыртты. Ҡыçып тотҡан бысаҡты ул, ынтылып, ниндәйҙер яҙмалар тулы өҫтәл өҫтөнә һалды. Шул ыңғайға күҙе бер ситтә ятҡан ҡағыҙ киçәгенә төштө, үҙе лә һиҙмәçтән, уны ҡулына алды. "Ҡаныбыҙҙы күп эстең, ҡәбәхәт! Алдаҡсының ахыры бына ошолай тамамланырға тейеш! Һинең ише бүтән оңҡот-ҡомағайҙарға һабаҡ булһын өсөн". Уҡығанынан шаҡ ҡатҡан Мәҙинә: "Бәй, атай, шойҡаның тейгәндәр беҙҙән башҡа ла булған, ахыры, - тип асырғанып ҡуйҙы. - Әммә ләкин бөтәһе лә минең әсәйем, өләсәйем шикелле йыуаш һәм бер ҡатлылар түгел шул. Ана бит, кешеһенә тап булғанһың... "

Күп тә үтмәçтән килеп ингән табиптар ирҙең үлемен теркәһәләр, ә милиционерҙар инде ҡул-башы ҡанға буялып бөткән ҡыҙға шунда уҡ иғтибар итте. Араларынан береһе, ишек төбөндә торғандарына ишара яһап, аçтыртын ғына күҙ ҡыçыу менән ике әзмәүер Мәҙинәне ҡармап алдылар ҙа, күҙ асып йомған арала ҡулдарына бығау һалып та ҡуйҙылар. Улар енәйәтсене енәйәт өҫтөндә тотто. Улар ифрат ҡәнәғәт...

Ни булып ятҡанын тулыһынса аңларға ла өлгөрмәгән ҡыҙҙы, этеcләй-төртkөсләй, ҡайҙалыр алып киттеләр. Сығып барышлай Нәҙир менән Мәҙинәнең ҡараштары осрашты. Күргәндәренән таш һын булып ҡатҡан егет сәсе-башы туҙғыған ҡыҙҙы мәғәнәһен юғалтҡан ҡарашы менән оҙатып ҡалды...

**(Аҙағы. Башы 7-8-се һандарҙа).**

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ

# БЫЛ ДА МӨХӘББӘТ,

## йәғни Бер ирҙең ҡатынына зарланғаны



Ҡатынды әйтәм, иртәнсәктән бирле көйһөҙләнеп йөрөй. Бынынына бәйләнеп ҡарай, тегененә бәйләнеп ҡарай. Ә барыбер үҙенә тынғы таба алмай. Ә миңә бәйләнергә хәленән килмәй. Был ҡатын иренән ҡурҡа, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул, мин унан үҙем ҡурҡам. Бындай саҡта уға һүҙ әйтеү ҡайҙа! Был файҙаһыҙ ғына түгел, был аҡылһыҙлыҡ. Мәйтәм, йәшерәк саҡта ыңғайына ла көйләгән, киреһенә лә һөйләгән мәлдәр булды. Ә барыбер файҙаһы булманы. Ике осраҡта ла һаулыҡтың ныҡлығы кәрәк булып сыҡты. Ошо мәлдә тәү башта ҡаршы әйтешкән һүҙҙәр ара-тирә атҡан мылтыҡ тауышын хәтерләтер ине. Аҙаҡ инде пүләмитең ары торһон. Ваҡыты менән һөжүмгә лә күсәһең, ваҡыты менән боҫоп та ятаһың, тигәндәй. Ә шулай ҙа беҙҙең халыҡ, еңеүгә тос өлөштө тыл индерҙе, тип бушҡа әйтмәй икән. Шуға хәҙер мин бындай осраҡта яу яланында түгел, ә тылда эшләйем. Фәлән-фәләнде һаулығы насарайыу сәбәпле тылға күсерергә, тигән рәсми ҡағыҙым да бар. Кем бирҙе, тиһегеҙме? Берәү ҙә бирмәне. Үҙем яҙып алдым. Бына әле лә шул справканы ҡатынға күрһәтеп, эшем бар ине, таҡта йышыр кәрәк, тигән "эшлекле" һылтау таба һалып, өйҙән тиҙерәк тышҡа сығып тайҙым.

Бына әле мин ҡул йышҡыһы менән әллә ни кәрәге булмаған таҡтаны тегеләй-былай йышҡылап торам. Бер күҙҙе ҡыҫа биреп, уның тигеҙлеген самалайым. Күҙ тигәндәй, бына элек яу яланында ошо күҙгә ишек төкөп бер булды бит, әй. Күрмәй ҙә ҡалаһың, аңғармаҫтан төкөй ҙә ҡуя. Йә ҡатындың күҙенә төкөй, йә минекенә, тигәндәй. Ваҡыты менән икебеҙҙекенә бер юлы төкөй. Әллә ниндәй хикмәтле ишек булды ул. Хәҙер рәхәт. Сөнки теге хикмәтле ишек алыҫта. Ә элек ошо ҡәһәр һуҡҡан ишек арҡаһында мин әҙ йөрөмәнем инде кәпәсте Чапай һымаҡ бер яҡҡа мөмкин тиклем ҡырын һалып. Ҡатын да аҙна самаһы йөрөп алыр ине яулығын ҡырын бәйләп, киноларҙа ғына күргән пират һымаҡ. Әле шул мәлдәрҙе иҫкә алып, көлөмһөрәй биреп, ҡул һырты менән таҡта өҫтөндәге барлыюҡлы таптарҙы һыпырып ташлап торам. Һеҙгә генә әйтәм, минең оҫталыҡ биш тинлек самаһы ғына. Ә шулай ҙа оҫталарға оҡшарға тырышып, ҡәләмде ҡолаҡ артына ҡыҫтырып алғанмым. Уны алған булып, ары-бире һыҙып та ебәргән булам шунда. Ҡатындың, йөрөй шунда эшем эйәһе, тигән һүҙҙәре ара-тирә ишетелеп ҡала былай. Быныһына иғтибар ҙа итмәйем. Берәү әйтмешләй, төкөрөп тә бирмәйем. Күҙҙе ҡыҫа биреп, таҡтаның тигеҙлеген ҡараған булам да, кәрәк, әле кәрәк, тип һыҙғырып ебәргән булам хатта. Һәм тағы тотонам йышырға...

Шул саҡ, әллә бәхеткә ҡаршы тип әйтәйемме икән, әллә ҡыҙғанысҡа ҡаршы микән, ҡустыһын эйәртеп өлкән улым ҡайтып инде. Өлкән тигәс тә артыҡ өлкән түгел ул. Быйыл йәй биш йәш тулырға тора. Ҡустыһына, Алла бирһә, өс йәш була инде. Бына шул өлкән улым бысраҡҡа ҡолаған бит, әй. Ҡустыһын ҡолатмайым тигәнсе, үҙе бысраҡҡа барып сумған. Ҡустыһы әйтмешләй, тәс итеп ҡалған. Мәйтәм, булды былай булғас, хәҙер әсәйҙәре ҡыуана инде. Мәйтәм, был хәл нимә эшләргә белмәй йөрөгән кешегә буйтым етә ҡаласаҡ. Шул арала уныһы өйҙән сәсрәп килеп тә сыҡты. Һәм өлкән улымдың тетмәкәйен тетә лә башланы.

- Ай-һай, бынаһы бысраҡты ҡайҙан таптың... Яңы ғына сығып киткәйнең бит... Шул арала... шул арала... ней рәүешле бысранып та ҡайтҡан... Кемгә оҡшап шулайһыңдыр инде... Ҡуй инде, булыр булыр ҙа әммә бындай әрпеш бала булмаҫ... Сусҡа балаһы һинән күпкә таҙа бит...

Ошо ерҙә минең ҡолаҡ ҡарп итеп ҡала. Үҙегеҙ ишетеп торағыҙ. Сусҡа тимәй, сусҡа балаһы тей. Тимәк, тип мин ҡулды ышҡып алам, мин бит сусҡа булам! Бына бит әй, улымды ҡотҡарам тиһәң, яйы ла сығып тора. Үҙ балаһын ҡурсаларға әҙер ата бөркөт һымаҡ, ике ҡулды ике яҡҡа йәйә биреп, кем бында сусҡа, тип ынтыла биргәйнем... Әммә ҡатындың бер генә уҫал ҡараш һирпеүе мине кире сүгәләргә мәжбүр итте. Бөгөн минең көн түгел, тип уйлап, һүлпән генә таҡтаны кире ҡулыма алдым. Бына бит, әй, улымды ҡотҡарам тигәнсе үҙем саҡ һәләк булманым. Ҡатын мине "тынысландырғас", балаға кире борола төшә.

- Ҡоланым, тиһеңме? Ай-һай, атаңа оҡшап, ҡолап ҡына барaһың шул. Әҙ генә ел иҫһә лә атаң да тәкмәсләргә әҙер генә тора. Аҙаҡ тотоп алырмын тимә. Нимә, тайып киттем, тейһеңме? Шул хәтлем атаңа оҡшамаһаң инде... Ә күҙ һиңә нимәгә? Үәт, тап шулай, ҡарар өсөн! Күҙ тайманы, аяҡ тайып китте, тиһеңме? Ай-һай, телләшергә атаңа еткермәһәң дә, унан бер генә лә ҡалышмайһың. Киленгә сыҙамлыҡ ҡына бирһен инде (үәт, исмаһам, әйтте һүҙ, биш йәшлек бала киленле булғансы әле).

Шул мәл ҡатын миңә борола төшә.

- Һал әле шул эшкинмәгән таҡтаңды. Торған була шунда күҙ көйөгө булып таҡта йышҡан булып. Мунса, моғайын, һыуынмағандыр. Бар, баланы йыуындырып алып ҡайт. Исмаһам, бер кәрәкле эш эшләрһең бөгөн. Бысраҡ кейемдәрен соланда ҡалдыр. Аҙаҡ йыуып алырмын. Һиңә ышанһаң, шуларҙы кире кейҙереп сығарырға ла күп һорамаҫһың.

Нишләйһең, киттем улымды етәкләп мунсаға. Ярай әле уныһы һыуынмаған. Һыуы ла апаруҡ ҡалған икән. Йыуындырып алғас, улымды арҡаһынан яратып алған булам.

- Ныҡ әрләп ташланымы әсәй?

Улым моңһоу ҡарашын миңә ташлай һәм ауыр көрһөнөп ҡуя.

- Һиңә рәхмәт инде, атай!

Бер аҙ тора биргәс, өҫтәп ҡуя:

- Һәйбәтерәк әсәй алырға булмай инеме?

Аптырап, улым эргәһенә эскәмйәгә сүгәләй төшәм.

- Эх, улым, яратам шул әсәйеңде.

Улым аптырай төшә.

- Уныһы нисек була тағы?

Нисек аңлатырға белмәй, мин бер аҙға тын ҡалам.

- Нуу... бына... ваҡыты менән үлтерә һуҡҡы килә! Нуу... бына ... шул уҡ ваҡытта үлтерә һуҡҡы ла килмәй! Нуу... бына... ошолайыраҡ була инде.

Улым бер аҙға тын ҡала. Һәм әйтеп ҡуя.

- Ярай, улай булғас, йәшәһен әйҙә!

Өйгә ҡайтып инеү менән, ҡатын беҙҙе әйҙүкләп ҡаршы ала.

- Әйҙә, әйҙә, үтегеҙ, хәҙер тәмле итеп сәй эсеп алырбыҙ. Мунса һыуынмағандыр, ибет. Йылы һыуы етһә ярар ине, тип бая уйлап ҡалғайным. Әйҙә, әйҙә, балалар, ултырышығыҙ. Атайығыҙ ҙа асығып киткәндер. Бөгөн көнө буйы бушаманы бит. Эшләне лә эшләне, эшләне лә эшләне. Донъя көтәм, тип тырышып йөрөүелер инде...

Мәйтәм, кисә яғылған мунса бөгөн дә һыуынмаған. Ә бына ҡатын беҙ мунсаға барып килеүгә тынысланып та та өлгөргән. Мәйтәм, эҫе ташҡа эҫе һыу һибеүсе булмағас, шулай була инде...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



# МИР АҒАЙҘЫҢ ӘЙТКӘНЕ

Әсәйем ҡаты сирләп киткәс, уны үръяҡта, ауыл ситендә урынлашҡан участка дауаханаһына һалдылар. Кесе апайым менән көн һайын уның хәлен белергә барабыҙ. Төшкө аш мәленә тоҫмаллап. Өләсәйем ишек алдынан ары сығып йөрөй алмағанлыҡтан, яулыҡҡа ул-был ашантыны төрөп һала. Билдәле, әсәйем тәғәмләнер хәлдә түгел, шуға килтерелгәнде тотошлайы менән палатала ятҡандарға өләшә. Ҡайтып инеү менән гел бер үк һорау ҡабатлана: "Йә, нисек?" "Ебәргәнеңдең тамсыһын да ҡалдырмай йыпырҙы!" тип алдашабыҙ апайым менән бер тауыштан. Әҙәм балаһына бер йылы һүҙ ҙә етә бит, өләсәйем ҡыуанып китә лә былай ти: "Ашаған мал бирешмәҫ, тигән әйтем бар, әсәйегеҙ ҙә шәбәйеп, үҙ аяҡтары менән ҡайтып инер әле, Алла бойорһа, бына күрерһегеҙ!"

Хәл белергә барыу ҙа еңелдән түгел, беҙҙе урта тош балаларын үръяҡтар урам аша үткәрмәй ыҙалата: ҡамайҙар, үсекләйҙәр, таш менән һалмауырлайҙар. Эйәләренә оҡшап, эттәре лә килеп тороп уҫал, абалап ҡаршы сығалар, тештәрен ыржайтып, салғыйға ынтылалар. Шуға күрә кеше күҙенән йәшеренгән ҡасҡындарҙай, картуфлыҡ осонда ярпайып үҫкән әрем-кесерткәнгә, тегәнәк-киндергә боҫоп үтәбеҙ. Барып күренеү менән беҙҙе генә көтөп торғандай төшкө ашты өләшә башлайҙар. Апайым әсәйемә тигән итле туҡмасты ашай, йә кәбеҫтә һурпаһын һемерә, миңә майлы бутҡа, йә котлет эләгә, бөтөргәнсе ашап, тәрилкәнең төбөн асмәйел бурҙайҙай ялтлатып ялап уҡ ҡуям. Йәнәш карауатта ятҡан Гөлъямал апай һорай ҡуя:

- Көн һайын һәммәһен сиңерткә сиреүеләй ҡоротаһығыҙ ҙа ул, ә әсәйегеҙгә нимә ҡала инде?

- Уға ҡаралай сәй ҙә етә! - тип ормаһар хәбәр һалам.

Әсәйем алмаш тилмәш башыбыҙҙан һыйпап былай ти:

- Алай ҙа ризығымды бүлешер балаларым бар!..

Күрше ауылда Мир исемле ағай йәшәне. Сельпо машинаһында эшләне, ауылдарҙағы кибеткә аҙыҡ-түлек ташый торғайны. Ҡырыҫыраҡ холоҡло, әммә итәғәтле, мөләйем кеше ине. Бер саҡ үҙ-үҙенә ҡылыҡһырлама яһап әйткәне иҫтә: "Холҡомдоң ҡатылығы шунан килә, ҡустым, балалар йортонда тәрбиәләндем, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп татырға тура килде. Кемдеңдер тарафына өҙләкһеҙ таш атһалар, ырғытһалар, ул таштай ҡатыға әүерелә. Холҡом ҡаты булһа ла күңелем нескә минең, унда насарлыҡ, хаслыҡ, аламалыҡ йөрөтмәйем, йөрөтмәм дә..."

Ул бер кем менән дә ғәҙәти итеп, һәүетемсә һаулыҡ һорашманы. Килеп инә лә киң итеп йылмайып ебәргәндән һуң, семтем ҡараһы ҡалмаған сәстәрен ҡулы менән һыпырып:

- Миру - мир! - ти. - Ул ошолай итеп гелән ауылдаштарын, яҡындарын, белгән һәм белмәгән кешеләрҙе сәләмләне, үҙенә, башҡаларға именлек, тыныс тормош теләне.

...Ошо хәтирәләрҙән сығып, шуны әйтәм, туғандар, мөлкәт бүлешкән һайын арта, таратылған ризыҡ тәмлерәктәре, татлыраҡтары менән яңынан тулылана, һәр саҡ сәләмәт табынығыҙҙағы тәғәмегеҙҙе бүлешер яҡындарығыҙ, дуҫтарығыҙ, балаларығыҙ булһын! Йәнә "Миру- мир!" тип өҙләкһеҙ тәкрарлаған Мир ағай хаҡлы, килешеп, татыу йәшәүгә ни етә.

***✓ "Малайҙары шул тиклем һәйбәт, ҡыҙҙар шикелле", - тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр. Ни эшләп малай ҡыҙ һымаҡ булырға тейеш әле, уға аҙаҡтан нисек ир итеп ҡарап, унан ир ҡылыҡтары көтәһең?***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# КҮБЕРӘК ҺЫУ ЭС

■ Рәсәй халҡының яртыһында һимеҙлек күҙәтелә, тип белдерә ғалимдар. Тикшеренеүҙәрҙә 2150 кеше ҡатнашҡан, респонденттарҙың уртаса йәше - 45 йәш. 52 процент кешенең ауырлығы тейешенән артыҡ, уларҙың 22 процентында һимеҙлек асыҡланған. Бөтөн донъяла был һан - 13 процент. Статистикаға ярашлы, айына килеме 20 мең һум булған граждандар төркөмөндә артыҡ ауырлыҡтары булғандар 30 процент һәм был категориялағы 30 процент кешелә һимеҙлек күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта, халыҡ үҙен физик йәһәттән ярайһы әүҙем иҫәпләй. 55 проценты аҙнаһына бер нисә тапҡыр спорт менән шөғөлләнә, 74 проценты спорт залына һирәгерәк йөрөй. Әммә ниндәйҙер ауырыу менән, мәҫәлән, диабет менән ауырыусылар араһында физик күнекмә яһаусылар 8 процент ҡына. Тап ауырыу кешеләр өсөн физик әүҙемлек күберәк кәрәк, шул саҡта ғына уларҙың хәле күпкә яҡшыраҡ буласаҡ.

■ Организмды таҙартырға кәрәк, әйҙә, беҙгә ҡушыл, тигән саҡырыуҙарҙы йыш ишетәһегеҙме? Ысынлап та, төрлө селтәрле бизнес менән шөғөлләнеүсе "эшҡыуар"ҙар беҙҙе быға ышандырырға тырыша. Организмды шлак һәм токсиндарҙан таҙартырға кәрәк, тип, төрлө препараттар рекламаһалар ҙа, белгестәр бының өсөн бер ниндәй ҙә медицина һәм биологик сәбәп юҡ, тип иҫәпләй. Әгәр ҙә бауыр менән бөйөрҙәрегеҙ эшләй һәм насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ тораһығыҙ икән, бер ниндәй ҙә таҙарыныу кәрәк түгел, ти улар. Икенсенән, "шлак" тигән нәмәнең булыуы әлегә тиклем дәлилләнмәгән, детокстан һуң уларҙың юҡҡа сағыуын күрһәткән фәнни документтар ҙа юҡ. Организмдың эшмәкәрлегенә ҡыҫылғансы, дөрөҫ туҡланырға, күберәк һыу эсергә кәрәк, тигән кәңәш бирә табиптар.

■ Терапевт һәм диетолог Елена Тихомирова әйтеүенсә, иртән торғас та 1-2 стакан һыу эсеү метаболик процестарҙы әүҙемләштереп ебәрә, шулай уҡ ашҡаҙан-эсәк тракты һәм бәүел бүленеү системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта. Был организмдың һыу балансын тулыландыра, ҡан ҡуйырыуҙан һаҡлай, тимәк, тромбоз ҡурҡынысы ла юҡҡа сыға. Шыйыҡ ҡан баш мейеһе эшен дә әүҙемләштереп ебәрә, ти Тихомирова. Һыуҙы иртәнсәк кенә эсергә кәрәк, тип уйлаусылар хаталана. Көн дауамында һыу лимфа системаһы эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай, патоген микроорганизмдарға ҡаршы көрәшә.

■ "Телефонда күп ултырма, күҙең боҙола", - тип тыябыҙ балаларҙы һәм үҙебеҙ быға ныҡ ышанабыҙ. Смартфон, планшет, компьютерҙарҙың күреү һәләтенең түбәнәйеүенә булышлыҡ итеүе ысынмы? Белгестәр әйтеүенсә, электрон ҡорамалдарҙың, дөрөҫөрәге, уларҙы самаһыҙ ҡулланыуҙың күреү һәләте насарайыуында туранан-тура ғәйебе юҡ. Миопия, күҙҙең йыраҡтағы әйберҙәрҙе насар күреүе күҙ алмаһы оҙонлоғоноң ҙурайыуы һәм шуның арҡаһында күҙ алмаһының алғы өлөшө менән күҙ яҫмығы яҡтылыҡты күҙҙең селтәрле ҡабығына түгел, ә уның алдына фокуслау менән бәйле. Ҡайһы саҡта күҙ мөгөҙсәһе, йәки күҙ яҫмығы, йәки уларҙың икеһе лә боҙолған була, был да яҡтылыҡтың дөрөҫ төшмәүенә сәбәпсе булып тора. Күҙҙең сәләмәтлеген һаҡлау өсөн уны даими күнектереп торорға кәрәк, йә йыраҡтағы, йә яҡындағы объекттарға сиратлап ҡарарға. Шуға ла экранға оҙаҡ итеп ҡарап торһаҡ, күҙ яҡындағы объекттарҙы яҡшы, әммә йыраҡтағын насар күрә. Бигерәк тә күреү һәләте формалашҡан һәм үҫешкән ваҡытта был зыянлы. Тимәк, балаларҙы телефонда ултырыуҙан мотлаҡ тыйырға кәрәк.

*ДИАЛОГ*

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ НӘЗӘКӘТЛЕГЕ...

## ир-егетте уңышҡа илтеүсе көс

**(Башы 1-се биттә).**

**➔ Тимәк, матур күлдәк кейгәндән күңелең бөтәйә икән, быны мотлаҡ эшләргә кәрәк?**

**Л. Халиҡова:** Тышҡы матурлыҡ ҡына кешенең күңелен бөтәйтә алыуы шикле, әлбиттә, ул ваҡытлы күренештер. Ә бына физик һаулыҡты ла, психик һаулыҡты ла, рухи һаулыҡты ла тигеҙ хәстәрләргә кәрәк икәне хаҡ. Күлдәк кейеп кенә, йә пластика яһатып ҡына түгел, ә рухи яҡтан үҙ өҫтөңдә эшләү, тәрбиәләүҙе һәр ваҡыт, ғүмер буйы хәстәрләү кәрәк.

**Ф. Үтәбаева:** Һеҙҙең менән килешәм. Мәктәптә 25 йыл эшләү дәүерендә дәрестәрҙә ҡыҙ баланың тышҡы ҡиәфәте генә түгел, үҙ-үҙен тотошо, аралашыуы, тауышы, һөйләше, хатта атлауы, һирпелеп ҡараш таштарын боҙоуы мөмкин, мәҫәлән, атай өсөнсө бәпесте малай итеп көтә, сөнки 2 ҡыҙы бар һәм тағы ла ҡыҙ тыуғас, уға малайға ҡараған һымаҡ ҡарайҙар. Ә ҡыҙ төпкө аң менән атаәсәһен тыңлай һәм үҙен малай һымаҡ тота. Йәнһүрәттәр ҙә тәьҫир итә, ниндәйҙер супергеройҙар йә донъяны ҡотҡара, йә ниндәйҙер батырлыҡтар ҡыла, ә былар ҡыҙҙарға хас сифат түгел. Шулай уҡ малайына ҡыҙға ҡараған кеүек ҡараһалар, был да уларҙың холоҡ-ҡылығында сағыла. "Малайҙары шул тиклем һәйбәт, ҡыҙҙар шикелле", - тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр. Ни эшләп малай ҡыҙ һымаҡ булырға тейеш әле, уға аҙаҡтан нисек ир итеп ҡарап, унан ир ҡылыҡтары көтәһең?

Пирсинг иһә ул ниндәйҙер кимәлдә үҙеңә ҡарата агрессия, тимәк, бала нимә менәндер, мәҫәлән, ҡиәфәте менән ҡәнәғәт түгел. Айырыуса үҫмер ваҡытында үҙенең тәнен, тәнендә барған үҙгәрештәрҙе ҡабул итергә өйрәтергә кәрәк. Һөйөп тор балаңды, матур һүҙҙәр әйт - ул тәнен ҡәҙерләргә өйрәнер. Бындай бала үҙен дә ярата, башҡаларҙы ла ярата ала, бөгөнгө көндә йәмғиәттә ошо ныҡ етешмәй.



**➔ Һеҙ үҙегеҙ ҡыҙҙар үҫтергән әсәйҙәр, ҡыҙ бала тәрбиәләгәндә нимәгә иғтибар итергә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?**

***Атаһы ятаҡан ҡыҙҙы ире лә ярата, был дөрөҫ. Әсәй ҙә улын алтын урталыҡтан сыҡмайынса ғына яратырға тейеш. Бындай сик баланың киләсәктәге тормошо өсөн һәйбәт нигеҙ, хатта ниндәйҙер кимәлдә тоҡом, нәҫел көсө тип әйтергә лә була. Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарға, ниндәй көслө, тип һоҡланып ҡарайбыҙ, әммә ул тәбиғәте менән ундай булырға тейеш түгел. Ул ана шул бер кемгә лә таянып, һалышып өйрәнмәгәнгә тормошта барыһын да үҙе хәл итә.***

лауы ла матур һәм ипле булырға тейешлеген аңлата киләм. Уҡыған әҫәрҙәрҙең образдарын анализлағанда ла бәхәсләшеп китәбеҙ, сөнки йәштәр матурлыҡты башҡасараҡ аңлай. Ҡаш, ҡолаҡ, танау тиштереп алҡа тағыу ҙа улар өсөн матурлыҡ билгеһе. Бөгөнгө заман ҡыҙҙары үтә ҡыйыу биҙәнә, үтә ҡыйыу кейенә, был уларҙың тәбиғи нәзәкәтлеген баҫып китмәһен ине.

Ә бына, һеҙ әйткәнсә, физик һәм психик һаулыҡты хәстәрләү - һәр кешенең бурысы икәнен аңлар йәшкә еткәнмен. Бер мәл хәлем бөткәнен аңланым. Атайым менән әсәйем мине сәләмәт, камил итеп тапҡан, үҫтергән, шул һаулығымды, булмышымды тәләфләүемде аңлауым тормошома икенсе һулыш бирҙе. Иртәнге гимнастика, саф һауала йөрөү, һыу эсеү, бассейн, фитнес залға йөрөү физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да ныҡлыҡ өҫтәй.

**Л. Халиҡова:** Тәрбиәнән дә күп нәмә тора. 3-7 йәштәр араһында ҡыҙ бала малай менән ҡыҙҙар араһындағы айырманы аңлай башлай, ҡыҙҙар матур, наҙлы була икәнен, улар ҙурайғас әсәй буласаҡ икәнен белә. Ҡайһы бер ата-әсәләр уның ошо ҡараштарын боҙоуы мөмкин...

**Ф. Үтәбаева:** Тамсыны беҙ тәрбиәләп ултырманыҡ та, быға ваҡытыбыҙ ҙа булманы. Ул атаһы менән үҙ-ара булған мөнәсәбәтебеҙҙе күреп, ошо мөхиттә үҫте. Ғаиләләге тәрбиә нигеҙҙәренә килгәндә, иң тәүҙә баланы яратырға кәрәктер ул. Башҡалары шуға үрелеп килә. Мин атайымдың, ҡартатайымдың яратыуын тойоп, ошо хистәрҙең күңелемдә үҫтереп, үҙемә ышаныс уятыуын үҙ тәжрибәмдән беләм. Тағы ла бер хәл иҫемдә ныҡ ҡалды. Атайым менән әсәйем мин 1-се курста уҡығанда Өфөгә килгәйнеләр, шунда иртәнге сәй мәлендә икәүләшеп кенә һөйләшеп ултыралар. "Дүрт балам өсөн йөрәгем дүрткә теленгән инде", - ти әсәйем. "Ә минең йөрәгем - ҡыҙымда", - атайымдың ошо әйткәне миңә ныҡ тәьҫир итте. Ҡустыларым да ҡурсалап ҡына торҙо үҫкән саҡта. Шуға ла ҡыҙ бала атаһы яғынан яратыуға сорналып үҫергә тейештер, ҡыҙымдың да атаһына яҡыныраҡ булыуы, уның менән күберәк кәңәшләшеүенә ҡыуанып ҡына ҡарайым.

Ул хәҙер минең үҙемде тәрбиәләй. "Әсәй, һин шуны кей, ошолай биҙән", - тип өйрәтә. Шул мәлде ныҡ көтә инем, ҡыҙҙары үҫмерлек мәлен үтһә, әсәйҙәр икенсе йәшлеген кисерә бит ул. Уның шулай уҡ үҫә килә яйлап тәненең үҙгәрә барыуы, ул үҙгәрештәрҙе ҡатын-ҡыҙ өсөн хас ниндәйҙер серле бер нәмә итеп ярытып ҡабул итә белеүе лә оҡшай. Бөгөнгө балаларҙың белмәгән нәмәһе юҡ, шулай ҙа әсәй генә өйрәтә, әйтә торған нәмәләр бар, шуларҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышам.

**Л. Халиҡова:** Ысынлап та, ғаиләләге дөйөм мөхит, мөнәсәбәт нисек ҡоролған, баланы күбеһенсә шулар тәрбиәләйҙер. Ҡыҙым Йәнгүзәлгә 24 йәш инде. Ул үҙенең яратылған, көтөлгән бала икәнен тойғандыр тип уйлайым, ҡосаҡлау, үпәсләү ҙә минең яҡтан күп булды. Атайҙар икенсерәк ярата, улар, бәлки, супылдатып үбеп ултырмай, әммә уның ярытыуына бала шикләнмәй ҙә. Ҡыҙым һәр ситуацияла ла атаһына таянырға була икәнен яҡшы белә. Үҙемдең ата-әсәйемә, ҡәйнәмә рәхмәтлемен, ейәнсәрҙәрен тәрбиәләүҙә улар ныҡ ҡатнашты.

Атаһы ятаҡан ҡыҙҙы ире лә ярата, был дөрөҫ. Әсәй ҙә улын алтын урталыҡтан сыҡмайынса ғына яратырға тейеш. Бындай сик баланың киләсәктәге тормошо өсөн һәйбәт нигеҙ, хатта ниндәйҙер кимәлдә тоҡом, нәҫел көсө тип әйтергә лә була. Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарға, ниндәй көслө, тип һоҡланып ҡарайбыҙ, әммә ул тәбиғәте менән ундай булырға тейеш түгел. Ул ана шул бер кемгә лә таянып, һалышып өйрәнмәгәнгә тормошта барыһын да үҙе хәл итә. Ғаиләһендә яратылған, үҙен ҡәҙерле итеп тойған бала насар күренештәргә лә бирелеп бармай, насар юлға баҫмай. Яратыу көсө тормошта ҡыйынлыҡтарҙы еңергә ярҙам итә.

**➔ Ҡыҙ тәрбиәһенә ҡағылған тағы бер күренеш бар. Ҡыҙым бәхетле булһын, тиҙәр, әммә бер кемдең дә ҡыҙына: "Бәхетле булғың килһә, бул, был һинең үҙеңдән тора", - тип әйткәнен ишеткәнем юҡ. Бәхетле булаһыңмы, булмайһыңмы - был кемдәндер, әйтәйек, уңышлы никахтан, мул тормоштан һ.б тора тигәнде уның аңына һалып үҫтерәбеҙ түгелме?**

**Л. Халиҡова:** Был хаҡта үҙебеҙ уйлап та ҡарамағанға әйтмәйбеҙҙер, бәлки. Бәхет тойғоһо, ысынлап та, бик шартлы төшөнсә, хатта ҡайһы саҡта тормошҡа ҡарашың үҙгәреп китеүе лә үҙеңде бәхетле тойорға мөмкинлек бирә. Шуға ла һәр ситуациянан "Мин бәхетлемен" тип сыға алаһың икән, был бик яҡшы. Шулай ҙа кеше үҙен бәхетле тойһон өсөн булмышына ярашлы һөнәре, аралашыр дуҫтары, яратыр кешеһе булырға тейештер. Тик был саҡта ла улар һине бәхетле итмәй, ә, киреһенсә, бәхетле була белгән һин был мөнәсәбәттәргә яҡтылыҡ өҫтәйһең.

**Ф. Үтәбаева:** Ҡасандыр бер апайым миңә: "Ҡайҙа саҡыралар, шунда бар, әммә мине хәҙер нимә эшләтерҙәр икән тип көтөп ултырма, үҙеңдең күңелеңде үҙең генә күтәрә алаһың",- тигәйне. Ҡыҙыма хәҙер үҙем шулай тейем. "Нимәлер көтөп ултырма, мәҫәлән, тыуған көнгә бара-

һың икән, берәү ҙә һинә күңелле булһын өсөн йырлап-бейеп торорға тейеш түгел. Үҙ күңелеңде үҙең күр", - тейем.

**Л. Халиҡова:** Яуаплылыҡты үҙеңә алыу был. Хәҙер бәләкәй балаларҙы тыуған көнгә саҡырыр алдынан минутына тиклем уйланылған күңел асыу программаһы төҙөйҙәр. Ата-әсә ял һайын нисек итеп баланың күңелен күрергә икән тип баш вата. Шуға ла ғәҙәти тормошта балаға күңелһеҙ, ул ошоға өйрәнеп китә - кемдер эргәһендә уның өсөн алдан уйланған сценарий буйынса бейеп торорға тейеш. Ә бына беҙ уйнап үҫтек. Бәләкәй саҡта уйналған йәнле уйын ул етди нәмә. Әгәр ҙә кеше уйнай, ошо уйын буйынса нимәләр төҙөй, ҡора, маҡсат ҡуя, быныһ өсөн фантазияһын эшкә "егергә" өйрәнә икән, үҙенең тормошон да үҙе ҡора аласаҡ. "Күңелһеҙ" тип йыш әйтә икән, был бик ҡурҡыныс сигнал, аҙаҡтан быңдай кешеләр тормоштан да ялҡа, сөнки ана шул кәйефе өсөн кемдер нимәлер эшләргә тейеш булып сыға.

➔ **Әҙәби геройҙар араһында кәрәк саҡта һеҙгә йәшәү көсө биргән, илһамландырған берәй образ бармы?**

**Ф. Үтәбаева:** Беҙ студент саҡта "Аҡ тирмә" мәҙәни клубы төрлө сараларҙы күп ойоштора ине бит. Рәшиҙә Туйсина, Таңсулпан Бабичева кеүек гүзәл заттарға иҫебеҙ китеп ҡарай инек. Тормошта көслө булған ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланам. Яҙыусыларҙан Гөлсирә Ғиззәтуллинаны яратам, барыбер ҡатын-ҡыҙҙы ҡатын-ҡыҙ яҙыусы ғына аңлай һәм уның психологияһы тураһында яҙа ала. Мостай Кәримдең Аҡйондоҙо минең өсөн гүзәл зат эталонылыр, моғайын.

Ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы тураһында мәктәп программаһында бер-ике генә әҫәр бар. Уларҙың береһе - Һ. Дәүләтшинаның "Айбикә"һе, ул көслө рухлы булыуы менән оҡшай миңә. Йыһат Солтановтың "Кәнәфер сәскәһе"ндә иһә ғаилә мөнәсәбәттәре, Фәриҙәнең әсәһенә мөнәсәбәте матур итеп һүрәтләнә. М. Кәримдең көндәлектәрен йыш ҡына уҡыйым, уның ҡатынына булған һөйөү, Рауҙаның зирәклеге үҙе бер илһам сығанағы. Барыбер ҙә ҡатын-ҡыҙҙың нәзәкәтле булыуы ир-атты батырлыҡтар ҡылырға, ҙур уңыштарға ирештереүсе төп көс ул. Ә бына һуңғы ваҡытта йыш һөйләнгән, әҫәр буйынса спектакле лә ҡуйылған "Килен"де (З. Мусина) бик тормошсан тип ҡабул итә алмайым.

**Л. Халиҡова:** Сөнки хәҙер бик йәберләнеп, бер ҡайтып, бер килеп йәшәгәндәр һирәк. Үҙ һүҙен генә һүҙ итергә өйрәнгән әсәһенең йоғонтоһонда булған улдар иһә барҙар. Улар үҙаллы ниндәйҙер ҡарар ҙа ҡабул итә алмай. Дөрөҫөн әйткәндә, ауыр хәлдә ҡала икән, был ҡатынға ситтән ярҙам кәрәк ул. Күпме ишеткәнебеҙ бар, ире туҡмаһа ла, үҙ әсәһе лә: "Кешенән, күршенән оят, кейәүгә сыҡҡас, йәшә", - тип, кире өйөнә индермәгән осраҡтар була. Быңдай кризис мәлендә ҡатындың үҙенә ҡул һалыуы ла ихтимал. Тик былар һирәк күренеш. Беҙ, киреһенсә, хәҙер бер кемдән дә оялмайбыҙ. Улай ҙа ярамай, әлбиттә.

Аборттар тураһында күп һөйләйбеҙ. Туғандары, ире, был бала тыуһын, тип торһа, ҡатын ул юлға бармай бит инде, сөнки психологик яҡтан бик ауыр кисерә быны. Шул яҡтан да яҡлау кәрәк бөгөнгө ҡатын-ҡыҙға. Гүзәл зат ирҙәргә ҡарағанда рухи яҡтан көслө һымаҡ ул, шулай ҙа ул ҡурсалауға, ир заты тарафынан яратыуға ныҡ мохтаж. Был тәбиғәттән һалынған үҙ роленән сығып китмәһен, донъя ҡотҡарырға тырышмаһын, нәзәкәтле, матур булһын өсөн кәрәк.

Әҙәби әҫәрҙәргә килгәндә, беҙҙең быуын Наил Ғәйетбай, Динис Бүләков кеүек яҙыусыларҙың үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән әҫәрҙәрен уҡып үҫтек. Маҡсат ҡуйыу, үҙ-ара мөнәсәбәттәр, холҡоңдо тәрбиәләү өсөн үҙ өҫтөңдә эш уларҙа шул тиклем матур бирелгән. Бөгөнгө йәштәр ҙә уҡыһын ине уларҙы. Шундай тормошто аңларға ярҙам иткән әҫәрҙәр күп булды, мәҫәлән, Жорж Сандтың "Консуэло"һында героиняның рухи матурлығы көслө бирелгән. Аҙаҡҡы ныҡ тәьҫирләнеп уҡыған әҫәрем Оскар Уайльдтың "Портрет Дориана Грея" метафораларға бай. Герой гел йәш һәм матур булып ҡалыу өсөн күңелен һәләк итә һәм ҡаты йөрәкле, ике йөҙлө кешегә әүерелә.

➔ **Бөгөн кәрәк тип тапһа, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тренингтар ҙа бар, улар менән психологтар ҙа эшләй. Шулай ҙа беҙҙең өләсәй-әсәйҙәр быңдай саҡта нимә эшләне икән, улар күңел төшөнкөлөгө кисермәгәнме, әллә стресс, депрессия ул уйлап табылған нәмәме?**

**Л. Халиҡова:** Психогигиена тигән нәмә бар. Беҙ көн һайын йыуынған, йә башҡа гигиена сараларын үтәүҙе норма тип ҡабул итәбеҙ, шуның кеүек насар тойғоларҙан, уйҙарҙан арынып торорға кәрәк. Кемделер яратмай йөрөйһөң икән, ул кешенән бигерәк, үҙеңә ҡыйын бит. Психологик яҡтан таҙарынып тороуҙың үҙенең ысулдары бар, уларҙы хатта интернетта ла табырға мөмкин. Стресс кисергәндә тән-уйҙар-тойғолар ҡатнаша. Мәҫәлән, көсөргәнештән арыныу өсөн йылмайыу, көләү тәндә йомшартырға ирек бирә. Халыҡта быңдай ысулдар күп булған, онота төшкәнбеҙ генә. "Серҙәш" тигән һүҙ бар, күңелеңдә ышаныслы ғына әхирәтеңә бушатыу күренеше булған. Ныҡ тетрәнеү кисергән кешене тау-урманға алып барып, ҡысҡыртыу үҙе бер алым. Йырлау, көйләп йөрөү ҙә, ҡурайҙа уйнау ҙа һулышты тынысландырып ебәргән. Урыҫтарҙың усаҡ аша һикереүенең дә үҙ мәғәнәһе бар. Диндә лә матур алымдар күп, әммә бөтөн кеше лә дингә килә алмай. Шуға ла хәҙерге заманда психологияны белеү ҙә кәрәк, сөнки ана шул элек таянып торған нәмәләр юғалып бара.

**Ф. Үтәбаева:** Өләсәйем үҙе бер матурлыҡ эталоны ине, уның ярамаған ғәҙәте генә түгел, һүҙе лә булманы. "Кеше тураһында саҡ ҡына насар уйлаһам да, тубығым дереләй башлай", ти торғайны ул. Мине лә шулай-былай бул тип тәрбиәләмәне. "Маңлайы матур бит ҡыҙымдың, ҡайырып яулыҡ бәйләргә", - тип әйтә, ошо һүҙҙәрҙән һуң нисек үҙеңде яратмайһың? "Ни эшләп көлмәйһең, һинә көләү килешә", ти ине, шулай миндә, йылмайыу - тормошоңдоң теүәллеге, һиллеге тураһында белдерә, тигән фекер нығынған.

➔ **Гүзәл заттың ҡартайыуҙы ауыр кисергәнен дә беләбеҙ. Үҙеңде һәр йәштә лә ҡабул итергә нисек өйрәнергә?**

**Л. Халиҡова:** Билдәле Голливуд актрисаһы А. Джолиҙың әйткәне иҫтә ҡалған: "Минең битемдә һырҙар бар, сөнки мин тере кеше". Бала саҡта һинд киноларын, Шридеви тигән актрисаны яратып ҡарай торғайныҡ. Ул ҡартайырға ҡурҡып, операциялар яһатып йәшәгән икән. Ғүмере 54 йәшендә генә ҡапыл өҙөлә. Мин шуға инанғанмын: ҡартайырға ҡурҡһаң, йәшләй генә китеп барырға мөмкин. Ҡартайыу, битеңдә һырҙар барлыҡҡа килеүе үҙе бер бәхеттәр. Күп нәмә әйтергә булыр ине бында, әммә ошо фекер иң ҡатыһы, әммә тәьҫирләһе. Әсәйем 62 йәшендә генә мәрхүмә булды, хәҙер оло инәйҙәрҙе күрһәм, уларҙың йәшенә етергә яҙһын, тип теләйем үҙемә. Дауаланмаған сирҙәрҙән күпме йәштәр үлә, шуға ла



*Өләсәйем үҙе бер матурлыҡ эталоны ине, уның ярамаған ғәҙәте генә түгел, һүҙе лә булманы. "Кеше тураһында саҡ ҡына насар уйлаһам да, тубығым дереләй башлай", ти торғайны ул. "Маңлайы матур бит ҡыҙымдың, ҡайырып яулыҡ бәйләргә", - тип әйтә, ошо һүҙҙәрҙән һуң нисек үҙеңде яратмайһың? "Ни эшләп көлмәйһең, һинә көләү килешә", ти ине, шулай миндә, йылмайыу - тормошоңдоң теүәллеге, һиллеге тураһында белдерә, тигән фекер нығынған.*

һырҙарығыҙ бар икән, шатланығыҙ, тимәк, һеҙ тере, йәшәйһегеҙ, олоғайһығыҙ, олпатланаһығыҙ. Өлкәнәйгән һайын кешенең күңел байлығы, тормош тәжрибәһе йөҙөнә сығып, күренеп тора, икенсе төрлө матурлыҡ килә, минеңсә. Гел йылтырап йөрөп булмай бит. Пластик операциялар яһатмағыҙ, тимәйем, тик һәр нәмәлә сама булһын. Шулай ҙа... ҡартайғас та матур булам тиһәгеҙ, күңелегеҙҙе байытығыҙ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ысынлап та, йәмғиәт ҡатын-ҡыҙҙың нескә иңенә ауырлыҡты күберәк һала, ул ҡатын да, әсә лә, милләт тотҡаһы ла. Ҡунаҡтарыбыҙ хаҡлы, тормош матур булһын өсөн гүзәл заттың күңеле бөтөн булырға тейеш, бының өсөн ҡайһы саҡта тәбиғи көсһөҙлөгөңдө танып, йөгөңдө ир затына бушатыу ҙа кәрәктер. Һәр хәлдә, ир-егет - үҙенең, ҡатын-ҡыҙ үҙенең урынында булһын. Шул саҡта ғына тормошобоҙға гармония, һиллек, тыныслыҡ килер. Байрам менән!**

Ләйсән ВӘЛИЕВА
әңгәмәләште.

УҢЫШ ҠАҘАН



## ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Өлөшсәнең урынын һәм уның тиҙлеген бер үк ваҡытта билдәләп булмауын асыҡлаған немец физигы Гейзенберг XX быуаттың аҡыл эйәһе булған. Әгәр беҙ өлөшсәнең ҡайҙа икәнлеген асыҡлаһаҡ, уның ниндәй тиҙлек менән хәрәкәт итеүен белә алмайбыҙ. Был бөйөк асыш **билдәһеҙлек принцибы** атамаһын ала һәм Гейзенбергҡа физика буйынса Нобель премияһын килтерә. Беҙҙең өсөн был барлыҡ мөмкинлектәрҙең бер үк ваҡытта ғәмәлдә булыуын аңлата. Барыһы ла алдан программалана. **Бар ғәмәлдәр бер үк ваҡытта бара.** Һеҙгә бары тик үҙегеҙгә оҡшағанын һайлап алырға ғына кәрәк. Һеҙ аңлы рәүештә һайлайһығыҙ. Уйҙарығыҙ телевизорҙы ситтән пульт менән тоҡандырып, программалар һайлаған кеүек. Унда, хатта һеҙ бер программаны ғына һайлаһағыҙ ҙа, барлыҡ программалар бер үк ваҡытта күрһәтелә. Әгәр программа ялҡытһа, төймәгә баҫып, икенсе каналға күсәһегеҙ. **Тормошоғоҙҙо ла шулай бик тиҙ үҙгәртергә мөмкин.** Был ауыр ҙа түгел, бары тик телевизор каналын күсергән ваҡытты ғына ала. Һеҙгә бары тик төймәгә баҫырға ғына кәрәк. Шуға күрә, тормошоғоҙ оҡшамай башлаһа, уй-фекерегеҙҙе үҙгәртеп, каналды күсерегеҙ. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта уйҙарығыҙ тик аҡса проблемаларына ғына бәйле икән, һеҙ һаман иҫке программа ҡарайһығыҙ.

Финанс азатлығына өлгәшкегеҙ килһә, **мейегеҙҙе бурыстарҙан азат итегеҙ.** Бының өсөн һеҙгә аҡса проблемаларына, һеҙҙе бик оҙаҡ алға барырға мәжбүр иткән өсөн, уйығыҙҙа ғына рәхмәт әйтегеҙ һәм башҡаса улар менән осрашырға теләмәүегеҙҙе белдерегеҙ. Үҙегеҙҙең алға барырға әҙер икәнлегегеҙҙе аңлатығыҙ.

Тормошоғоҙҙо ҙур видеокассеталар коллекцияһы итеп күҙалларға кәрәк. Залға инәһегеҙ, прокатка кассета алаһығыҙ, уны өйөгөҙгә алып ҡайтаһығыҙ һәм фильм ҡарап ҡәнәғәтлек алаһығыҙ. Башҡа фильмдар, һеҙ уларҙы ҡарарға теләгәнсе, магазинда ҡала. Теләгән ваҡытта уларҙы һайлап ала алаһығыҙ.

**Тормоштоң барлыҡ сценарийҙары ла йәшәргә хоҡуҡлы.**

Кемдәргәләр ҡурҡыныс фильмдар оҡшай - һәр кемдең үҙ һайлауы.

### Уйҙар - тулҡындар ул

Альберт Эйнштейндың билдәле **$E=mc^2$** формулаһы есемдең - тупланған энергия булыуын раҫлай. Фекер - энергетик тулҡын. Тимәк, әгәр тулҡын етерлек көскә эйә икән, ул есемгә әйләнә. Физика ҡануны шулай. Бына ни өсөн уйҙарҙы контролдә тоторға, уйлап һөйләргә кәрәк.

Күптәрҙең тормошонда проблемалар күп булыуы осраҡлы түгел. Һеҙгә "Минең эштәрем хөрт: бурысым муйындан, балаларым тыңламай, етәксем насар", һәм шуның кеүек уйҙар уйламаҫҡа, ыңғай фекер йөрөтөргә тырышырға кәрәк. Мин һеҙгә квант физикаһының дөйөм ҡабул ителгән принциптарын ҡулланырға кәңәш итәм. Энергетик тулҡындар тейешле көскә (йәки тирбәлешкә) эйә булғанда есемгә әйләнә. Был ҡағиҙә ыңғай һәм кире уйҙарға ла бер үк ҡулланыла. Әммә иң ҡыҙығы - уй энергияһы йыйылырға, тупланырға һәләтле. Һәр саҡ, һеҙ нимәләр уйлағанда, мейегеҙҙән энергия тулҡыны сыға. Ул ҡасандыр һеҙ ебәргән һәм башҡаларҙан сыҡҡан энергияға ҡушыла. Дөйөм энергия етерлек кимәлдә ҡеүәт туплағас, теләкте ысынбарлыҡҡа әйләндерер көс барлыҡҡа килә.

Ғайса бәйғәмбәр: "Һорағыҙ, алырһығыҙ", - тигән. Барлыҡ һорауҙар ҡабатланып тора. Әгәр күп эшләргә тура килә тип уйлаһағыҙ, бар көсөгөҙҙө һалып эшләргә тура килгән мөхит булдыраһығыҙ. Шуға күрә зарланмағыҙ - нимә һорайһығыҙ, шуны алаһығыҙ.

Пьер МОРАНСИ.



## 11 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.00 Премьера. "Александр Проханов. Исповедь". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00, 11.00, 12.30, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]
10.05 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]
10.45 Ҡурай даны. [12+]
11.05 Новости недели (на рус.яз). [12+]
11.45, 13.45, 16.15, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Письма солдатам. [12+]
12.35, 3.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).
14.05 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 "Этно-краса". [6+]
15.30 Преград. Net. [6+]
15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 Специальный репортаж. [12+]
19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.30 Спектакль "Женская сюита". [12+]

## 12 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.15, 4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.30 Вести. Местное время.
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00, 11.00, 12.30, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]
10.05 "Ете егет". [12+]
10.45 Новости СВО (на баш. яз).
11.05, 23.00 Автограф. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 13.45, 16.15, 18.15, 4.00 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.35, 3.00 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.05 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00, 23.45 Письма солдатам. [12+]
19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.00 Новости (на баш. яз). [12+]
1.30 Спектакль "Хаджи Эфенди женится". [12+]

## 13 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Д/с Премьера. Проект "Цивилизации". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.15, 4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00, 11.00, 12.30, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]
10.05 Күстәнәс. [12+]
10.30 Территория женского счастья. [12+]
10.45, 13.45, 16.15, 17.45 Интервью. [12+]
11.05 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Патриот РФ. [12+]
12.35, 3.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.05 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 "КультУра". [6+]
15.30 МузКәрәҙ. [6+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.00 Новости (на баш. яз). [12+]
1.30 Спектакль "Любовница". [12+]

## 14 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Д/с Премьера. Проект "Цивилизации". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.15, 4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.46 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00, 11.00, 12.30, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]
10.05 Автограф. [12+]
10.45 История одного села. [12+]
11.05 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 13.45, 16.15 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.35 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).
14.05 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 Городок АЮЯ. [6+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00, 22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.30 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]

## 15 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.55 Д/ф "Любо "Любэ"!" [16+]
0.35, 1.20, 2.05, 2.50, 3.35, 4.20, 5.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
0.55 Х/ф "Фермерша". [12+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00, 18.00 "Йома". [6+]
10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.15, 19.45, 6.00 История одного села. [12+]
12.30, 4.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 4.00 Новости (на баш. яз).
14.00 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Детей много не бывает. [6+]
15.45 "Этно-краса". [6+]
16.00 Хазина. [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Д/с "Герои". [12+]
22.00 Своих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Творческий вечер Гульфии Юнусовой. [12+]
1.30 Бәхетнамә. [12+]
2.30 Спектакль "Кадриль". [12+]

## 16 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Д/ф Премьера. "Под небом Крыма". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [12+]
15.45 Д/ф Премьера. "Хлеб наш насущный". [12+]
16.55 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эксклюзив". [16+]
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.35 Д/ф Премьера. "Андрей Первозванный". [12+]
0.30, 1.15, 2.00, 2.45, 3.30, 4.15, 5.00, 5.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.45 "В кругу друзей".
12.45 "Доктор Мясников". [12+]
13.50 "Парад юмора". [16+]
16.30 Д/ф "Крым. 10 лет". [12+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Школа женского счастья". [16+]
0.40 Х/ф "Счастье можно дарить". [12+]
4.05 Х/ф "Судьба Марии". [16+]
5.45 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ҡурай даны". [12+]
8.00 "Бай". [12+]
8.30 "Ете егет". [12+]
9.15, 12.15, 19.00 Письма солдатам. [12+]
9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
9.45 Своих не бросаем. [12+]
10.00 Детей много не бывает. [6+]
10.30 Елкән. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". [6+]
11.45 МузКәрәҙ. [6+]
12.30 Күстәнәс. [12+]
13.00 Үткән ғүмер. [12+]
13.30 Башҡорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00, 4.45 Колесо времени. [12+]
17.00, 22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 2.30 Мой бурзян. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 Спектакль "Пролетая над гнездом кукушки". [12+]
4.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]
5.45 Аль-Фатиха. [6+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

## 17 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00, 0.45, 1.30, 2.15, 3.00, 3.45, 4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20, 15.20 Т/с "Сибириада". [12+]
16.45 Премьера. "Большая история". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 "Время".
23.00 Д/ф Премьера. "Крым. Как это было". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.05 Х/ф "Пока бьётся сердце". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00, 11.00, 14.00, 18.00 Вести.
9.15 "Формула еды". [12+]
9.40 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.30 Д/ф "Крым. Путь на Родину". [12+]
14.15 Х/ф "Лекари душ". [12+]
18.50 "Песни от всей души". [12+]
21.00 Вести недели.
23.00 Выборы Президента России-2024.
1.00 Москва. Кремль. Путин. Специальный выпуск.
1.30 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 12.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [6+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Ҡурай даны". [12+]
9.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
9.15 Орнамент. [12+]
9.30, 11.00, 15.30 Новости (на рус. яз).
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.15 Гора новостей. [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.45 "100 имен Башкортостана". [12+]
13.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00, 3.15 Дорога к храму. [6+]
16.00 Честно говоря. [12+]
16.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Образцовая башкирская семья. [12+]
19.00 Патриот РФ. [12+]
19.15, 2.30 Әлләсе... [6+]
20.00 Автограф. [12+]
20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).
22.15 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Д/ф "Центр ментального здоровья". [12+]
23.00 Концерт Государственного академического симфонического оркестра РБ. [12+]
0.00 Спектакль "Анфиса". [12+]
4.30 Счастливый час. [12+]
5.30 История одного села. [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (1) дүшәмбе | 5:42 | 5:59 | 7:42 | 13:30 | 17:13 | 19:10 | 20:55 |
| 12 (2) шишәмбе | 5:39 | 5:56 | 7:39 | 13:30 | 17:14 | 19:12 | 20:57 |
| 13 (3) шаршамбы | 5:37 | 5:53 | 7:37 | 13:30 | 17:16 | 19:14 | 20:59 |
| 14 (4) кесе йома | 5:34 | 5:50 | 7:34 | 13:30 | 17:17 | 19:16 | 21:02 |
| 15 (5) йома | 5:32 | 5:47 | 7:32 | 13:30 | 17:19 | 19:18 | 21:04 |
| 16 (6) шәмбе | 5:29 | 5:45 | 7:29 | 13:30 | 17:21 | 19:20 | 21:06 |
| 17 (7) йәкшәмбе | 5:27 | 5:42 | 7:27 | 13:30 | 17:22 | 19:22 | 21:09 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҠАТЫН-ҠЫҘ - УЛ ҺӘР САҠ БУЛА БӨЙӨК, ГҮЗӘЛ ҺЫНҒА ҠАЛАМ БАШЫМ ЭЙЕП

**8 мартта Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө билдәләнә, был турала һәр кемгә мәғлүм. Гөлләмәләр бүләк итеү, ҡотлау һүҙҙәре еткереү кеүек матур йолалары булған байрамдың тарихын да күптәр беләлер. Шулай ҙа тағы берҙе байҡау яһайыҡ.**

Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө булдырылыуға бер нисә ваҡиға сәбәпсе була. 1857 йылдың 8 мартында Нью-Йорктағы тегеү фабрикалары хеҙмәтсәндәре забастовкаға сыға. Улар ҡатын-ҡыҙҙарға эш хаҡын арттырыу, хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу, белем алыу, һайлауҙарҙа ҡатнашыу талаптарын ҡуя. Байрам көнөнөң тарихы 1910 йылда башлана: Икенсе халыҡ-ара конференцияла Клара Цеткин донъя кимәлендә билдәләргә тәҡдим итә. 1917 йылға тиклем ул март айында үткәрелһә лә, аныҡ бер датаға тура килмәй. Тик Беренсе донъя һуғышы алдынан ғына Рәсәй, Америка Европа ҡатын-ҡыҙҙары үҙенең беренсе байрамын 8 мартта ҡаршылай. Ә инде 1921 йылда 2-се Коммунистик ҡатын-ҡыҙҙар конференцияһы кураторҙары раҫлап ҡуя. 1930 йылдар аҙағына "ирҙәр эшендә" уңыш ҡаҙанған ҡатын-ҡыҙҙар байрам үҙәгендә була. 1966 йылда СССР-ҙа ял көнөнә әүерелә.

**Байрам тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт:**

- СССР-ҙа 8 марттың төп сәскәле символы - мимоза.
- Ҡатын-ҡыҙҙар байрамын Боронғо Римда ла билдәләгәндәр: гүзәл заттар шулай уҡ бүләктәр һәм ҡотлауҙар ҡабул иткән.
- Португалияла был байрамды ҡатын-ҡыҙҙар һис ҡасан ир-егеттәр эргәһендә ҡаршыламай, уларҙа ҡыҙҙар аулағы ойоштороу йолаға әүерелгән.
- 1910 йылдың 8 мартында Аэронавтика халыҡ-ара федерацияһы иң тәүге ҡатын-ҡыҙ пилотҡа - француз осоусыһы Элиз де Ларошҡа лицензия тапшыра. Әммә ул ваҡытта әле 8 март байрам көнө тип иҫәпләнмәгән.
- Хәҙер 8 мартты рәсми рәүештә 31 илдә билдәләйҙәр, әммә беҙҙәге кеүек матур байрам йолалары, ял көндәре күптәрендә юҡ.
- Төрлө һорау алыуҙар һөҙөмтәһендә 8 март айҡанлы иң көтөлгән бүләк - ул сәскәләр булыуы асыҡланған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың 44 проценты шулай тип яуап биргән. Ә бына ир-егеттәрҙең 55 проценты гөлләмә бүләк итергә әҙер булыуын әйткән. Ювелир биҙәүестәр менән тап киреһе килеп сыға: бындай бүләкте гүзәл заттың 15-16 проценты теләй, әммә ир-егеттәрҙең тик 9 проценты ғына алып бирергә әҙер.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**8-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Аҡсабан. Йофар. Бланк. Ҡама. Бөркөт. Марал. Лувр. Шаһ. Ре. Аяҡ. Андыҙ. Саҙаҡа. Биҙгәләк. Туғаҙаҡ. Таяу. Ҡарт. Си. Сыр. Әүен. Ҡаш.

**Вертикаль буйынса:** Мөншөгөр. Ҡарасабан. Ҡобау. Бау. Юл. Ғәскәр. Аяҙ. Сөй. Аполлон. Сер. Күкен. Лыҡа. Нард. Бәлеш. Скаут. Таш. Һөҙһөт. Көрт. Терпе. Айыу.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 март "Килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева инсц.), драмаһы менән Стәрлетамаҡ ҡалаһында гастролдә. 16+

**14 март "Килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева инсц.), драма. 16+

**15 март "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц), драма. 12+

**16 март "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 18.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15 март "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсон). 18.00 0+

**"Каменный гость"** (А. Пушкин). 19.00 12+

**16 март "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский). 12.00, 15.00 0+

**17 март "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 март Премьера! "Мөхәббәт иле"** концерт. 6+

**15 март "Vivat, Бах!"** концерт. 6+

**16 март "В ожидании чуда"** арфа һәм виолончель. 11.00 0+

**"Музыкальный этикет"** 4-7 йәштәге балалар өсөн. 13.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**11 март "С чего начинается Родина"** әҙәби-музыкаль лекторий. 14.00 6+

**15 март "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов), шиғри драма. 12+

**16 март "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Тапшырылмаған хаттар"** (С. Әбдрәхимова), трагикомедияһы менән **11 март -** Иҫке Сибай, **12 март -** Аҡъяр, **14 март -** Йылайыр, **15 март -** Кәрешкә, **16 март -** Йәнтеш ауылында гастролдәр. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 март "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+

## БР Милли музейы

**12 март "Масленица"** сараһы. 12.00 6+

**15 март** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

**16 март "Боронғо һунарсылар эҙенән"** сара. 15.00 6+

*АҢЛАТАБЫҘ*

# АҠСАНДЫ ҠАЙТАР

**Түләүле дауаханала бала тапҡан өсөн һалым ҡайтармаһын нисек алырға?**

Үҙ аҡсаң иҫәбенә бала табыуға төҙөлгән килешеү өсөн һалым ҡайтармаһы алыу маҡсатында Федераль һалым хеҙмәтенә түбәндә күрһәтелгән документтарҙы тапшырырға кәрәк: медицина учреждениеһы (бала табыу йорто) менән төҙөлгән контракт күсермәһе; чектар һәм медицина хеҙмәттәре өсөн түләү тураһында белешмә; башҡарылған эштәр хаҡында акт.

Бала табыу хаҡының 13 процентын ҡайтарырға мөмкин. Уның иң ҙур күләме - 15 600 һум. Социаль ҡайтарма физик шәхестәрҙең табышына 13 процентлыҡ ставка буйынса һалым түләгән Рәсәй граждандарына ғына ҡаралған. Профессиональ килемгә 4 йәки 6 процент һалым түләгән үҙмәшғүлдәр һалым ҡайтармаһын алмай.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ҺЫУЫҘ ҠОЙМАҒЫНА САҠЫРҘЫҠ

**Ғафури районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының инде онотола яҙған ниндәйҙер милли йолаланы тергеҙеп, ауылдарҙа үткән йыйындарҙа уны халыҡ алдында сәхнәләштереп тә ҡурһәтеүе традицияға әйләнеп китте.**




Мәсәләнгә, әле яңыраҡ ҡына Ҡауарҙыла үткән сарала "Йолоҡ йола"һы менән танышып ҡайтҡайныҡ. Февраль аҙағында үҙебеҙ, йәки Яугилде ауылы ағинәйҙәре район ауылдарындағы ағинәйҙәрҙе "Һыуыҙ ҡоймағы"нан ауыҙ итергә саҡырҙыҡ. Һысынында, "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡан ауылыбыҙҙа бындай саралары аҙна һайын тиерлек үткәреп торабыҙ һәм уларҙы ойоштороу башлыса беҙҙең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы инендә. Был юлы ла ошо конкурс сиктәрендә ойошторолған байрамыбыҙға күп ауылдарҙан ағинәйҙәр йыйылыуы ла, район Советы рәйесе, Ғафури районы башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Фаил Һәҙиәт улының ауыл ағинәйҙәре етәкселәренә район хакимиәте башлығының Рәхмәт хаттарын тапшырырға килеп етеүе лә күңелде үҫтерҙе. Етәкселәребеҙҙең беҙҙе, апаруҡ ҡына йәштәге ағинәйҙәрҙе, күтәрмәләп, маҡтап, башҡарған эштәребеҙҙе билдәләп тороуы, әлбиттә, хуплауға лайыҡ.

Байрам тураһында әйткәндә, февраль аҙағы, март башында һыйырҙарыбыҙ быҙаулай башлай, бына шул саҡта күрше-тирәләрҙе, туған-тыумасаны ыуыҙ сәйенә, ыуыҙ ҡоймағына саҡырып алыу йолаһы элек-электән йәшәп килә. Ҡунаҡ саҡырғас, әҙерләнмәй булмай: алдан уҡ һыйырҙары быҙаулаған ауылдаштарҙан ыуыҙ һөтө йыйып, туңдырып ҡуйҙыҡ. Был йолабыҙ "Һыуыҙ ҡоймағы" тип аталһа ла, ҡоймаҡ ҡына тәҡдим итмәнек ҡунаҡтарға. Һыуыҙҙан әҙерләп була торған ризыҡтарҙың төрлөһөн бешерҙек. Һыуыҙ ҡоймағын барыбыҙ ҙа бешерә беләбеҙ, йомортҡа ҡушып, ыуыҙҙы иретеп тә ашағаныбыҙ бар, ә бына ыуыҙ ашын әҙерләгәнебеҙ юҡ икән, ыуыҙ сырын да тәмләп ҡарағаныбыҙ булмаған. Үҙебеҙ ҙә был ризыҡтарҙы тәүләп әҙерләп, ҡунаҡтар менән бергә ауыҙ иттек. "Беренсе ҡоймаҡ уңмай" тиһәләр ҙә, беҙҙең "Һыуыҙ ҡоймағы"быҙ бик уңды, тип уйлайым.

"Ағы барҙың - туғы бар", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Һөтө бар икән, беҙҙең башҡорт ас булмаҫ, сөнки башҡорттарҙа ғына ҡорот эшләйҙәр, уны ыҫлайҙар, киптерәләр, сөсө, әсе ҡоротто йәш көйө лә ҡулланалар. Эркет һыуы, айран, ҡатыҡ, ҡаймаҡ, эремсек, һөҙмә тураһында әйтергә лә түгел. Бына ошо һөт ризыҡтарын әҙерләү серҙәрен беҙҙең ағинәйҙәр йәш быуынға еткерә лә инде.

Беҙҙең Ғафури районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының бер матур эстафетаһы бар. Үҙендә бер байрам-сара үткәргән ауыл ағинәйҙәре эстафета штандартын икенсе ауыл ағинәйҙәренә тапшыра. Ҡауарҙы ағинәйҙәренән алған күсмә штандартка беҙ ҙә үҙебеҙҙең күмәк фотобыҙҙы ҡорама менән биҙәп беркетеп, эстафетаны киләһе ҡабул итеүсегә тапшырырға әҙерләнек. Шундай күсмә штандарттың булыуы яуаплылыҡты ла арттыра, ағинәйҙәр хәрәкәтенең эшен әүҙемләштерә лә. Осрашып, аралашып тороуҙар дауам итәсәк әле.

Әйткәндәй, ошо йыйында Бурлы ауыл биләмәһе башлығы Рәүфә Ғәбдрәхим ҡыҙы күптән инде "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаһы булырға теләүен белдерҙе. Ағинәйҙәр уны тантаналы рәүештә үҙ рәтенә ҡабул итеп, нисә йәш булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт ҡатын-ҡыҙы үҙенең ағинәйлек асылына ҡайтырға, донъябыҙҙы ҡотҡарыусы иманлы, кәңәшле, йолалы, милли кейемле әсәй, өләсәй вазифаһында булырға тейеш, тигән хәҡиҡәтте тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрҙө.

**Лилиә МИНИЯЗОВА,**
**Ғафури районы**
**Яугилде ауылы ағинәйе.**

---

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ҺЕРЕЛӘНМӘ!

**"Һ" өнөнә башланған һүҙҙәр башҡорт телендә бигерәк күп. Телебеҙҙең боронғолоғон раҫлай улар, үҙенсәлеген һаҡлай. Уларҙың бер нисәһен ҡабатлап, һүҙлек хәтеренә нығытайыҡ. Һаумыһығыҙ! Шулай өндәшкәндә лә туған телебеҙ өндәре ҡолаҡты иркәләп ала.**

**Һаҙаған.** Һаҙаған - ул, тимәк, күп йыллыҡ, оҙаҡ һаҡланған, былтырғы. Кешегә ҡарата - оҙон ғүмерле мәғәнәһендә. *Һаҙаған бесән. Һаҙаған ҡарағайҙар. Һаҙаған ҡарт (йәғни, оҙаҡ йәшәгән).*

**Һарығат.** "Һарығат" - "Ҡарағат"ҡа яңғыраш һүҙ. Һарығат - шул уҡ һырғанаҡ, йәғни, руссаһы "облепиха". *Һарығат - бик файҙалы емеш. Баҡсала һарығат та үҫә.*

**Һере.** Был һүҙ ҙә хәҙер һирәгерәк ишетелә шул. Һере - көслә, ауырлыҡҡа бирешмәй торған. *Һере егет. Һере булыу.*

Икенсе мәғәнәһе - ныҡыш, еңмеш. Һере холоҡло булыу. Һере ҡыланыу.

**Һереләнеү. 1.** Сыҙамлы, бирешмәүсән булыу. *Йәштәр әрме хеҙмәтендә сынығып, һереләнеп ҡайта.* **2.** Ныҡышыу, еңмешләнеү. *Юҡҡа ғына һереләнеү.*

**Һыҙағайым.** Һыҙағайым - ул урман һыҙаты. *Бәҫ нурына ҡойонған һыҙағайым ҡышҡы ҡояшта күңелле ялтырай. Һыҙағайымда саңғы шыуҙыҡ.*

**Һыҡы. 1.** Ҡарға бөйле ҡулланылған һүҙ, "епшек" тигәнде белдерә. *Һыҡы ҡар ағастарға һырый.* **2.** Һыҡы "тайғаҡ булмаған" тигән мәғәнәлә лә йөрөй. *Һыҡы юл. Һыҡы һуҡмаҡтан барыу.*

**Шулай итеп, туған телде өйрәнгәндә һереләнеү ҙә урынлы.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

---

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАТЫНЫҢ ЯҠШЫ БУЛҺА...

## ожмах кәрәкмәй

Аҡылыңды камиллаштырыу өсөн күп ятларға түгел, ә күп уйларға кәрәк.

**(Рене Декарт).**

Буйҙаҡ тормош - тамуҡ, ишле тормош - чума.

**(Роберт Бартон).**

Бай булырға теләһәң, аҡса табырға ғына түгел, аҡсаны тотонорға ла өйрән.

**(Бенджамин Франклин).**

Үҙ ихтыярың менән етәкселек итә алмаһаң, башҡалар менән дә етәкселек итә алмаҫһың.

**(Гарриет Стоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер төркөм халыҡ бурҙы тотоп, уны хөкөм итеү өсөн Уҡытыусыға алып килә: "Беҙ өйҙәребеҙгә төшкән, ҡош-ҡортобоҙҙо урлаған бурҙы тоттоҡ, - ти улар. - Уның менән ни ҡылырға икәнен әйтсә, хөрмәтле Уҡытыусы: баҙға төшөрөп ябып ҡуйырғамы, әллә хөкөм итер өсөн судья ҡулына тапшырырғамы?"**

**- Был кеше ысынлап та яуыз булһа, уның менән ни эшләһәгеҙ ҙә эшләрһегеҙ. Әгәр ҙә ул яуыз булмаһа, мин нисек теләйем, шулай эшләрһегеҙ, - ти Уҡытыусы.**

**Халыҡ уның әйткәне менән килешә, сөнки улар был бурҙың яуыз икәненә ныҡлап инанған була. Уҡытыусы бур эргәһенә килә һәм: "Һин ысынлап та бурмы?"- тип һорай. "Эйе", - ти бур. "Һин был кешеләрҙең өйҙәренә төшөп, әйберҙәрен, ҡош-ҡортон урлаңыңмы?" - тип һорай Уҡытыусы. "Эйе" - тип яуаплай бур. Халыҡ: "Ниңә уға тел әрәм итәһегеҙ. Үҙенең бур икәнен үҙе уҡ әйтеп тора бит..." тип шаулаша башлай. Уҡытыусы һорау алыуҙы дауам итә һәм: "Ә ни өсөн һин урлаштың?" - ти. "Минең балаларым ашарға теләй. Ҡатыңымдың йүнле кейеме лә юҡ, һыуыҡта ла яланаяҡ йөрөй. Уларға ҡарап, йөрәгем өҙөлә. Мин балаларымды ас итмәҫ өсөн урлашыуға барҙым..." - ти бур. Шул саҡ Уҡытыусы ҡарашын халыҡҡа йүнәлтә һәм былай ти: "Әгәр ҙә был кешенең урлашыу сәбәбе усал ниәттән тип иҫәпләйһегеҙ икән, уны баҙға төшөрөп ябып ҡуя алаһығыҙ. Әгәр ҙә был кешенең урлашыу сәбәбе изге ниәттән икән, тимәк, уны яуыз тип атап булмай. Ул саҡта һеҙ мин сығарған хөкөм менән килешергә тейешһегеҙ..."**

**Халыҡ тынып ҡала, бераҡ ҙа Уҡытыусының әйткәненә ҡаршы килергә батырсылыҡ итмәй. Уҡытыусы дауам итә: "Был кешегә кейемдәр һәм аҙыҡ килтерегеҙ. Уға үҙегеҙҙең ышаныслығыҙҙы белдерегеҙ һәм ярҙам ҡулы һуҙығыҙ. Шул саҡта һеҙҙең хөкөмөгөҙ ғәҙел булыр. Үс алыуҙы икейөҙләләргә, Алла хәҡиҡәтен белмәгәндәргә ҡалдырайыҡ. Һеҙ артабан да шулай итегеҙ: кемдер юлдан яҙа икән, уға бәләгә ҡалған үҙ ағайығыҙға ҡараған кеүек ҡарағыҙ. Шул саҡта йөрәгегеҙ ғәҙел хөкөмдө үҙе сығарыр..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһенә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идарылығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
6 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111495